ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

11-17 ноябрь (ҡырпағай) 2023

№44 (1086)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

**Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! "Киске Өфө" (индексы ПР905) гәзите менән бергә булыусы аңлы, зыялы уҡыусыларыбыҙҙы баҫмабыҙға 857 һум 04 тингә 2024 йылдың беренсе яртыһы өсөн дә яҙылып ҡуйырға саҡырабыҙ. Ә беҙ һеҙҙе рухиәт менән һуғарыуҙы, кәрәкле мәғлүмәттәр еткереүҙе дауам итербеҙ, тигән вәғәҙәбеҙҙе яңыртабыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер матур ғына китаптарға лайыҡ буласағын да онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ожмах баҡсаһылай ғына ине илем...**



6

**Йөрәгем төндә йондоҙ йотҡан...**

Был ялҡынды кемгә һуҙаһы?



8-9

**Мәрйәм апай мәктәбе**



10

**Филармонияла...**

юбилей миҙгеле башланды



11

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Йорт эттәрен урамда алып йөрөү ҡағиҙәләрен эте булған кеше лә, булмағаны ла белергә тейеш. Ә һеҙ был закон менән танышмы?

***Евгения ХАФИЗОВА, Өфө ҡалаһы Орджоникидзе районының прокурор ярҙамсыһы:*** Мәғлүм булыуынса, хайуандар менән мөғәмәләлә яуаплылыҡ тураһындағы Федераль закон дүрт аяҡлы дуҫтарыбыҙҙы һаҡлау маҡсатын ғына түгел, бәлки, кешелеклелек принциптарын үтәү, граждандарҙың хәүефһеҙлеген һәм башҡа хоҡуҡтарын тәьмин итеү мөмкинлектәрен дә күҙҙә тота. Был хаҡта бөтөн ил күләмендә бик күп фекер алышыуҙар, бәхәстәр булып үтте һәм ул әле лә көнүҙәк булып ҡала килә, сөнки йортонда эт тотоусы ҡайһы берәүҙәрҙең закон талаптарын һанға һуҡмауы арҡаһында йыш ҡына күңелһеҙ, хатта фажиғәле хәлдәрҙең шаһиты булырға тура килә. Бында мин закондың эт аҫрау өсөн кәрәкле шарттар булдырыу, санитар-эпидемиологик нормативтар һәм ҡағиҙәләренә туҡталып тормайынса, редакция һорауындағы мәсьәләгә, йәғни ҡайһы бер граждандарҙың эттәрен морондоҡһоҙ һәм етәкһеҙ алып сығыуҙары һәм уларҙың әҙемтәләре хаҡында бер нисә һүҙ әйтмәксемен. Был йәһәттән булып торған фажиғәләр эт аҫраусыларҙың әлеге законды, йәнәһе лә, белмәүенә бәйле килеп тыуған хәлдә лә был уларҙы яуаплылыҡтан ҡотҡармай; закон положениеларын боҙоусылар ғәҙел яҙаһын алырға тейеш. Унан һуң йортонда эт тоторға ҡарар иткән кешенең ошо өлкәләге закон һәм тәртиптәр менән хәбәрҙар булмауына ышаныуы ла ҡыйын, ә инде уны белә күрә боҙоуы, тимәк, һанға һуҡмауы, ғәфү итерлек хәл түгел. Ҡала шарттарындағы йорттарҙа эт тотоусылар иң элек үҙҙәренең теләктәрен ҡайғыртырға түгел, ә күршеләренең, шулай уҡ башҡа граждандарҙың законлы мәнфәғәттәренән сығып эш итергә бурыслы. Бының өсөн түбәндәге талаптар һис һүҙһеҙ үтәлергә тейеш: эттәрҙе йөрөтөргә алып сыҡҡан ваҡытта бәйҙән ысҡындырмаҫҡа, уларҙың автомобиль юлдарына сығыуына, торлаҡ йорт ихатаһына, балаларҙың уйын һәм спорт майҙансыҡтарына йә лифтҡа килеп инеүенә юл ҡуймаҫҡа кәрәк.

Закондың был пункты айырыуса хәүефле һәм агрессив иҫәпләнгән ошондай эттәрҙең морондоҡһоҙ һәм бәйһеҙ йөрөүенә юл ҡуймауҙы талап итә: Аҡбаш, Америка бандогы, Амбульдог, Бразилия бульдогы, Питбульмастиф, Төньяҡ Кавказ эте һәм уларҙың ҡатнаш тоҡомдары. Бындай эттәрҙе, уларҙың ниндәй биләмәлә йөрөтөлөүенә ҡарамаҫтан, ирекле ебәреү ҡәтғи тыйыла; хәүефле һәм уҫал эттәрҙе махсус кәртәләнгән һәм эт хужаһының хосуси милкендәге ер участкаһында йөрөтөргә генә рөхсәт ителә. Был майҙанға ингән урында уҫал эт хаҡында иҫкәртеүсе яҙыу элеү мотлаҡ.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## ШУНДАЙ ТАШЛАМА...

**Украиналағы махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға, уларҙың балаларына колледждарға һәм техникумдарға сиратһыҙ уҡырға инеү хоҡуғы бирелә, тип хәбәр итте Федерация Советы рәйесенең беренсе урынбаҫары, махсус хәрби операция мәсьәләләре буйынса эшсе төркөм етәксеһе Андрей Турчак.**

Билдәләнеүенсә, мәктәп аттестатындағы һөҙөмтәләр, маҡсатлы уҡытыу килешеүенең булыу-булмауы мөһим түгел. Дәүләт Думаһына тейешле төҙәтмәләр индерелде. "Ҡануниәткә үҙгәрештәр бындай абитуриенттарҙың бөтөнләй конкурсһыҙ уҡырға инеүен күҙ уңында тотмай. Әммә башҡа тигеҙ шарттарҙа (мәҫәлән, бер үк балл) махсус операцияла ҡатнашыусылар һәм уларҙың балалары өҫтөнлөккә эйә. Шул уҡ ваҡытта махсус хәрби операция барышында һәләк булған йәки ҡаты яраланған хәрбиҙәрҙең һәм көс ведомстволары хеҙмәткәрҙәренең балалары кадет, шулай уҡ башҡа хәрби училищеларға конкурсһыҙ уҡырға инә ала", - тине Турчак.

АФАРИН!

## УҠЫТЫУСЫ ЕҢЕҮЕ

**Учалы ауылы Башҡорт гимназияһының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Гөлдәр Хәкимова "Милләт ғорурлығы - 2023" Бөтә Рәсәй премияһының "Туған телдәрҙе һаҡлауға һәм үҫтереүгә индергән өлөшө өсөн" номинацияһында еңеү яуланы. Еңеүселәрҙе бүләкләү тантанаһы Мәскәүҙә үтте, тип хәбәр иттеләр Башҡортостандың Мәғариф министрлығынан.**



Гөлдәр Хәкимованың эшмәкәрлеге башҡорт телен һаҡлауға һәм үҫтереүгә, уҡыусыларҙың тыуған яҡ тарихы буйынса белемен тәрәнәйтеүгә, башҡорт халҡының ғөрөф-ғәҙәттәренә, йолаларына, уның мәҙәниәтенә һөйөү һәм хөрмәт тойғоһо тәрбиәләүгә йүнәлтелгән. Педагог үҙенең эшләгән осоронда Рәсәй, республика, муниципаль кимәлдәге олимпиадалар, ижади конкурстар, шулай уҡ тикшеренеү проекттары еңеүселәрен һәм призерҙарын әҙерләгән. "Һаумы, һаумы, әкиәт!", шулай уҡ "Урал батыр" эпосын яттан һөйләүселәр конкурстарында уның тәрбиәләнеүселәре үҙенсәлекле, талантлы сығыштары менән таң ҡалдыра һәм призлы урындарҙан ҡалмай. Мәҫәлән, "Урал батыр" эпосын яттан һөйләп, республикала ғына түгел, хатта Мәскәүҙә, Үҙәк телевидение алып барған проекттарҙа ҡатнашҡан, төрлө маҡтауҙар һәм наградаларға лайыҡ булған Ләйсән Золотарева ла - уның уҡыусыһы.

Педагог һәм остаз йылында Гөлдәр Хәкимова туған башҡорт телен өйрәнеүҙе ойоштороуҙа, милли рухи ҡиммәттәрҙе һаҡлауҙа уңыштары һәм эшендәге юғары күрһәткестәре өсөн "Башҡортостандың мәғариф отличнигы" билдәһе менән бүләкләнгән, "Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы" тигән маҡтаулы исемгә лайыҡ булған.

12+

✔ *Туған теленән мәхрүм бала бит халҡыбыҙҙың рухи байлығынан да мәхрүм ҡала. Күңелен нимә үҫтерер һуң уның, туған телендә рәхәтләнеп һөйләшеп, ошо телдең моңонда ҡойонмағас?*



ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

# ШИҒРИ ҺҮҘ...

## нығыраҡ ышандыра



**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәпләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**

***Әнисә МАХИЙӘНОВА, мәҙәниәт ветераны, Әбйәлил районының "Йәйғор" әҙәби ойошмаһы ағзаһы, "Йөрәк һүҙе" шиғриәт бәйгеһендә 2021, 2023 йылдарҙа "Йыл шиғыры" номинацияһы еңеүсеһе:*** Бөгөн милләттәштәребеҙҙе туған тел һәм тыуған ер мәсьәләһе күберәк борсой. Мин шағирә булһам да, ижадымды ниндәйҙер юғары кимәлдәге шиғриәт тип баһаларға йөрьәт итмәйем. Беҙ ауыл кешеләре һәм күңелебеҙҙе һыҙландырған темаларға ябай ғына итеп үҙебеҙсә йөрәк һүҙебеҙҙе яҙабыҙ. Шуныһы ҡыҙыҡ, халыҡ шиғри һүҙҙең көсөнә ышана, минә республиканың һәр төбәгенән шылтыраталар, темалар тәҡдим итәләр, аһ-зарҙарын һөйләйҙәр. Әйтеүемсә, күптәрҙе тап тел һәм ер мәсьәләһе борсой.

Тел тигәндә, ул мотлаҡ мәктәпкә барып тоташа хәҙер. Башҡорт мәктәптәре ябыла, уларҙы ҙурыраҡ мәктәптәргә ҡушалар. Башҡорт теле дәрестәре йылдан-йыл кәмей, тиҙәр. Былар һуңғы арала бөтөн кимәлдә лә гел һөйләнелә торған темаға әйләнеп китте. Тик гел генә хәүефте ситтән эҙләргә ярамай, ошо хәлгә килеп етеүебеҙҙә үҙебеҙҙең дә ғәйеп бар бит. Ауылдарҙа урамға сығып ҡарағыҙ әле: бәләкәй генә балалар русса һөйләшеп йөрөй. Беҙ үҫкән мәлдә лә ауылдан ситкә сыҡҡанда, мәктәптән һуң белем алғанда рус теле кәрәк ине, тик әсәйҙәребеҙ быны сәбәп итеп үҙ туған телебеҙҙән мәхрүм итмәне! Берәү ҙә рус телен белмәйенсә, өйҙә бикләнеп ултырманы, уҡыныҡ, һөнәр үҙләштерҙек, телен дә шунда ҡуша өйрәндек. Кәм-хур булманыҡ. Ә хәҙер башҡорттар балаһы менән русса һөйләшә, был уға тормошта ҙур юлдар асасаҡ, тиҙәр. Шулай булһа ярай ҙа ул. Ә туған теленән мәхрүм бала бит халҡыбыҙҙың рухи байлығынан да мәхрүм ҡала. Күңелен нимә үҫтерер һуң уның, туған телендә рәхәтләнеп һөйләшеп, ошо телдең моңонда ҡойонмағас? Хәҙерге әсәйҙәр өйҙә туған телгә һөйөү уята алмаймы, әллә тел бәләүҙең әһәмиәтен аңламаймы?

Ер мәсьәләһендә иһә хәлдәр ҡатмарлыраҡтыр. Янйраҡ ғүмере буйы комбайнсы булып, иген иккән бер уҙаман: "Дүрт тарафтың ҡайһыһына боролоп ҡараһам да, ерҙәр сит милләт кешеләренә ҡуртымға бирелгән", - ти. Был хаҡ, хатта ҡулдәрҙең хужаһы бар. Үҙ халҡыбыҙҙың ошо ерҙәрҙе үҙе ҡуртымға алырлыҡ боло юҡ, быныһы ла йәшерен-батырын түгел. Ер эше - һүҙ һөйләү түгел, ерҙән уңыш ала башлар өсөн ҡаратырышлыҡ менән күп аҡса кәрәк. Башлап ҡарап, ташлағандар бар. Битарафлыҡ, эш яратмауҙан түгел был, ситтән килгән аҡсаның ҡуләме лә роль уйнайҙыр, үҙебеҙҙекеләр был эштән баш тартырға мәжбүр.

Көндәлек тормош темалар биреп кенә тора. Теркәп ҡуям да, ниндәй генә һүҙҙәр менән әйтһәм, халыҡҡа етер икән, тип уйлап йөрөйөм. Ни йәшәп, ни донъя көтөп, ни бала үҫтереп өлгөрмәгән һыу һөләгә кеүек егеттәребеҙҙе гүргә инеп ятыуына үҙәгем өҙөлә. Ир баланың яҙмышы шулайҙыр инде, ир булып тыуғас, ил яҙмышы уның инендә. Тел, еребеҙҙе үҙебеҙ һаҡлай алабыҙ әле, бына ошо ғүмерҙәрҙе нисек һаҡларға? Милләтебеҙҙең киләсәге ине бит был балалар ҙа.

Уйлаһаң, уйҙарыңдан уйылып китерлек. Халҡыма һүҙ менән булһа ла терәк булайым тип, ҡәләмгә тотонорға мәжбүр булам. Ни тиһәң дә, һүҙҙең дә, уйҙың да көсө бар. Шуға ла милләтебеҙҙең киләсәге яҡты булһын тигән яҡты уйҙарҙа булайыҡ, именлек юрайыҡ.

**Ләйсән НАФИҠОВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ? *Йорт эттәрен урамда алып йөрөү ҡағиҙәләрен эте булған кеше лә, булмағаны ла белергә тейеш. Ә һеҙ был закон менән танышмы?*

***Ирек СӘМИҒУЛЛИН, хеҙмәт ветераны:*** Һеҙҙең был һорау көтөлмәгән нәмә түгел, ә теңкәгә тейгән һәм бөгөнгө көндә торған һайын киҫкенләшә барған ҙур, хәүефле мәсьәлә ул. Уйлап ҡараһаң, хәҙер нисә йыл инде депутаттар ҙа, башҡарма власть органдары ла, йәмәғәтселек тә берәҙәк һәм йорт эттәре мәсьәләһен сисә алмай эт була! Көлкөнән бигерәк асыу килә: беҙҙә ҡасан закондар һәм власть органдары ҡарарҙары эшләй башлар икән һәм күрергә насип булырмы шул көндө? Үтәлмәгәс, ундай күрһәтмә-ҡарарҙарҙы нимә тип халыҡ иғтибарына сығарырға? Үҙҙәрен көлкөгә генә ҡалдырыу бит был. Ҡыҙыбыраҡ киттем, асыу килә: ана шул баяғы эттәр мәсьәләһен әйтәм инде. Халыҡтың матди һәм көнкүреш хәлдәрен яҡшыртыусы ҡарарҙарҙың үтәлмәүенә күнеккәнбеҙ инде, ә был бит өлкәндәрҙең генә түгел, балаларҙың ғүмеренә, һаулығына хәүеф менән янаусы проблема.

Бына, мәсәлән, гәзиттән ҡырҡып алып ҡуйған шундай бер документ: Өфө ҡала хакимиәтенең быйылғы 21 августа баҫып сығарылған "Йорт хайуандарын йөрөтөү урындары хаҡында"ғы ҡарары. Унда баш ҡаланың йортта аҫралған эттәрҙе (һуғарыу тип әйтке килә!) тышта йөрөтөү билдәмәләре билдәләп сығылған. Кемдәр уны күрмәй ҡалған, бына ул исемлек: Якутов мәҙәни һәм ял паркы, Нефтехимиктар паркы, "Өфө йүкәләре" сәләмәтлек һуҡмағы биләмәһе (Парк урамы тирәһе), Архитектор Кәлимуллин урамының (Дим районы) 1-се йорто тирәһе, Ҡариҙел йылғаһы яр буйы урамының 45-се йорт тирәһе (Сипайлово), Октябрь проспектының 106/3 йорт тирәһе... Башҡаларын артабан әйтеп тормаһам да күрәһегеҙ: йә кешеләр бала-сағалары менән ял иткән, йә спорт менән шөғөлләнгән, йә торлаҡ йорт яны тирәләй эт хужалары хайуанын "һуғарып" йөрөргә тейеш! Ә бит уларҙың күбеһе этен етәктә йөрөтмәй, үҙ ихтыярына ебәрә лә үҙе телефонынан айырыла алмай. Кисә генә үҙем шаһит булдым: сабып килгән эттән ҡурҡып, шунда уйнап йөрөгән бер ҡыҙсыҡ шарылдап илап ебәрҙе. Ә өләсәһе әхирәте менән ләстит һата. Эт, әлбиттә, балаға теймәне, киреһенсә, уны бала күреп уйнарға итте, буғай, тик бала бит быны белмәй, ул ҡурҡа. Етмәһә, эт хужаһы, теймәй бит ул, ҡурҡмағыҙ, тип аҡыл өйрәтә башлай. Ә эттең уйындағын кем белә? Ул бит бала ҡулындағы тәмле ҡаласты күреп тә, өләсәһенең хушбуй еҫен оҡшатмай ырылдауы ла бар. Бындай хәлдәр беҙҙең Сипайловолағы әлеге Ҡариҙел яры урамының дамбаһында йыш осрай, сөнки микрорайондың бөтөн эте: әйәләһе лә, берәҙәге лә ошонда йыйыла. Бер яҡтан, был аңлашыла ла: ҙур һыу яны, урманлы яр буйы - сыҫҡан тотамы, ҡуян баҫтырамы - эттәр өсөн лафа. Тик бына хужалары эттәрен нишләптер кеше йөрөргә сыҡҡан, спортсылар йүгергән, велосипедта елдергән махсус тротуарҙан алып йөрөргә ярата. Шунлыҡтан, икенсе бер мәсьәлә килеп тыуа: юл буйҙарында, газондарҙа аяҡ баҫыр урын ҡалмай: эттәр бында иркенләп аҙым һайын үҙ ихтыяждарын башҡара, тфү!

Ҡыҙым биш йыл элек Японияла булып ҡайтҡайны, ундағы тәртипкә, халыҡтың мәҙәнилегенә иҫе киткән. Эттәрен йөрөтөргә алып сыҡҡан япондар бер ҡулы менән эт ҡайышын тотһа, икенсе ҡулында - шыптыр моҡсай менән бәләкәй генә һоҫҡо, имеш. Ышаныргамы, юҡмы бындай хәлгә... Этенең бысрағын моҡсайға һалып, сүп контейнерына йыбанмай алып барып ташлап китәләр икән!.. Беҙҙә бындай хәлде күҙ алдына килтерәһегеҙме, йәмәғәт? Тәртип булдырыр өсөн сығарылған ҡарарҙар гәзиттә баҫылып сыҡҡас та онотола икән, ошо ҡарарҙарҙың үтәлеше тикшерелмәй, рейдтар үткәрелмәй, закон-ҡарарҙы үтәмәгән кешеләр административ яҙаға тарттырылмай икән (мәсәлән, штраф сәпәү бик һөҙөмтәле булыр ине), әлбиттә, беҙҙә бер ниндәй ҙә тәртип булмаясаҡ.

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# АГИТАЦИЯ



**Иҫ белә башлаған сағымдан бер мәғәнәһеҙ, хәҙерге көн күҙлегенән йығылып ятып көлөрлөк ваҡиға хәтеремә уйылып ҡалған. Ул ваҡытта малдарҙа төрлө сирҙәр йоғоп, ауылдағы барлыҡ эттәрҙе һыпырып атып, тейәп алып китәләр ине. Беҙ, малайҙар, кеҫәләрҙә йоҙроҡ төйнәп, түгелеп илап ҡалабыҙ.**

Бер мәл ауылыбыҙ клубы тирәһендә быға беҙ ишетмәгән "Агитация" тигән ят һүҙ яңғыраны. Түбән яҡҡа барып, күрше малай был ят һүҙҙең нимә аңлатҡанын да белеп ҡайтҡан. Баҡтиһәң, эт атыусылар килеп, ауылдағы барлыҡ аҡ төҫтәге эттәрҙе юҡ итәсәктәр. Йәнәһе, йәшүрҙе һыйырҙар аҡ эттәрҙән йоҡтора. Кемдәрҙер аҡ көсөгөн урманға йәшерергә йүнәлде, икенселәр...

Күпме көтһәк тә, эт атыусылар күренмәне. Баҡһаң, клуб яғында ишетелгән "агитация" тигән һүҙҙе бер мәрәкәсе "аҡ эт атыусылар" тип аңлатып маташҡан икән. Һуңынан, Шерлок Холмстың "дедукция ысулы" менән бындай этлек башына килер ике кешене билдәләп ҡуйҙым шулай ҙа: Әбделхәй Буранбаев йә Имамитдин Байрамғолов. Тик үҙҙәренән һорашып өлгөрмәнем. Хәҙер һуң, икеһе лә ысын донъяла. Барғас, һорашырмын әле. Улар иҫ киткес кинәйәселәр, юморға бай инсандар ине.

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔Уҙған тәүлектә Башҡортостанда коронавирус йоктороуҙың 125 яңы осрағы асыҡланған. Хәбәр ителеүенсә, бөгөнгө көндә республикала 150 пациент, шул иҫәптән 80 оло йәштәге кеше стационарҙа дауалана. Ә 1416 ауырыу өй шарттарында мәкерле сиргә ҡаршы көрәшә, шуларҙың 638-е - 60 йәште үткән. Роспотребнадзор етәксеһе Анна Попова Федерация Советындағы "Хөкүмәт сәғәте"ндә был миҙгелдә коронавирустан вакцинация талап ителмәүен белдерҙе. Сөнки COVID-19 артыҡ хәүеф менән янамай.

✔Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге Хөкүмәт премияһы лауреаттары билдәле булды. Улар: "Ағиҙел" журналы баш мөхәррире, яҙыусы Мөнир Ҡунафин; Башҡортостан юлдаш телевидениеһының журналистар коллективы - Г. Вахитова, С. Громова, М. Доровских, Д. Зарипова, Р. Кашапов, Л. Курамшина, Г. Хасанова, Н. Юнысов; "Благовар хәбәрҙәре" гәзите редакцияһының журналистар коллективы - Л. Ғафарова, Э. Ғафарова, А. Хасанова.

✔Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров журналистика өлкәһендә "Хәҡикәт. Яуаплылыҡ. Ҡаһарманлыҡ" премияларын булдырыу тураһында указға ҡул ҡуйҙы. Документка ярашлы, премияға конкурс нигеҙендә киң мәғлүмәт саралары баҫылған мәғлүмәт материалдарының штаттағы һәм штаттан тыш авторҙары, киң мәғлүмәт саралары редакциялары һәм ижади хеҙмәткәрҙәр дәғүә итергә мөмкин. Журналистика өлкәһендә көнүҙәк йәки йәмәғәтселектә танылған контент өсөн йыл һайын һәр береһе 300 мең һумлыҡ 20 премия тапшырыу ҡарала.

✔Башҡортостан Башлығы ҡарамағындағы Милләт-ара мөнәсәбәттәр буйынса совет ултырышында Радий Хәбиров Рәсәй мосолмандарының Үҙәк диниә назараты рәйесе Тәлғәт Тажетдинға Рәсәй Президентының рәхмәт хатын тапшырҙы. Милләт-ара һәм конфессия-ара татыулыҡты нығытыуға ҙур өлөш индергәне өсөн республика етәксеһе Тәлғәт хәҙрәтте Григорий Аксаков ордены менән бүләкләне.

✔Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республиканың Йәмәғәт палатаһы ағзаларын раҫлау тураһында указға ҡул ҡуйҙы. Етенсе составтың яңыртылған исемлегенә Ньяыы Әхмәҙуллина, Ильяс Батырғәрәев, Владимир Волков, Дмитрий Глушко, Лида Исяргакова, Альбина Ҡасимханова, Эльвира Мацкевич, Рәмил Рәхимов, Антон Теплов, Светлана Туразянова инде. Бынан алдараҡ Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы йәмәғәт палатаһының 10 ағзаһын раҫланы, тип хәбәр ителгәйне.

**✓ Этте һуҡмыш булып алған берәй ир йә бала-сағаға тапшырып ҡуялар. Ҡайһы бер эттәр бала-сағаны әллә ни һанға һуҡмауы, тыңламауы бар, ә инде иҫерек кешене эттәр, ғөмүмән, яратмай.**



БЫНАҒАЙЫШ!

# ЮҠТАН БАР ЯҺАУСЫЛАР,

## йәғни 3 кг иттән 46 кг деликатес яһап була, имеш...

**Йәмәғәт, һуңғы осор һеҙгә ҡасан деликатес менән һыйланырға тура килде, хәтерләйһегеҙме? Юғиһә, магазин кәштәләрендә гел генә бер төрлө сифатһыҙ ризыҡ күбәйеп китте түгелме? Әйе шул, әллә ниҙә бер деликатес менән дә ләззәтләнеп алғы килә ул, был донъяла мәңге йәшәмәйбеҙ бит.**

"Деликатес" нимә ул, тиһегеҙме? Шуны әйтәм, бигерәк һирәк эләгә беҙгә быңдай ҡиммәтле һәм дә байҙар ғына ашай торған нәзәкәтле ризыҡ, шуға ла уны тәме-атамаһы менән бергә онотоп китеүебеҙ ҙә ғәжәп түгел . Әлеге лә баяғы, кесә яғы ла таҡыр, үҙегеҙ белмәгән ни эш бар. Мин әйтәм, был деликатес тигәндәрен, моғайын, итальяндар йә француздар уйлап сығарғандыр. Һәр хәлдә, "delicatesse" француз теленән алынған "тәмле-татлы"ны аңлатыусы һүҙ, өҫтәүенә, һирәк етештерелә торған ҡиммәт, теләндә йоторлоҡ тәмле, гел ашағы килеп кенә торған һайландыҡ, нәзәкәтле ризыҡ икән ул. Ниндәй ризыҡтан эшләнеүенә ҡарап, ит, балыҡ һәм диңгеҙ продукттары, сыр, бәшмәк, кондитер һәм башҡа төр деликатестар була икән.

Беҙ бөгөн һүҙҙе үзебеҙҙә эшләп сығарылған - Башҡортостан ит деликатесы тирәләй алып бармаҡсыбыҙ. Һәм бында шуныһы иғтибарға лайыҡ: ундай "шәп" ризыҡ әллә ҡайҙа Францияла ла, Италияла ла түгел, ә прәме эргәлә генә, Стәрлетамаҡ районы "Рощинский" акционерҙар йәмғиәтендә етештерелә икән дә ул, шуны белә инегеҙме? Тимәк, Рощинский деликатесы! Нисегерәк яңғырай! Тик бына... ни бит әле, ниндәй сеймалдан етештерелгәнен генә аңламайырак ҡалдым: 3 кг иттән ... 46 кг деликатес етештерелгән һәм уға "Камадор ҡабымлығы" тигән атама сәпәлгән. Бына һинә "тәмле" ризыҡ! Иттән башҡа бөтәһе лә бар унда. Әҙерәк кенә башты эшләтеп алырға кәрәк булыр: 3 кило иттән уға ҡарағанда 15 тапҡырға күберәк, йәғни 46 кило әҙер продукция килеп сыҡҡан. Тимәк, әҙҙән генә лә - күп һәм, дөрөҫөрәге, юҡтан бар булған ризыҡ тигәнде аңлата түгелме был ашанты?



Быныц ише юҡтан бар килтереп сығарыусы предприятиелар беҙҙә берәү генә түгел икән, гонаһ шомлого! Өфө районының Жуков ауылындағы Яуаплылығы сикләнгән (үәт, статусты дөрөҫ биргәндәр!) Уралагро ойошмаһы шулай уҡ "Дары Урала" ҡымыҙы"ның нимәнән килеп сығыуын хатта үҙҙәре лә аңлата алмай, ти. Ысынлап та, ҡулланыусылар алдында енәйәткә тиң яуапһыҙлыҡ бит был!

Шундай уҡ "тәртиптә" аҙыҡ-түлек етештереү технологияһын тупаҫ боҙоусы "Өфө ит-консерва комбинаты" яуапһыҙлыҡ буйынса өҫөнсө урында килә икән. Улар "Майлы сусҡа ите эмульсияһы" тигән продукцияларын хаҡындағы электрон документта был ризыҡтың, әгәр шулай әйтергә яраһа, нимәнән эшләнгәне тураһында бер ниндәй ҙә белешмә бирмәүҙе хуп күргән, сөнки сеймал составы, күрәһең, хужалыҡ эсендә ҡаты сер булараҡ һаҡлана. Юҡҡа ғына йәшереп маташалар, хәҙер ҡулланыусы мәғлүмәти яҡтан бик яҡшы хәбәрҙар: улар колбаса һәм башҡа, шулай әйтергә яраһа, "деликатестар"ҙың нимәнән, нисек эшләп сығарылыуын, сеймал төрҙәре күләмен процентына тиклем иҫәпләп, етештереү конвейерының башынан алып аҙағына тиклем һөйләп бирә ала.

Быңа, мәҫәлән, халыҡта иң сифатлы иҫәпләнгән "Доктор" колбасаһын ғына алайыҡ. Ул нимәнән хасил? Май - 12 процент, аҡһым - 10, тоташтырыусы туҡыма (кимерсәк бәйләүестәре, коллаген) - 5, йөмортҡа меланжы - 3, фосфаттар, нитриттар, глютамат һәм башҡа өҫтәмәләр - 3, киптерелгән һөт - 2, шәкәр - 1 һәм, ниһайәт, һыу 63 процент тәшкил итә! Колбаса, сарделька һәм сосискаларҙа таҙа аҡһым түгел, ә икенсел аҡһым, йәғни үҫемлек аҡһымы, киҫентеләр, тире, тарамыш кеүек өлөшсәләр һәр төрлө юлдар һәм тәмләткестәр менән эшкәртелеп ҡулланыла. Ә бына теләһә ниндәй колбасалағы ит миҡдары - беҙҙең өсөн йомаҡ булып ҡала килә. Уны күрһәтеүҙе ГОСТ талап та итмәй, һәм был, тәбиғи, һәр төрлө мутлыҡтарға, технологияны тупаҫ боҙоуҙарға юл аса һәм шул арҡала сифатһыҙ ғына түгел, бәлки ҡулланыусы һаулығы һәм ғүмере өсөн хәүефле "ризыҡ" ты һатыуға сығарырға сәбәп була.

Әйткәндәй, баяғы яуапһыҙлыҡ лидерҙары - Рощинский, Уралагро ойошмалары, Өфө ит-консерва комбинаты етәкселеге ғәфү иткеһеҙ мутлыҡтары өсөн илдәге дөйөм яуапһыҙлыҡ шарттарында еңелсә ҡурҡыу менән генә ҡотолоп ҡала, йәғни, иҫкәртеләләр, йәнәһе. Баштан һыйпауҙың бер ниндәй ҙә тәрбиәүи һөҙөмтәгә килтермәүен, киреһенсә, артабан тағы ла ҙурыраҡ енәйәттәргә юл асыу ихтималлығын яҡшы беләбеҙ. Шуға күрә, РФ Тәфтиш комитеты етәксеһе Александр Бастрыкин әйтмешләй, ундайҙарға аҡсалата яза биреп, ҙур штраф түләтеү тәртип булдырыуҙың иң тиҙ һәм йоғонтоло юлы булыр ине.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ? Йорт эттәрен урамда алып йөрөү ҡағиҙәләрен эте булған кеше лә, булмағаны ла белергә тейеш. Ә һеҙ был закон менән танышмы?

***Тимур АРДЫУАНОВ, хаски тоҡомло "Байкал" ҡушаматлы эт хужаһы:*** Дуҫыма хәҙер бишенсе йәш. Атайым менән әсәйем мәктәпте яҡшы тамамлағаным өсөн алып бирҙеләр, ул саҡ йәше лә тулмаған ине әле. Бик хәрәкәтсән, уйнарға, йүгерергә ярата торған эт, аҡыллы, изгелекле, бер ваҡытта ла агрессия билдәләре күрһәткәне юҡ. Кыҫҡаһы, Байкал минең айырылмаҫ дуҫыма әйләнде, ошоға тиклем унһыҙ нисек йәшәгәнмен - аптырайым. Бушҡа-барға өрөп, күршеләрҙе лә ялҡытмай, тыныс, уға тик әлеге шул хәрәкәт, уйын, йүгерергә кәрәк, шуға күрә ваҡытым булған һайын уның менән урамға ашығабыҙ. Иртә торорға тура килә, әлбиттә, сөнки университетҡа китер алдынан йөрөтөп индерергә кәрәк; ҡайтыуыма, ишек төбөндә түҙемһеҙләнеп көтөп тора - тағы урамға йөрөргә сығабыҙ. Хайуандар менән мөғәмәлә итеүҙә яуаплылыҡ тураһында федераль закон менән дә, шулай уҡ эттәрҙе тышта алып йөрөтөү ҡағиҙәләре менән дә танышмын, интернеттан яңы ҡағиҙәләр, законға төҙәтеүҙәрҙе лә күҙәтеп барам. Минеңсә, эттәрҙе йөрөтөү мәсьәләһенә баҫым яһап, дөрөҫ эшләйҙәр, тип уйлайым, сөнки ҡайһы бер яуапһыҙыраҡ хужалар иренеп, эттең үҙен генә сығарып ебәрә, ундай кеше беҙҙең күрше подъезда ла бар берәү. Бәхеткә, эте былай аҡыллы, берәүгә лә өрөп ташланғаны юҡ, йүгереп бер аҙ йөрөй ҙә подъезд ишеге төбөнә килеп ултыра - ишек асҡандарын көтә. Кешеләрсә быны аңларға булһа ла, закон буйынса был бер ҙә дөрөҫ түгел. Этте моронлоҡһоҙ һәм бәйһеҙ көйө фәҡәт ошоноң өсөн билдәләнгән һәм кәртәләнгән махсус урындарҙа ғына ебәрергә мөмкин.

Шундай иҫкәрмә лә бар: был ҡағиҙә 3 айға тиклемге көсөктәргә һәм хәүефле иҫәпләнгән уҫал тоҡомло эттәргә ҡағылмай. Эттәрҙе ҡала властары тарафынан билдәләнгән махсус биләмәләрҙә генә йөрөтөргә рөхсәт ителеүен дә беләм, бик булмаһа, ундай урын, мәҫәлән, алыҫ икән, кеше йөрөмәгән һәм торлаҡ йорттарҙан алыҫыраҡ аулаҡ ерҙә лә йөрөтөргә була, тип яҙылған. Тик башҡа эттәргә осрап, өрөү, шау-шыу тыуҙырылырға тейеш түгел: тынлыҡ режимын боҙмаҫ өсөн дүрт аяҡлы дуҫтарҙы иртәнге 7-нән 23 сәғәткә тиклем йөрөтөргә рөхсәт ителә.

Шундай күренешкә лә тап булырға тура килә: этте һуҡмыш булып алған берәй ир йә бала-сағаға тапшырып ҡуялар. Ҡайһы бер эттәр бала-сағаны әллә ни һанға һуҡмауы, тыңламауы бар, ә инде иҫерек кешене эттәр, ғөмүмән, яратмай. Шуға күрә, дүрт аяҡлы дуҫ алғанһың икән, уны үҙеңдең ғаилә ағзаһылай күреп яратырға, ихтирам итергә, уның өсөн яуаплылыҡ тойорға ла кәрәк, ә улар быны күрә, һиҙә, аңлай һәм баһалай ҙа белә.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә республиканың Палестинаның тыныс халҡына гуманитар ярҙам ебәрергә йыйыныуы хаҡында хәбәр итте. Ул Айнур хәҙрәт Биргәлин менән Газаға гуманитар йөк оҙатыу тураһында һөйләшеүҙәрен хәбәр итте һәм республика халҡын ошо изге эшкә ҡушылырға саҡырҙы.

✓Махсус хәрби операцияла һәләк булған йәки ҡаты яраланған яугирҙың кредит буйынса бурысы ғаиләһенә күсмәй. Дәүләт Думаһы тейешле закон ҡабул итте. Әлеге ваҡытта махсус хәрби операцияла ҡатнашыусы һәләк булған осраҡта кредитты уның яҡындары - ҡатыны, ата-әсәһе йәки балалары ҡапларға тейеш. "Караусыһын юғалтҡан ғаилә өсөн был түләй алмаҫлыҡ бурысҡа әүерелә. Беренсе уҡыуҙа ҡабул ителгән закон проекты хәрби хеҙмәткәр һәләк булған йәки I төркөм инвалиды тип танылған осраҡта, бурыс туҡтатыла", - тине Дәүләт Думаһы рәйесе Вячеслав Володин.

✓Башҡортостан шахбокссылары Италияла үткән донъя чемпионатында классик шахбокста ике алтын һәм бер бронза миҙал яуланы. Спортсылар Турнирҙа илдең йыйылма командаһы составында Илсур Исхаҡов, Артур Ханнанов һәм Дилара Хәтмуллина сығыш яһаны. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, шахбокста спортсы рингта ла уңышлы сығыш яһарға, шахматта ла оҫта уйнарға тейеш. Уйын спортсыларға физик көсөн, шахматта тактикаһы белеүен күрһәтергә мөмкинлек бирә.

✓Башҡортостанда тағы бер нисә инвестор үҙ проекттарын бойомға ашырыу өсөн ябайлаштырылған процедура буйынса ер алды. Республика Башлығы ҡул ҡуйған бойороҡтар торлаҡ, коммерция һәм социаль әһәмиәттән мөһим объекттар төҙөү пландарына ҡағыла. Башҡортостандың Туризмды үҫтереү үҙәге Евразия күсмә цивилизациялар музейын төҙөү барышында башҡорт аты һәм һунар ҡоштары үҙәген булдырыу өсөн Шишмә районында 2,6 мең сутый ерҙе ҡуртымға алды. Радий Хәбиров һүҙҙәренсә, был объекттар һөнәрселәр ауылы һәм башҡа этно-тарихи майҙансыҡтар менән бергә музей комплексы эргәһендә урынлашырға тейеш.

ҠЫҪҠАСА

# ЕГЕТТӘРЕБЕҘГӘ ЯРҘАМҒА...

**Башҡортостан махсус хәрби операция яугирҙарына йөҙөнсө гуманитар ылау оҙатты.** Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров гуманитар йөк йыйыуҙа һәм уны алып барып тапшырыуҙа әүҙем ҡатнашҡан ҡотҡарыусыларға, водителдәргә, эшҡыуарҙарға, хеҙмәт коллективтарына Башҡортостан Башлығының почет грамоталарын һәм рәхмәт хаттарын тапшырҙы. Йөҙөнсө гуманитар ылауҙа - 28 автомобиль, улар араһында 17 "УАЗ", 8 "Нива", шулай уҡ күсмә мунса, өс тағылмалы мунса бар. Асҡын, Балаҡатай, Дәүләкән, Дыуан, Ҡалтасы, Салауат, Федоровка районлары, Баймаҡ ҡалаһы, Өфөнөң Киров һәм Ленин райондары халҡы, Бәләбәй һәм Балаҡатай урман хужалыҡтары, Рәсәй Афғанстан ветерандары союзының Бөрө бүлексәһе яугирҙарыбыҙ өсөн кәрәк-яраҡ хәстәрләгән. Әйтәйек, төҙөлөш материалдары, утын, "буржуйка" мейестәре, бензобысҡылар, генераторҙар, спутник антеннаһы, иретеп йәбештереү аппараттары, инструменттар, окоп шәмдәре, фонарҙар, йылы кейем, эсәр һыу, аҙыҡ-түлек, гигиена әйберҙәре, дарыуҙар һәм туғандарынан посылкалар.

✓ **Көйөргәҙе районынан күп балалы әсә контракт төҙөп, махсус хәрби операция зонаһына юлланды.** Район хакимиәте башлығы Юлай Ильясов хәбәр итеүенсә, яҡташыбыҙ - һөнәре буйынса ашнаҡсы, шуға күрә яугирҙарға тәмле ризыҡ бешереп ашатырға, шул рәүешле уларҙың хәрби рухын күтәрергә теләй. Уның балалары ваҡытлыса өләсәй ҡарамағында ҡала. "Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары һәр ваҡыт тыйнаҡ, әммә ҡыйыу булған, ти ханым. Ул яугирҙарыбыҙға Еңеүҙе яҡынайтырға ярҙам итә аласағына ышана. Ирекмәндең әсәһе ҡыҙы өсөн борсола, әлбиттә, ләкин уның ҡарарын хуплай, балаларын тәрбиәләп торорға әҙер. Ҡыйыу ханымға махсус хәрби операция зонаһында хеҙмәт иткән ваҡытта уңыштар һәм көс теләйем!" - тип яҙҙы социаль селтәрҙә Юлай Ильясов. Шулай уҡ Көйөргәҙенән хәбәр итеүҙәренсә, Башҡортостанда 2022 йылда мобилизацияланған яҡташыбыҙҙың атаһы улы артынан фронтҡа китте. Билдәле булыуынса, "Лесник" ҡушаматлы яҡташыбыҙ танк ғәскәрҙәрендә - "Злой" позывнойын алған улынан яҡынса 300 саҡрым алыҫлыҡта хеҙмәт итә. "Позывнойы ҡаты яңғыраһа ла, ул үҙе изге күңелле, алсаҡ егет. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, атаһы улының янында түгел, ләкин яугирҙарҙың маҡсаты бер - Тыуған илде һаҡлау һәм Еңеү яулау", - тип яҙа Көйөргәҙе район хакимиәте башлығы Юлай Ильясов.

✓ **Рәсәй Президенты Владимир Путин эш сәфәре менән Астанала булды.** Һөйләшеүҙе башлар алдынан етәкселәр видеобәйләнеш аша Кустанайҙа барған Ҡаҙағстан менән Рәсәйҙең XX төбәк-ара хеҙмәттәшлек форумының "Ауыл хужалығы - көслө иҡтисад нигеҙе" тип аталған пленар ултырышына ҡушылды. Владимир Путин форумда ҡатнашыусыларға сәләмләү телмәрендә Ҡаҙағстан башлығына хеҙмәттәшлек өсөн рәхмәт белдерҙе һәм уның үҫешендә ике илдең үҙ-ара килешеп эш итеүе мөһим роль уйнауын билдәләне. Мөмкинлектән файҙаланып, Рәсәй Президенты форумда ҡатнашыусыларҙы Өфөгә, Ҡаҙағстан менән Рәсәйҙең киләһе төбәк-ара хеҙмәттәшлек форумына саҡырҙы. "Рәсәй менән Ҡаҙағстандың хеҙмәттәшлегендә төбәк-ара бәйләнештәр ҙә мөһим роль уйнай. 2024 йылда сираттағы төбәк-ара форум Рәсәйҙә, Өфөлә үткәрелә. Һеҙҙе унда ҡатнашырға саҡырам", - тине Владимир Путин.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# БЕРҘӘМ БУЛЫУ МӨҺИМ



**Күп милләтле һәм күп конфессиялы Рәсәй өсөн Ватан мәнфәғәте хаҡына берҙәм булыу идеяһы айырым әһәмиәткә эйә. Илебеҙ халыҡтары бер ниндәй ҙә тел йәки дини айырмалыҡтарҙың тыныслыҡҡа һәм ижади хеҙмәткә ҡамасауларға тейеш түгеллеген үҙ тарихы менән иҫбатланы. Башҡортостан Башлығы ҡарамағындағы Милләт-ара мөнәсәбәттәр буйынса совет ултырышында Радий Хәбиров ошо турала белдерҙе.**

"Махсус хәрби операцияның нисек тамамланыры билдәле. Донъя шул тиклем тиҙ үҙгәрә һәм башҡа бер ҡасан да бер полярлы булмаясаҡ. Көнбайыш донъяһы яңы хәрби конфликттар тыуҙыра, илебеҙгә ҡаршы сикһеҙ санкцияларҙы көсәйтә. Беҙҙе көсһеҙләндереү, ижтимағи-сәйәси тотороҡлолоҡто емереү өсөн барыһын да эшләй. Рәсәйҙәге, айырыуса милли республикаларҙағы хәлде ҡаҡшатыу өсөн төрлө ҡоралдар, каналдар, мәғлүмәттәр ҡулланыла.

Бөгөн гибрид һуғышы йүнәлештәренең береһе - милләт-ара һәм конфессия-ара тыныслыҡты һәм татыулыҡты боҙорға ынтылыу. Милләттәр эштәре буйынса федераль агентлыҡтың Ситуация үҙәге мониторингы мәғлүмәттәренә ярашлы, һуңғы ваҡытта милли республикаларға, шул иҫәптән Башҡортостанға тышҡы мәғлүмәт һөжүме көсәйгән. Был күрһәткес буйынса республика Рәсәй төбәктәре араһында беренсе урынды биләй", - тип билдәләне республика етәксеһе.

Уның һүҙҙәренсә, республикала дингә бәйле хәлде ҡаҡшатырға тырышалар. Рәсәйҙең Юғары мөфтөйө Тәлғәт Тажетдин һәм Башҡортостан Диниә назараты мөфтөйө Айнур Бирғәлин исеменә Ислам радикалдары яғынан даими рәүештә ғәйепләүҙәр һәм янауҙар яңғырай. "Миграция хәле лә ҡатмарлаша. Республикала рөхсәтһеҙ йәшәгән мигранттар, хәрби хәрәкәттәр зонаһынан ҡасаҡтар арта. Сит ил граждандарын һәм мигранттарҙы террор акттарына йәлеп итеү хәүефе ҙур. Мәҫәлән, былтыр Өфөлә тимер юлында диверсия менән шөғөлләнгән Әзербайжан һәм Тажикстан вәкилдәре - колледж студенттары ҡулға алынды. Ошондай шарттарҙа беҙҙең бурыс - барлыҡ хәүефкә әҙер булыу, республикабыҙ халҡына ҡарата алдан уҡ теләһә ниндәй провокация ынтылыштарын булдырмау", - тине Радий Хәбиров.

Өфөлә Бөтә Рәсәй "Глобаль ҡаршылыҡтар шарттарында дәүләт милли сәйәсәтен тормошҡа ашырыу" ғилми-ғәмәли форумы асылды. "Беҙҙең төбәк форумды үткәреү урыны итеп осраҡлы һайланмаған. Башҡортостан милләт-ара татыулыҡтың һәм берҙәмлектең, ижтимағи тотороҡлолоҡтоң яҡшы өлгөһө булды һәм булып ҡала. Республикабыҙҙа халыҡтарҙың телдәрен һаҡлау өсөн шарттар булдырылған. Мәктәптәрҙә 13 туған тел (рус, башҡорт, татар, сыуаш, мари, удмурт, мордва, немец, украин, беларус, иврит, поляк, әрмән телдәре) өйрәнелә, 15 йәкшәмбе мәктәбе эшләй, полилингваль мәктәптәр селтәре киңәйә. Республика халыҡтарының алты телендә баҫмалар сыға. Беҙҙә республиканың бөтә күп һанлы халыҡтарын сағылдырған тарихи-мәҙәни үҙәктәрҙең үҙенсәлекле эш тәжрибәһе тупланған. 2020 йылдан башҡорттар күпләп йәшәгән ете төбәктә башҡорт тарихи-мәҙәни үҙәктәре асылды", - тине Радий Хәбиров.

# ИҢ-ИҢДӘР ГЕНӘ...



**Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә мәғариф министры Илдар Мәүлитбирҙин республика мәктәптәрендә "шайморатовсылар кластары"н булдырыу эше хаҡында һөйләне.**

Мәҫәлән, өс йылда 186 класс асылған, уларҙа 3960 бала уҡый. "Шайморатовсылар" берҙәм формаһы һәм күкрәккә таға торған билдәһе менән айырылып тора. Стандарт мәктәп программаһынан тыш, уҡыусылар строй әҙерлеге нигеҙҙәрен, һыбай йөрөргә, йәйәнән уҡ атырға өйрәнә, милли көрәш төрҙәрен үҙләштерә. "Шайморатовсылар"ҙа беҙ илһөйәрҙәр, тыуған еребеҙҙең һәм Ватаныбыҙҙың тоғро ул-ҡыҙҙарын тәрбиәләйбеҙ. "Шайморатовсылар кластары" хәрәкәтенең төп идеяһы шунда", - тине Башҡортостандың мәғариф министры.

Докладты тыңлағас, Башҡортостан етәксеһе һандар артынан ҡыумаҫҡа, ә асылған кластарҙа балаларға сифатлы белем һәм тәрбиә биреүгә күберәк көс сарыф итергә саҡырҙы. Радий Хәбиров фекеренсә, "шайморатовсылар" сафына уҡыу алдынғыларын ғына алырға кәрәк. "Иң мөһиме, кимәлде билдәләгәс, хәҙер ошо кимәлде төшөрмәгеҙ. Кластар һаны артынан ҡыумағыҙ, һеҙҙе бер кем дә мәжбүр итмәй бит. "Шайморатовсылар"ға алғас, бала яҡшы уҡырға, төрлө яҡлап әҙерлекле, шулай уҡ талаптар ҙа башҡаса булырға тейеш. Был бөтөнләй икенсе статус, улар - иң яҡшы уҡыусылар. Балаларҙы бындай кластарға конкурс нигеҙендә һайлап алыу зарур", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

# ҠЫТАЙҘА...



**Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров Ҡытайға эш сәфәре барышында Shandong Zingking Technology Co., Ltd. автоконцерны генераль директоры Ма Цзэнхуа менән осрашты. Унда Башҡортостанда махсус тәғәйенләнештәге автомобилдәр ("Ашығыс ярҙам" машиналары) етештереү мөмкинлектәре тикшерелде.**

"Ҡытай Башҡортостан өсөн кооперацияның өҫтөнлөклө йүнәлеше һәм ҡыҙыҡлы партнер булып ҡала, тәү сиратта сауҙа-иҡтисади мөнәсәбәттәр йәһәтенән, - тип билдәләне Андрей Назаров. - "Башавтотранс"тың 65 автобусында сафтан сыҡҡан "Мерседес" двигателдәрен Yuchai газ двигателдәре менән алмаштырҙыҡ, 255 "НефАЗ" автобусын йыйғанда ла Weichai газ двигателе файҙаланылды. Бынан тыш, республика Yutong маркалы 52 автобус һатып алды. Ҡытайҙа етештерелгән техника торлаҡ-коммуналь һәм ауыл хужалығы өлкәләрендә үҙен һәйбәт күрһәтте. Быйыл Башҡортостандың ауыл хужалығы предприятиеларында Ҡытай Халыҡ Республикаһында сығарылған 60-тан ашыу трактор эшләне. Әле республикала "Башсельхозтехника" предприятиеһының Zoomlion Heavy Industry Rus компанияһы менән берлектә тракторҙар йыйыуын ойоштороу мәсьәләһе тикшерелә".

Инфраструктура һәм ярҙам саралары Башҡортостанда сит ил производстволарын асыуға булышлыҡ итә, тип билдәләне Андрей Назаров. Республикала сәнәғәт кластерҙары бар, индустриаль һәм технопарктар, инвесторҙар өсөн өҫтөнлөклө зоналар эшләй. Биш йылдам үҫеш биләмәһендә, стандарт һалым өҫтөнлөктәренән тыш, махсус льготалар ҙа ғәмәлдә.

Башҡортостандың рәсми делегацияһы Ҡытайҙа өс көн эшләне. Төп сараларҙың береһе - Волга буйы федераль округының һәм Ҡытай Халыҡ Республикаһының Янцзы йылғаһының Үрге, Урта ағымы төбәктәренең хеҙмәттәшлек буйынса советы ултырышы. Сәфәр барышында хеҙмәттәшлек тураһында килешеүҙәргә ҡул ҡуйылды, B2B менән һөйләшеүҙәр үткәрелде.

## Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓"Сифат аҙнаһы" сиктәрендә баш ҡалабыҙҙа "Өфө - сифат ҡалаһы" тигән акция уҙғарылды. Дәүләт һәм муниципаль власть органдары, контроль-күҙәтеү ведомстволары вәкилдәре бер майҙансыҡта йыйылып, йәшәйешебеҙҙең төрлө өлкәләренә ҡараған халыҡ һорауҙарына яуап бирҙе, консультациялар уҙғарып, граждандар ҡуйған проблемалар буйынса уларға үҙ тәҡдимдәрен еткерҙе.

✓"Йөрәк һүҙе" шиғриәт бәйгеһе етәксеһе, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Наилә Сәфәрғолова социаль селтәрҙә хәбәр итеүенсә, киләһе юлы проект күренекле дәүләт эшмәкәре, Беренсе Президентыбыҙ иҫтәлегенә "Йөрәк һүҙе. Ил ағаһы Мортаза" тип атала. Ҡатнашырға теләүселәр башҡортса шиғыр ятлап, видеояҙманы 20 декабргә тиклем проекттың рәсми төркөмөнә ебәрергә тейеш. Финал 2024 йылдың февралендә Башҡорт опера һәм балет театрында була.

✓Өфөнөң 12-се спорт мәктәбе тәрбиәләнеүсеһе Эрнест Шәрәфетдинов карате буйынса донъя чемпионатында бронза миҙалға лайыҡ булды. Был турала Калинин районы хакимиәтенең матбуғат хеҙмәте хәбәр итә. Бронза өсөн финал алышында Эрнест Боснианан һәм Герцеговинанан Хәмзә Турульяны еңде. Был иһә республикабыҙ тарихында тәүге тапҡыр карате буйынса донъя чемпионаты миҙалы. Каратист Николай Балабанов етәкселегендә шөғөлләнә.

✓Өфө спортсыһы Демид Ручко роллер-спортта сираттағы Рәсәй рекордын ҡуйҙы. Яҡташыбыҙ Санкт-Петербургта Neva Roller Cup халыҡ-ара ярыштарында ҡатнашып, бер аяғында 20 конустан торған юлды 4,838 секунд эсендә үтте. Был Демидтың тәүге еңеүе түгел. Былтыр йыл аҙағында ул 10-18 йәшлектәр араһында квалификация уҙыштарында Рәсәй рекордын ҡуйҙы. Ул саҡта спортсы Омскиҙа роллер-спорт буйынса Бөтә Рәсәй ярыштарында сығыш яһаны, тип хәбәр иткәйне "Башинформ" мәғлүмәт агентлығы.

✓Өфөлә Карл Маркс урамы 15-се йорт адресы буйынса урынлашҡан Веденеев килем йорто һәм "Алға" гәзитенең типографияһы урынлашҡан йорт төбәк кимәлендәге тарихи һәм мәҙәни объект тип танылды. XIX быуат аҙағы - XX быуат башына ҡараған был биналарҙы реконструкциялау өсөн муниципаль милеккә тапшырғайнылар. Веденеев йортоноң майҙаны 4 мең кв. м, икенсе бина 711 кв. м ҙурлыҡта.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ӨФӨ - ТӘРТИПТӘ!



# ЯҢЫ ИДЕЯЛАР МАЙҘАНСЫҒЫ



**Башҡортостанда вуз-ара донъя кимәлендәге студент кампусы төҙөлөшө дауам итә. Төҙөлөш тулыһынса 2025 йылда тамамланасаҡ, әлегә декабрҙә уның бер өлөшө генә сафҡа индереләсәк һәм Вәлиди урамындағы был IQ-паркта фәнни лабораториялар, коворкингтар, китапханалар урынлашасаҡ.**

Өфөнөң тарихи үҙәгендә урынлашасаҡ был кампустың үҙенсәлеге шунда - унда студенттар белем дә аласаҡ, спорт менән дә шөғөлләнәсәк, китапхаларҙа ғилем эстәйәсәк, башҡа илдәрҙән һәм дәүләттәрҙән килгән ғалимдар ҡатнашлығындағы симпозиум һәм конференциялар ҙа бында үтәсәк. Кампус менән студенттар ғына түгел, исемдәре бөтөн донъяға билдәле ғалимдар ҙа ҡуллана аласаҡ. Тәүге өлөшө тапшырылғандан һуң, сират йәшәү өсөн ятаҡтары һәм донъя кимәлендәге лабораторияларҙы, мәҙәни-ял итеү, спорт объекттарынан торған бинаға етәсәк. Проект авторҙары билдәләүенсә, тиҙҙән Өфөнөң был көньяҡ яры цивилизация урынына әүерeләсәк. Кампус төҙөүҙең тағы бер маҡсаты - Өфөгә сит илдәрҙән студенттар йәлеп итеү. Бөгөнгө көндә улар йәшәү шарттары булған, инглиз телендә иркен аралашыу мөмкинлеге булған ерҙәргә өҫтөнлөк бирә. Дөйөм алғанда, кампус ул студенттар белем аласаҡ һәм йәшәйәсәк урын ғына түгел. Ул республиканы фән үҙәге итеп танытасаҡ һәм үҙенә иң шәп йәштәрҙе ылыҡтырасаҡ.

Рәсәй Дәүләт Думаһы депутаты Эльвира Айытҡолова иһә кампус барлыҡҡа килеүе Башҡортостандың мәғариф һәм иҡтисадын үҫтереүгә ярҙам итәсәк, тип иҫәпләй.

- Ил Президентының беҙҙең алдыбыҙға белем биреү донъяла иң алдынғылар рәтендә булһын һәм инновацион алымдар ҡулланһын тип ҡуйған бурысына тиҙ арала импортты алыштырыу һәм технологик суверенитет формалаштырыу ҙа ҡушылды. Беҙҙә йәштәр талантлы, уларҙың күп кенә ижад емеше уңышлы бизнес-проект булып китер һәм иҡтисад секторонда тормошҡа ашыр, тигән өмөттәбеҙ. Вуз-ара кампус улар өсөн башланғыс майҙансыҡ булыр һәм һәр студент, ғалим үҙенең иң ҡыйыу идеяларын тәҡдим итә алыр, - ти Эльвира Ринат ҡыҙы.

Уның билдәләүенсә, Башҡортостандағы юғары белемдең һуңғы йылдарҙағы үҫеш үҫеше, эре вуздарҙың яңыса үҙгәртеп ҡоролоуын үҙебеҙ ҙә күреп торабыҙ. Төбәк мәғариф системаһын комплекслы яңыртыу маҡсатынан конкурстарҙа ҡатнашып, федераль гранттар отоу ул республика Башлығы Радий Хәбиров етәкселегендәге бөтөн идара итеүсе командаһын фиҙаҡәр эшмәкәрлегенә бәйле.

- Бөгөн Рәсәйҙә белем биреү системаһы үҙгәреш кисерә, законлар ҙа алышына, кадрҙар әҙерләүҙә тышҡы сәйәсәттәге һәм хеҙмәт баҙарындағы эске үҙгәрештәр күҙ уңында тотола. Башҡортостандың вуз-ара кампусы - беҙҙең өсөн үҫеш мөмкинлеге. Беҙ йәштәр өсөн мөмкинлектәр булырабыҙ һәм абитуриент, студент, аспирант, ғалим булырға теләүселәрҙе белем алырға һәм артабан Өфөлә эшләргә саҡырабыҙ, - ти Эльвира Айытҡолова. - Башҡортостанда йәштәр күп һәм ул ошо потенциалды ҡулланырға тейеш. Шуға ла федераль һәм төбәк бюджеттарын йәлеп итеп, бизнес-партнерҙар ярҙамында тормошҡа ашырылған бындай масштаблы проекттар бөтөн өлкәләрҙе үҫтереү өсөн уникаль интеллектуаль мөхит булдырыу мөмкинлеген бирә.

# БАШҠОРТ КЕЙЕҘЕ...



**Рәсәйҙең "төньяҡ баш ҡалаһы" тип аталып йөрөтөлгән Санкт-Петербургта ил кимәлендәге кейеҙ байрамы - "Йорт тойғоһо" исеме аҫтында кейеҙҙән эшләнгән нәфис сәнғәт әйберҙәренең исем туйы булып үтте. Ул XIII "Традицияларҙың яңы булмышы" Халыҡ-ара арт-кейеҙ күргәҙмәһе сиктәрендә уҙғарылды**

Башҡорт кейеҙе сәнғәте оҫталары ошо күргәҙмәгә "Войлокфест" II Республика фестивале барышында әҙерләнгән коллектив кейеҙ балаҫты алып килде. "Корама кейеҙ" тип аталған балаҫ 105 айырым киҫәктән торған мини-панно Башҡортостан, Екатеринбург, Ҡаҙан, Санкт-Петербург, Железногорск, Усинск (Коми Республикаһы), Элиста һәм Аҡтүбә (Ҡаҙағстан Республикаһы) кейеҙселәре тарафынан ижад ителгәйне. "Күргәҙмәнең тантаналы асылыуы беҙҙең балаҫ фонында уҙҙы. Уны хатта күргәҙмәнең төп әҫәре тип тә атап булыр ине. Күргәҙмәлә ҡатнашыусылар ошо проектҡа ҡушылып, уны артабан дауам итеп, һәр бер күргәҙмә һайын балаҫтың яңы авторҙары эштәрен өҫтәү мөмкинлеге хаҡында белештеләр. Беҙҙең балаҫыбыҙ төрлө күргәҙмәләрҙә күрһәтелер, тип уйлайбыҙ. Киләһе йылда тағы ла киңерәк географиялы бер проект булдырасаҡбыҙ", - тине проект етәксеһе, Өфө ҡалаһының 2-се балалар художество мәктәбе уҡытыусыһы Ләйсән Ғилманова.

ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

# БАЙҘАРҒА - "КӨРСӨК ҺАЛЫМЫ"




**Донъя хәлдәре бөгөн биҙәктәре секунд һайын алмашынып торған ҙур бер калейдоскопҡа оҡшаш, тик ундағы күренештәр матур-матур нағыштарҙан тормай, ә хәүефле триллер кадрҙарын хәтерләтә: шартлауҙар, ут-ялҡын, емереклек, ҡорбандар, балаларын ҡосҡан, ҡобараһы осҡан ҡасаҡтар...**

Израиль армияһы утты туҡтатырға уйламай ҙа: 5-6 ноябрҙә уның истребителдәре ХАМАС объекттарын: Газа секторындағы 450 хәрби объектты, шул иҫәптән, палестиндарҙың һуғышсылар отрядтарын, тоннелдәрҙе, хәрби базаларҙы, команда үҙәктәрен, күҙәтеү пункттарын утҡа тотто. Шуның һөҙөмтәһендә Газала 200-ҙән ашыу кеше һәләк булған. Израилдең һуғыш дәрте хатта ки йыһан киңлеген айҡай башланы. The Telegraph хәбәр итеүенсә, Йемендан Израилдең Эйлат ҡалаһына ебәрелгән баллистик ракетаһын Израиль Ҡоралды көстәре һауа һөжүменә ҡаршы АҠШ менән берлектә эшләнгән Arrow системаһы ярҙамында Ер атмосфераһынан ситтә шартлатыуға өлгәште. Мәғлүмәт сығанағы билдәләүенсә, Израиль тарихта тәүге тапҡыр космоста хәрби бәрелеш яһаусы ил булды. Шул уҡ ваҡытта ЦАХАЛ (Израиль армияһы) көстәре Газа ҡалаһына бәреп инде һәм ХАМАС менән яҡындан тороп бәрелеш башланы. Бында минут һайын ракеталар шартлай, танкылар яндырыла, йорттар емерелә, кешеләр һәләк була...ХАМАС менән "Хезболла" ракеталары ла Израилдең эре ҡалаларын сәпкә тота, 2 ноябрҙә Кирьят-Шмон менән Тель-Авивтың ҡала яңы территорияларында шартлауҙар теркәлде. Палестина-Израиль бәрелеше ҡорбандарының һаны 9061 кешегә барып етте, ә иҫәпкә алынмағандары күпмелер...

...Шул арала Украина президенты Зеленский Көнбайыш менән аралашыу тонын үҙгәртте, тип яҙа киң мәғлүмәт саралары. Ошоға тиклем Көнбайыштан ярҙам теләнселәүҙең төп девизы "күберәк бирһәгеҙ, тиҙерәк еңәсәкбеҙ" ине, хәҙер иһә "Йәки күберәк бирәһегеҙ, йәки был хәл билдәһеҙ ваҡытҡа һуҙыласаҡ" тигән янауға тартым ультиматумға әүерелә бара. Бының менән, әйтеүҙәренсә, Зеленский Көнбайыштың нервыһында уйнап алырға итә, ахыры, сөнки Евроберләшмәгә Рәсәй менән конфликттың оҙаҡҡа һуҙылыуы файҙаға түгел. Ошо юҫыҡта ҡайһы бер мәғлүмәт сығанаҡтары фаразлауынса, Ҡушма Штаттар менән Евроберләшмә Украинаның Рәсәй менән килешеү ихтималлығы хаҡында һүҙ ҡуҙғата башлаған, имеш. Фекер алышыу барышында Киевтың ниндәй "ташламалар"ға барыу мөмкинлектәре лә ҡаралған. Шул уҡ ваҡытта Украина чиновниктары үҙ иленең тиҙерәк Евроберләшмәгә инеүе хаҡында көнө-төнө татлы төш күрә икән.

Эйе, хыялланып алыуҙың зыяны юҡ былай, тик бына Евроберләшмә быны теләйме икән һуң? Ҡайһы бер күҙәтеүселәр фекеренсә, Украинаны берләшмәгә ҡабул итеү Евроберләшмәнең Чехия, Эстония, Литва, Словения, Кипр, Мальта кеүек бәләкәй һәм ярлы илдәрен бөлдөрөүгә тиң буласаҡ, сөнки Украина улар өлөшөн "ашаясаҡ". Евросовет башлығы Шарль Мишель был хәлдә 2030-сы йылдарға табан кҿзаллаһа, Еврокомиссия етәксеһе Урсула фон Ляйен Украинаны финанслау һәм ЕС-ҡа ҡабул итеү мәсьәләһе буйынса һөйләшеү һәм Верховный радала сығыш яһау маҡсатында Киевҡа килеп тә төшкән . Шулай итеп, Евроберләшмә хужаларының уң ҡулы ни эшләгәнде һулы белмәй, ти. Өҫтәүенә, был мөхшәргә Германия министры Анналена Бербок та ҡай тарафтандыр килеп ҡушылған һәм Украина министры Д.Кулебаға уның илен Евроберләшмәгә ҡабул итергә ярҙам ҡулы һуҙырға вәғәҙәләгән.

Ғөмүмән, Бербок ханымдың Германия министры өсөн сәйерерәк ҡылыҡтары хаҡында күптән инде күләмәстәр йөрөй. Әйткәндәй, Германия хаҡында бер кәлимә. Был илдең канцлеры Олаф Шольц вәкиле булған Социал-демократик партия илдәге хәлде иҫәпкә алып, сәнәғәтте үҫтереү, мәғариф мәсьәләләрен тәьмин итеү, эш хаҡтарын арттырыу, халыҡтың дәүләткә ышаныһын ҡайтарыу маҡсатында бай немецтарға "көрсөк һалымы" индереү хаҡында тәҡдим менән сығыш яһаған һәм ул иҡтисад сәйәсәте проекты буларак, партияның декабрь конференцияһында ҡаралаасаҡ. Ҡатмарлы хәлдәр осоронда немецтарҙың был идеяһы миллиардтарын ҡайҙа йәшерергә белмәгән бай элиталы бөгзе илдәр өсөн дә яҡшы өлгө булып тора түгелме?

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, уләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Ҡаҙна ҡанаһа

❖ Теш ҡаҙнаһы ҡанаһа, имән ҡайырыһы һәм йүкә сәскәһенән эшләнгән йылымыс төнәтмә менән ауыҙҙы сайҡатыу килешә. 2 өлөш имән ҡайырыһы һәм 1 өлөш йүкә сәскәһен ҡушырға. Әҙерләмәнең 1 балғалағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға.

### Йөрәк өйәнәге

❖ Тын ҡыҫылып, йөрәк өйәнәге тотһа, һарымһаҡ һәм бал ашарға кәңәш итә халыҡ дауаһы. 1 литр бал, 10 лимон, 5 баш һарымһаҡ кәрәк. Лимондың һутын һығып алырға, һарымһаҡты әрсеп, ҡырғыстан йәки ит турағыстан үткәрергә. Өсөһөн дә бергә ҡушып болғап, ауыҙы ябыҡ һауытта 1 аҙнаға һалҡын урында ҡалдырырға. Көнөнә 1 тапҡыр 4-әр балғалаҡты яйлап, һәр ҡалағын берәр минутҡа һуҙып ашарға.

❖ Өйәмәкәй 6 ҡалаҡ энәлек (боярышник) емеше һәм 6 ҡалаҡ арыҫлан ҡойроғона 7 стакан ҡайнар һыу ҡойорға. Ҡайнатмаҫҡа. Һауытты йылыға төрөп, бер төүлек төнәтергә. Һөҙөрп, емештәрҙе марля аша һығып алырға. Әҙер төнәтмәне һыуыҡта һаҡларға. Көнөнә 3 тапҡыр 1-әр стакан эсергә. Тәмлерәк булһын өсөн татлы нәмә ҡушмаҫҡа, уның урынға ошо уҡ ысул менән әҙерләнгән гөлйемеш төнәтмәһен өҫтәргә була.

### Сәс ҡойолһа

❖ Баш пеләшләнә башлаған осраҡта сәс тамырҙарын нығытыу маҡсатында ҡомалаҡ сәскәһен ҡулланалар. Бының өсөн ҡомалаҡты август-сентябрь айҙарында йыялар. 1 ҡалаҡ ҡомалаҡҡа 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 30 минут ҡайнатырға. Йылымыслангас, баш тиреһенә һөртергә.

❖ Баш тиреһе майлы булғанда, йәки ҡауаҡлағанда календуланың спирттағы төнәтмәһенән 10 өлөш, кастор майынан 1 өлөш алып әҙерләнгән дауаны һөртергә. Ә баш тиреһе ҡоро булған осраҡта кастор майы һәм календула төнәтмәһе тигеҙ миҡдарҙа алына.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

***✓ Һуңғы ваҡытта йыш ҡына айыу-бүреләр кеше йәшәгән ерҙәргә килә. Йәшәгән төйәктәре урмандар ҡырылып, тәғәм итер йәнлектәре бөткәс, улар ҡайҙа барырға тейеш һуң?***

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Ҡаңғылдаҡ аҡҡош, аҡҡош**



Ҙур, ап-аҡ ҡош, йөҙгән саҡта муйынын вертикаль тота. Суҡышы яртылаш һары, яртылаш - ҡара. Йәш аҡҡоштарҙың суҡышы алһыу-һорғолт, өҫкө яғы ла ололарҙыҡына ҡарағанда ҡарараҡ. Кәүҙәһенең оҙонлоғо 145-160 см, ҡанаты йәйелгән көйө 218-243 см. Тауышы "ҡаңк" булып ишетелә, осҡан саҡта ул ике ижекле "ҡаңк-ғо" булып китә.

Беҙҙең төбәктә XVIII быуаттың урталарында тәүләп телгә алына. XIX быуатта бар тикшеренеүселәр ҙә Өфө губернияһы территорияһында аҡҡоштоң булыуы тураһында яҙа. П. Сушкин "һары суҡышлы" аҡҡошто Шиңгәккүлдә, Ағиҙелдең урта ағымында һәм Түләк йылғаһында осрата. Унын күҙәтеүҙәре буйынса, аҡҡоштар апрелдең урталарынан ҡалмай килә. С. Снигиревский аҡҡош Урал аръяғы күлдәре ҡошо тип яҙа. Аҡҡоштарҙың Һаҡмар, Ағиҙел (Өфө тирәһендә), Бөрө йылғаһында ҡышлауын да күҙәтергә тура килә.

Аҡҡоштар апрелдең тәүге яртыһында осоп килә. Парлап йәки 10-ар ҡошҡа тиклем тупланып ҡайталар. Һыу буйҙары буйлап осалар, сөнки күлдәр әле был ваҡытта иреп бөтмәгән була. Ояһы ҙур, йылдар буйына ҡулланыла ала, был осраҡта унын бейеклеге 1 м-ға етә. 5-7 йомортҡа һала, инә аҡҡош 31-40 көн буйына баҫа. Ата ҡош иһә оя тирәһендә һаҡсы ролендә була. Бәпкәләр кибенгәс, һыуға төшөп, ата-инәһе менән йөҙөп китә. Ике айҙан улар ярайһы ныҒына, оса башлай. 4-6 йәштә үҙҙәре бала сығара башлай.

Башлыса һыу үләндәре, уларҙың тамырҙары менән туҡлана. Һыу бөжәктәрен дә ашай.

Сентябрҙең икенсе яртыһынан октябрҙең аҙағына тиклем йылы яҡҡа осоп китә. Каспий төбәгендә, Азов, Ҡара диңгеҙ буйҙарында ҡышлай. Сәмиғуллин аҡкоштарҙың һирәкләп булһа ла Ырымбур өлкәһендә ҡышлауы тураһында яҙа.

Аҡҡош Башҡортостандың Ҡыҙыл китабына индерелгән. Әлеге мәлдә ул кеше үтерлек булмаған ерҙәрҙә генә оя ҡороп, һаҡланып килә. Балыҡсылыҡ, күп ерҙәрҙең бесән сабыу урынына әүерелеүе, туризм үҫеше, браконьерлыҡ аҡҡоштарҙы юҡҡа сығып барған ҡоштар төркөмөнә индерә.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ЙӘН ӘРНЕҮЕ

# ОЖМАХ БАҠСАҺЫЛАЙ ҒЫНА ИНЕ ИЛЕМ...



"Борон - борон заманда беҙ йәшәгән ерҙәрҙә ҡуйы ҡара урмандарҙы тайыш табан айыуы, шеш ҡолағы - ҡуяны, ҡыҙ балалай наҙлыҡай, көлтә ҡойроҡ төлкөһө, йылғыр, ҡомһоҙ бүреһе, урман йәме боланы, ғорур, текә мышыһы үҙенә төйәк иткән, ти. Урман-ҡырҙарында иҫертерлек хуш еҫле мең төрлө сәскәләре тәсбих әйтеп ултырған, турғай башындай эре-эре ҡыҙыл еләктәре аяҡ баҫҡыһыҙ булып тәгәрәп бешкән, ти. Сылтыр-сылтыр шишмәләре урман шауын, ҡурай моңон, ҡоштар тауышын, һыуға килгән ҡыҙ-ҡыркындың моңло йырҙарын үҙенә отоп алып, йырлай-йырлай ҙур йылғаларға барып ҡушылған, ти. Шишмә моңдарын тыңлап, көмөш һыуҙарын эсеп, кешеләр үҙҙәренә көс, дәрт, илһам алған. Саф, мул һыулы йылғаларында, тәрән күлдәрендә төрлө-төрлө балыҡтары кемуҙарҙан ярышып, һикерешеп уйнағанын күҙәтеү үҙе бер ҙур кинәнес булған, ти. Урмандарҙа ниндәй генә ағастар, емештәр үҫмәгән: аҡ күлдәкле, зифа буйлы һомғол ҡайындары, ғорур солоҡ ҡарағайҙары, меңйәшәр ҡарағастары, тарбаҡ-тарбаҡ имәндәре, шыбырлап ҡына сер һөйләр уҫаҡтары, сөм-ҡара күҙле муйылдары, сәскәләренән хуш еҫле бал тамып торған йүкәләре, сағандары, эре-эре ҡыҙыл муйынсаҡлы баландары, миләштәре, ашап туйғыһыҙ тәмле ҡарағаттары, татлы ҡурай еләктәре, һутлы сейәләре... Һарынаһы, балтырғаны, әтлеге, ҡымыҙлығы, ҡуҙғалағы, йыуаһы, оҫҡоно кешеләрҙең танһығын ҡандырған. Урмандарыбыҙ халҡыбыҙ өсөн йәшәү сығанағы, һыу һаҡлағыс, ете ҡат тун булған, ти.

Был ерҙәрҙә борон-борондан бик егәрле, эшсән, уңған халыҡ йәшәгән, ти. Баҫыуҙарында иген диңгеҙе тулҡынған. Көтөү-көтөү булып, һыйырҙары мөңрәшеп, аттары кешнәшеп, ҡолондары сырҡырашып, һарыҡ-кәзәләре мыҡырыҡлашып ялан тултырып үлән утлап йөрөгән, ти. Аҫты ла, өҫтө лә хазина еребеҙҙә халыҡтарҙың һил генә, татыу ғына йәшәүе ҡайһы бер ҡалын кеҫәле һөмһөҙ әҙәми заттарға һис кенә лә оҡшап бөтмәгән, ти. Был халыҡтың илһөйәрлек тойғоларын үлтереп, рухтарын һындырып, ожмах баҡсаһындай бай ерҙәренән төңөлдөрөп, үҙебеҙ хужа булып алайыҡ әле, тип үҙҙәренең ҡара ниәттәрен бойомға ашыра башлағандар, ти. Тәүҙә күпләп-күпләп урмандарын ҡырғандар, шунан ерҙең аҫтын өҫкә әйәндереп, алтын-көмөштәрен соҡоп алғандар, ти. Ҡайһы бер шаулап үҫкән урмандар урынында бер нәмәгә ярамаған, файҙаһыҙ һары сәскәләр менән ҡапланған ҡола яландар тороп ҡалған, ти. Күп кенә шишмәләр ҡороған, элек ат йөҙҙөргән йылғалар инеш кенә булып ҡалған, ти..."

Мин был әкиәтте ҡыҙыҡ өсөн генә яҙманым. Ҡыҙғаныс: әгәр ҙә байлыҡ өсөн ҡыҙығып, тәбиғәтебеҙҙе таларға, ҡырағайҙарса ҡырырға юл ҡуйһаҡ, киләсәктә беҙҙең ейәндәребеҙ үҙҙәренең ейәндәренә ошондай күңелһеҙ әкиәттәр һөйләйәсәк. Килер быуын беҙгә ләғнәт уҡыясаҡ.

**Борон ата - бабаларыбыҙ тәбиғәткә шул тиклем һаҡсыл ҡараште булған. Бөтә урманды ҡырғын яуы һымаҡ ҡырмағандар. Ағасты ҡыш көнө генә ҡырҡа торған булғандар. Япраҡ ярғас, ағас ҡырҡыу гонаһ һыналған. Санитар ҡырҡыу, тип, һайлап ҡына ҡырҡҡандар. Хәҙерге ваҡытта йәй ни, ҡыш ни, ағастың йәшеме, ҡартымы, ҡарап тормайҙар, көнө-төнө ҙур-ҙур машиналары менән ташый ғына беләләр. Интернеттан километрҙарға һуҙылған вагон-вагон ағастарҙы күргән һайын, ултырып иларлыҡ бит. Бөтә Башҡортостаныбыҙ буйынса киҫелгән был хәтлем дә ағастар ҡайҙа китә ул?**

Әллә кемдәрҙең күңелен күрәбеҙ, тип, илебеҙ менән урмандары ҡырылған, хазиналары соҡоп алынған, яландары, тауҙары аҡтарылған шөкәтһеҙ ерҙә ултырып ҡалмаҫбыҙмы? Тәбиғәттә бөтәһе лә бер-береһе менән бәйле бит, һуңынан афәттәр булмаҫмы?..

Бер ҡусты тейеш кеше ағасты киҫкән дә, ауҙармаған килеш, арбаһы менән ултыртып ҡалдырып ҡайтып киткән. Кәләш алған булған. Туйын үткәрергә өс кенә көн ҡалғанда теге ағас эргәһенән үтеп барғанда ауҙармай ҡалдырып киткән ағасы өҫтөнә йығылып, ҡусты һәләк булды. Ололар: "Ағастың да хәтере бар шул",- тинеләр. Аяуһыҙ ҡырылған бөтә урмандарҙың да хәтерҙәре бик шәп, хәтәр булыр ул.

Ҡәйепҡол ауылы эргәһендә, ҠараҒош ояһы ерендә, эзбиз сығарабыҙ, тип ерҙең аҫтын-өҫкә әйләндереп һалып ҡуйҙылар. Ерҙе аҡтармаҫ элек шул яҡтан ҡабарып ҡара болоттар сыҡһа, һис шикһеҙ, ямғыр яуыр ине. Хәҙер болоттар шул урынға килеп етәләр ҙә, икегә бүленеп, Ураҙ, Миндәк яғына боролоп китә лә баралар, ямғыр яумай.

Ҡотой, Ҡолош, Ҡәйепҡол эргәһендәге дым һаҡлар урмандары ҡырҡылып, ҡола яландарға әйләндерелгәс, Шәгәр, Рәҫтәк йылғаларын тулыландырып торған күп кенә шишмәләр ҡороно. Элек был йылғаларҙа ат йөҙҙөрөрҙәр ине. Бик аянысты: йылғаларыбыҙ хәҙер инеш кенә булып ҡалдылар. Үҙемдең тыуған ерем Бөрйән районында Нөгөш йылғаһы буйлап йәй буйына кәмәләрҙә туристар аға торғайны. Ниндәй ҙур йылға Нөгөш тә хәҙерге көндә тауыҡ кисеп сығырлыҡ ҡына булып бара...

Өс йәшлек игеҙәк ейәндәремде эйәртеп, элек һабантуйҙар үткәрелгән ергә китеп барам. Юл буйынса:

- Ҡоштар ни эшләй?
- Ҡоштар һайрай.
- Балыҡтар йөҙә.
- Йылға аға, - тип һөйләндерәм.

Иҫтәрендә ҡалдымы икән, тип, ҡайтышлай тағы ла шул уҡ һорауҙарҙы бирәм.

- Йылға ни эшләй? - тип һорайым, "Йылға аға"тигән яуапты ишетәм икән тиһәм, ейәндәремдең береһе:

- Өләсәй, йылға бес итә, - тип яуапланы. Ысынлап та, Шәгәребеҙ сөптөрләп кенә ағып тора шул.

Тәбиғәттә бөтәһе лә үҙ урынында. Һәр йән эйәһе үҙенә тәғәйен урында йәшәргә тейеш. Айыу, бүре, төлкөһө - урманда, балығы йылға-күлдәрендә, аты, һыйыры, һарығы, кәзәһе сәскәле болондарҙа татлы үҫемлектәрҙе утларға тейеш.

Һуңғы ваҡытта йыш ҡына айыу-бүреләрҙең кеше йәшәгән ерҙәргә килеп, урамдарҙа хужаларса йөрөүен, сүп-сарҙарҙы аҡтарыуын төшөрөп интернетҡа һалалар. Был күренештәр бер ҙә ҡыҙыҡ түгел. Йәшәгән төйәктәре урмандар ҡырылып, тәғәм итер йәнлектәре бөткәс, улар ҡайҙа барырға тейеш һуң? Урамда йөрөгән берәҙәк эттәр кеүек, кешеләргә ташланырға ла күп ҡалмаған.

Магазин кәштәләрендә хәҙер ҡайҙан ғына килтерелмәгән дә, ниндәй генә һөт ризыҡтары юҡ. Ҡайһы һөт тәмлерәк, фаҙалыраҡ? Магазиндарҙа һатылған төрлө химикаттар ҡушылған һөтмө, ҡыбырламай ғына тик бесән ашап торған һыйыр һөтөмө, әллә болондарҙа хуш еҫле үлән ашап йөрөгән һыйырҙыҡымы? Беҙ бала саҡта аллергияның нимә икәнен дә белмәнек. Хәҙер күп кенә балалар шул сир менән яфалана. Ул химикаттар ҡушып эшләнгән һөт ризыҡтарының составын кем тикшереп ҡараған? Элек халыҡ контроле була торғайны, хәҙер улары ла юҡ.

Файҙалы ҡаҙылмалары алынғандан һуң, күп кенә ерҙәрҙә рекультивация үткәрелмәй, халыҡҡа киренән тапшырылмай ҡалдырыла, шунлыҡтан, сәсеүлектәр юҡҡа сыға, көтөүлектәр ҙә ныҡ кәмей. Ниндәй генә компаниялар килеп эш асһалар ҙа, иң беренсе нәүбәттә халыҡтың һаулығын ҡайғыртыуҙы алғы планға ҡуйырға, ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереүҙе, инфраструктураны яҡшыртыуҙы күҙ уңында тоторға тейештәр. Тыуған еребеҙ, тәбиғәтебеҙ юҡҡа сыҡҡанда, нисек кенә итеп тыныс йәшәргә була? Берәй сараһын күреп, был тәртипһеҙлектәрҙе, сикһеҙлекте туҡтатып булмаймы ни? Ҡайҙа һеҙ, халыҡ һайлап ҡуйған депутаттар, экологтар, ғалимдар, юристар?

**Шәһүрә ӘХМӘҘИЕВА.**
**Учалы районы Ҡәйепҡол ауылы.**

✓ *Салих ҡурғандарына бер килке яңы һыҙаттар хас, уларҙың килеп сығышын гундарҙың урындағы ҡәбиләләргә мәҙәни йоғонтоһо менән аңлатыу фарыҙ.*



ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Икенсе киҫәк. Урта быуаттар.

### Бишенсе бүлек. Көньяҡ Урал IV - VIII быуаттарҙа



### Халыҡтарҙың бөйөк күсеше эпоһаһы (IV-V б.б.)

Керамиканан бейек булмаған яҫы төплө көршәктәр һәм бер ҡолаҡлы кувшиндар табыла, улар формалары буйынса II - IV быуаттарға ҡараған Көньяҡ Урал ҡурғандарында табылған һауыт-һабаны хәтерләтә. Уларҙы ер өйөмдәренең һәм ҡәберҙәрҙең күбеһенең формалары һәм үлсәмдәре яҡынайта. Әммә Салих ҡурғандарына бер килке яңы һыҙаттар хас, уларҙың килеп сығышын гундарҙың урындағы ҡәбиләләргә мәҙәни йоғонтоһо менән аңлатыу фарыҙ. Уларҙан иң элек табуттар ҡулланылыуын һәм ҡәбер өҫтәренә таштар һалыныуын, үлгәндәрҙе төньяҡ-көнсығышҡа ҡаратып ерләүҙе атап була. Төҙөлөшө һәм табылдыҡтар составы буйынса Салих ҡурғандарына унан йыраҡ булмаған Дербенев ҡурған ҡәберлеге бик яҡын.

Салих ҡурғандары тибындағы ҡомартҡылар Көньяҡ Уралда берәм-бөртөк кенә түгел. Мәҫәлән, уларҙан Орск ҡалаһынан йыраҡ булмаған Джанаталап ауылы янындағы 9-сы һанлы ҡурған бер нисек тә айырылып тормай, унда ерләнгән мәйет табутҡа һалынған, ҡәбер төбөнә туҙ түшәлгән була. Деформацияланған баш һөйәге унда яңы замандың иң мөһим күрһәткесе булып тора. Б.э. тиклем III - II быуаттар сигендә Көньяҡ Уралда барлыҡҡа килгән баш һөйәген оҙонайтыу йолаһы инде киң таралыу таба. Ҡәберлектә IV - V быуаттар өсөн типик булған балсыҡ һауыт-һаба (түңәрәк төплө кувшиндар) һәм йүгән биҙәүестәре (унның күн бауҙарына беркетелгән ваҡ металл биҙәүестәр, ауыҙлыҡтар). Соль-Илецкҡа яҡын Мертвые Соли ауылы янындағы ҡурғанда шундай уҡ инвентарь табылған.

Дала халыҡтарының Урал-Волга буйының урманлы дала һәм урманлы райондарына үтеп инеүе шул тиклем киң күләмле була, уларҙың ҡайһы бер төркөмдәре Пермь крайына һәм Түбәнге Кама буйына тиклем барып етә. Бында Качка һәм Харино тибындағы ҡурған ҡәберлектәренең хасил булыуын ошоға дәлил итеп ҡарап була. Әммә улар араһында Татарстандағы Турай ҡурғандары бигерәк тә үҙенсәлекле, уларға дүрт мөйөшлө ҡәбер соҡорҙары төбөнә табуттарҙа йә иһә ағас улаҡтарға (ялғаштарға) һалып ерләү йолаһы хас.

Салих ҡурғандарындағына оҡшаш бәғзе бер ҡәберҙәрҙең стена буйҙарында киртләстәр (ырмауҙар) була, ер өҫтөндә уларҙы таштарҙы теҙеп һалып йә иһә ҡәбер өҫтәрен таштар менән ҡаплап билдәләгәндәр. Ерләү йолаһының түбәндәге детале яҡшы беленә: күп кенә ҡурғандарҙың ер өйөмө аҫтында усаҡ эҙҙәре һаҡланып ҡалған. Был ҡәбер ҡаҙығанға тиклемме, әллә бәлки, унан һуңдырмы, үлгәндәр хөрмәтенә ҙур усаҡтар яғылыуын, унының әйләнәһендә серле йолалар үтәлеүен күрһәтеп тора.

Ерләү йолаһының ошо детале гундарҙың IV-V быуаттарҙа Византия тарихсылары тарафынан ентекләп яҙып ҡалдырылған ғөрөф-ғәҙәттәренә тулыһынса тап килә. Уларҙың раҫлауына ярашлы, көнбайыш гундары "усаҡтар тирәләй шәрә көйө, ауыҙҙарына ҡылыстарын ҡабып, ҡырағай күмәк бейеүҙәрен башҡара". Ҡурғандарҙа саманан тыш бай әйберҙәр йыйылмаһы һаҡланған. Уларҙа оҙон ҡылыстар табылған, улар ҡыҙыл төҫкә буялған күн тире менән ҡапланған ҡындарҙа йөрөтөлгән. Яҫы төплө балсыҡ һауыт-һаба, хәнйәрҙәр, балталар, бил ҡайыштарының ҡаптырмалары һәм башҡа биҙәүес әйберҙәре бар. Оригиналь булғандары иҫәбенә ҡыҙыл төҫкә буялған, тотҡаһы эт башы рәүешендә яһалған ағас һауытты, яу ҡорамалдарын: бармицалы торҡаны, һайман (кольчуга) һәм пластинкалы ҡояҡты (панцирь) индерергә була.

Табылған әйберҙәр йыйылмаһы Турай ҡурғандарында, башлыса, арҙаҡлы һәм бай яугирҙарҙың ерләнеүен раҫлай, был Кама буйының уң яҡ ярындағы урманлы ерҙәрҙә лә тормоштоң тыныс булмауын күрһәтә. Ошоға бәйле ике ҡурғанда башһыҙ мәйеттәр ерләнгән ҡәберҙәр табылыуы билдәле бер ҡыҙыҡһыныу уята. Күрәһең, был яугирҙар алышта һәләк булған, ә уларҙың баштарын дошмандары киҫеп алып киткән. Был йола бик борондан бирле дала күскенселәренә хас булған. Ул Геродоттың скифтар хаҡындағы, боронғо Ҡытай тарихсыларының гундар хаҡындағы яҙмаларында сағылыш тапҡан. Ошо мәғлүмәттәргә ярашлы, гундар үлтерелгән дошмандарының баш һөйәктәренән, тышҡы яғынан күн, йә иһә алтын менән ҡаплап, һауыт яһағандар. Ҡытай сығанаҡтарынан юечжиларҙың үлтерелгән дошмандарының баш һөйәктәрен тап шулай ҡулланыуҙары хаҡында билдәле. Турай табылдыҡтары бындай йоланың IV-V быуаттарҙа Урал һәм Урта Волга ҡәбиләләренә лә билдәле булыуына дәлил.

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы. Башы 2022 йылдың 28-се һанында).**

ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# МӘХМҮТ ҠАШҒАРИҘАН



Мәхмүт Ҡашғариҙың төрки телдәренең үҙенсәлектәрен сағылдырған хеҙмәте беҙҙең халҡыбыҙ өсөн бик тә фәһемле ул. Ни өсөн тигәндә, беҙ ата-бабаларыбыҙҙың боронғо һөйләштәренең төрки лөғәтенә ҡарағаны һәм XI быуатта барса төрки халыҡтары ҡулланған яҙма телебеҙ хаҡында үтә ҡиммәтле мәғлүмәттәр менән таныша алабыҙ. Әгәр X быуатта уҡ ғәрәп илселеге сәркәтибе Ибн Фаҙлан күреп белгән башҡорттарҙың ҡайһы берҙәре Ислам динендә булған икән, уларҙың, ғәрәп теле менән бер рәттән, боронғо төрки яҙмаһын белеүҙәренә шик юҡтыр.

Шулай уҡ Ҡашғари төрки халыҡтарының иң боронғо тамырҙарын ул заманда Рум тип аталған Византиялылар менән уртаҡ булған тәү бабалар - Исайя (Ийсу), Исхаҡ (Исаак), Ибраһим (Авраам) кеүек Тәүратта сағылыш тапҡан заттар менән бәйләп аңлатһа, күп быуаттар үтеүгә башҡорт зыялыһы Тажетдин Ялсығол әл-Башҡорди үҙенең киң билдәле "Тәуарихи Булғария" әҫәрендә башҡорт тарихын тап шулай уҡ Әҙәм менән Һауанан башлап бәйән итә. Ошо йәһәттән, иң яңы ғилми генеалогия тикшеренеүҙәре һығымталарына ярашлы, халҡыбыҙҙың байтаҡ өлөшөнөң генетик коды R1b гаплотөркөмөнә ҡарауын ата-бабаларыбыҙҙың хәҙерге бәғзе бер Европа халыҡтары менән бик тә алыҫ ҡәрҙәшлеген раҫлаусы фактор итеп ҡабул итеү фарыҙ.

Йәнә беҙҙең өсөн Мәхмүт Ҡашғариҙың ата-бабаларыбыҙ билгән ерҙәрҙең географик урынын заманына ҡарата аныҡ билдәләй алыуы ла мөһим. Византияға иң яҡын ерҙәрҙә йәшәгән бәшнәктәр (Ҡара диңгеҙ буйҙарында), Каспий диңгеҙенән төньяҡҡа һәм көнсығышҡа табанығраҡ киң далаларҙа күсеп йөрөүсе ҡыпсаҡтар, Яйыҡ йылғаһынан көньяҡтараҡ Арал диңгеҙенә тиклем ерҙәрҙе билгән уғыҙҙар, уларға йәнәш йәшәгән емектәр менән боронғо башҡорттарҙың йә союздаш булып, йә иһә алыш-бәрелештәргә лә инеп, тарих анналдарында теркәлеүен беләбеҙ.

Үҙ заманы ҡанундарына үә дөйөм ҡабул ителгән яҙма әҫәрҙәргә хас традицияларға ярашлы, Ҡашғари төрки телдәрен дөрөҫ һәм саф булған йә иһә, ҡалаларҙа йәшәп, телдәре башҡа бер телдәр менән (мәҫәлән, фарсы теле менән) буталып боҙолған төркөмдәргә бүлә. Әлбиттә, уйғыр төркиҙәре ерендә тыуып үҫкән ғалим ҡашғарлылар лөғәтен иң дөрөҫ, саф һәм матур телдәр иҫәбенә индерә. Ҡашғари төрки ерҙәренә ситтән килеп ингән хотан, тағут һәм тибет ҡәүемдәренең телдәрен дөрөҫ төрки телдәре рәтенә индермәй. Беҙгә бына нимә ҡәҙерлерәк: Ҡашғари яҙғанса, уйғыр лөғәте кеүек үк саф төрки телдәренән булған ҡырғыҙ, уғыҙ, ҡыпсаҡ һәм йәнә бер нисә ҡәбилә лөғәтенә тағы ла ике тел яҡын ҡуйыла - емек һәм башҡорт телдәре.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ тәржемәһе.**
**(Дауамы. Башы 42-43-сө һандарҙа).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 78



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Украинаның уң яры буйындағы һәм Көнсығыш Польшалағы алыштарҙа

### Ковель йүнәлешендәге һәм Владимир-Волынский янындағы яу хәрәкәттәре

2-се Белорус фронты ғәскәрҙәре 1944 йылдың 15 мартынан 5 апрелгә тиклем Полесье һөжүм итеү операцияһын уҙғара. Төп бурыс - дошмандың Ковель төркөмөн тар-мар итеү.

Ковель-Брест йүнәлешендә ныҡ көсәйтелгән дошман көстәре 2-се Белорус фронтына ҡаршы тора: "Үҙәк" армиялар төркөмөнөң 2-се армияһы соединениелары һәм "Көньяҡ" армиялар төркөмөнөң 4-се танк армияһы. Совет командованиеһы үҙебеҙҙең 47-се армия көстәре менән, Ковелде төньяҡтан һәм көньяҡтан урап үтеп, дошманға төп һөжүмде ошонан яһарға ниәт итә; 70-се армия Камень-Каширскийға һөжүм итергә, 61-се армия Припять йылғаһының көньяҡ яр буйын Давид-Городок һәм Пинск ҡалаһы районында дошмандан таҙартырға тейеш була.

Немец командованиеһы, Белоруссия ерҙәрендәге алыштарҙың яҡын киләсәктә хәл иткес роль уйнаясағын яҡшы аңлап, оборонаға күскән ғәскәрҙәренә резервтарынан өҫтәмә көстәр килтерә. 2-се Белорус фронты районына 7 пехота, бер танк дивизияһы һәм 5 штурм орудиелары бригадалары килеп өлгөрә. 23 мартта немец частары көслө контрударҙан һуң ҡамалған Ковель гарнизонына ярҙамға килеп етә. Беҙҙең 47-се армия ҡаланан көнсығышҡа табан ҡыҫырыҡлап сығарыла. 2-се Белорус фронты ғәскәрҙәре, көстәр нисбәте үҙ файҙаһына булмағанлыҡтан, һөжүм итеү операцияһын туҡтатып торорға мәжбүр була.

Шулай ҙа был алыштарҙа 47-се армия дошмандың ҙур көстәрен тотҡарлап тороп, 1-се Украин фронтының төньяҡ флангыһын ҡаплап тора.

Апрель баштарында алғы һыҙыҡта көслө алыштар бара, дошмандың көсәйтелгән частары, Турычаны-Раслув районында контрһөжүмгә күсеп, Дольск, Сосновка, Пшевалы ауылдарын ала. Ошо көсөргәнешле мәлдә 7-се гв. корпусы яугирҙарына 10 апрелдә Турья йылғаһының уң яҡ ярында оборонаға күсергә һәм дошманға йылға аша сығыу мөмкинлеген бирмәҫкә бойорола. Артабан корпус соединениеларына, дошман тылына сығып, немецтарҙың Ковель төркөмө частарын тотҡарлап тороп, беҙҙең башҡа частарға һөжүмде дауам итергә мөмкинлек булдырыу бурысы ҡуйыла.

16-сы гв. атлы дивизияһына Турья йылғаһы буйында, Ковелдән көньяҡтараҡ урынлашҡан Владимир-Волынский ҡалаһы йүнәлешендә һөжүмгә күсергә бойорола. Яңы боевой бурысты үтәй башлау өсөн яугирҙарыбыҙ, яҙғы юлһыҙлыҡ шарттарында "Яблонка Малая - Мокшец" маршруты буйлап 120 саҡрым ара үтеп, Турья йылғаһы ярҙарына килеп етә.

Дивизия командиры һәр полкҡа аныҡ бурыстар ҡуя: 58-се гв. атлы полкына Попувка районында Турья йылғаһын кисеп сығыу, Могильно, Помирки ауылдарын дошмандан таҙартып, 12 апрель кисенә Владимир-Волынский ҡалаһының көнсығыш ситенә бәреп инеү; 60-сы гв. атлы полкына - Блаженник ауылы районында Турья йылғаһы аша сығып, Вербы, Бялозовщизна йүнәлешендә һөжүм итеү һәм 58-се гвардия атлы полкы менән бергә ҡаланы дошмандан азат итеү; 62-се гв. атлы полкына - Турья йылғаһы аша сығып, Владимир-Волынскийҙан төньяҡ-көнбайышҡа табан 3 саҡрым ерҙә тимер һәм шоссе юлдары сатын ҡулға төшөрөп, дошманға резерв көстәрен килтереү юлын ябырға.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

***✓ Хискә бирелеүем ҡайһы саҡта миңә ҡамасаулай, шуға ла ҡан баҫымым юғары. Мин бала саҡтан бәләкәй генә, башҡалар бөтөнләй иғтибар итеп бармаған хәлгә борсолоп, янып йөрөй торғайным.***

# ЙӨРӘГЕМ ТӨНДӘ

**Быйыл сентябрҙә "Йөрәк һүҙе" шиғриәт бәйгеһе үткәндән һуң проект етәксеһе Наилә Сәфәрғолова һүҙ ярышында ҡатнашыусы Салауат Шәйәхмәтов хаҡында "Бәйләнештә" селтәрендәге диуарына шундай һүҙҙәр яҙып ҡуйғайны: "Йөрәк һүҙе" шиғриәт бәйгеһендә майҙан тотҡан, Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев исемендәге премияға лайыҡ булыусы (3 урын), Миәкә районы егете Салауат Шәйәхмәтовҡа ошо көндәрҙә 25 йәш тулған икән!**
**Күңелдәребеҙҙе арбаған, шиғырҙары менән беҙҙе әсир иткән, ҡыуандырған, шатландырған һәм илатҡан Салауатҡа иң изге теләктәремде юллап, аҡ бәхеттәр, саф мөхәббәт, ижади үрҙәр, ҡоростай сәләмәтлек теләгем килә. Һин - башҡорт әҙәбиәтенә, башҡорт халҡына үҙ һүҙеңде әйтер өсөн тыуған Шағир, Салауат. "Йөрәк һүҙе" сәхнәһе һине оло ижад һуҡмаҡтарына сығарып, яңынан-яңы ижади үрҙәргә алып менһен!"**
**Беҙ ҙә ҡыҙыҡһындыҡ ошо Салауат атлы егет менән һәм тиҙ арала "Киске Өфө"лә осрашып, бына ошо ҡыҙыҡлы әңгәмәне ҡорҙоҡ.**

**Салауат, ҡайҙа тыуып үҫтең, ниндәй уҡыу йорттары тамамланың?**

- Мин Миәкә районының Нарыҫтау ауылында 1998 йылдың 13 сентябрендә тыуҙым. Ғаиләбеҙҙә өс бала үҫтек: оло ағайым Нургиз, һеңлем Ғәлиә. Атайымдың исеме Ғәзинур, әсәйем Нәсимә. Илсеғолда 6-сы класты бөткәс, Стәрлетамаҡтағы 3-сө Башҡорт лицей-интернатында уҡыным. Артабан Ҡаҙан дәүләт энергетика университетында уҡыуымды дауам иттем. Дүртенсе курста уҡығанда уҡ бер компанияла эшләй башланым. Эшләп тә, уҡып та йөрөгәс, диплом яҡлауы еңел булманы.

**Һин һөнәрең буйынса энергетик, тимәк. Ә бына шиғриәткә, телгә һөйөү һиндә нисек барлыҡҡа килде?**

- Ғаиләбеҙҙә әҙәбиәт тураһында әллә ни фекер алышҡаныбыҙ булманы. Миңә ундай мөхит бала сағымда, киреһенсә, етмәгән кеүек ине. Стәрлетамаҡта лицей-интернатта уҡығанда миндә әҙәбиәткә һөйөүҙе урыҫ теле уҡытыусыһы тыуҙырҙы.

**Зиһенеңде формалаштырыуҙа ниндәй яҙыусының ҡайһы әҫәре йоғонтоло булды?**

- Джек Лондондың "Мартин Иден" романы. Роман геройы барыһынан өҫтөн торһа ла, үҙенең уй-хистәрен башҡаларға аңлата алмай. Әгәр ҙә ул романды уҡымаған булһам, мин бөгөн бөтөнләй башҡа кеше булыр инем.

**Ә нисек шиғыр яҙа башланың?**

- Тәүҙә урыҫ телендә шиғыр яҙып ҡараным. Иосиф Бродский менән Осип Мандельштам миңә яҡын булды. Башта уларҙыҡына оҡшатып яҙып маташтым. Әле "Йөрәк һүҙе"ндә өсөнсө турҙағы "Яныу" шиғырын "Бабич" фильмын ҡарағандан һуң яҙҙым. Шул фильмды ҡарағандан һуң төнө буйына йоҡламаным...

**Башҡорт шағирҙарынан кемдәрҙе яҡын итәһең?**

- Әлбиттә, Шәйехзада Бабич, Рәми Ғарипов һәм Рәйес Түләк. Үткән "Йөрәк һүҙе" шиғриәт бәйгеһендә Руслан Хайсаровтар Рәйес Түләктең "Яныу" шиғырын уҡығанда миндә ошо проектта ҡатнашыу теләге тыуғайны...

**Һин нык хискә биреләһең, Салауат. Бындай сифаттар башҡорт кешеһенә үтә лә хас тойғолар. Тойғолар менән йәшәүе һиңә ҡыйын түгелме?**

- Ундай тойғоларҙы һүҙ менән генә аңлатып та булмайҙыр ул. Хатта һин шиғыр яҙырға ултырғанда ла уның нимә менән башланырын һәм нисек тамамланырын белмәйһең. Бродский был хәләтте "Тел интуицияһы" тип атай. Хискә бирелеүем ҡайһы саҡта миңә ҡамасаулай, шуға ла ҡан баҫымым юғары. Мин бала саҡтан бәләкәй генә, башҡалар бөтөнләй иғтибар итеп бармаған хәлгә борсолоп, янып йөрөй торғайным. Был сифатым ҡайһы ваҡыт эшемдә лә сағылыш таба.

**Шиғырҙарың ниндәй тойғолар кисергәндә күберәк яҙыла?**

- Матур һәм дөрөҫ һорау. Мин өйләнеп тә ҡараным бит, әммә айырылышырға тура килде. Кәләшем миңә: "Һин миңә бер тапҡыр ҙа шиғыр бағышлап яҙманың", - тине бер саҡ. Мин уға: "Сөнки мин һинең менән бәхетле инем, шуға яҙманым", - тип яуап бирҙем. Туған телемдә яҙылған шиғырҙарымдың береһе лә үҙемде бәхетле итеп тойоуҙан яҙылманы. Шиғыр ул тәрән катарсис емеше.

**Бәхет тураһында яҙып булмай. Сөнки бәхет үҙе үк проблеманы юҡҡа сығара, шулаймы?**

- Эйе, яҙып булмай. Кәләшем менән айырылышҡас ҡына ошо шиғырҙы яҙҙым:

Бар бит күҙҙәң янғыҙ ҡыуанысы,
Һалҡын күҙҙәң төнө ни тора?
Һин һалышма минең йырҙарыма,
Ә Хоҙайҙан шундай төн һора.
Бар бит донъя, ҡайҙа бәхет иле
Беҙҙең өсөн генә яралған.
Көнләшеүсе ялған ҡара йөҙҙәр
Беҙгә тиклем ҡасып таралған.
Һин ашыҡма, бына бүлмәң, йәнем.
Мин көтөүсе ваҡыт ғазабын.
Һин ашҡынма, бына ҡулым, йәнем.
Мин сәсеүсе яҙмыш баҡсаһын.
Үпкәләмә әгәр төнөн килеп,
Юлдар көтә тейеп борсоһам.
Тимерҙе лә ҡыҙыу саҡта һуҡмай,
Бар һорауға яуап тапмаһам.
Бөтә хисем һиңә - йылы диңгеҙ,
Йөрәк яры ҡалыр офоҡта.
Йәшлек кенә көтмәҫ килер яҙҙы,
Булмаҫ уны бороп тотоп та.

**Мин Салауат атлы бик күп кешеләр менән аралашҡаным булды. Был исем Салауат батырыбыҙҙың исем-аты ла, шулай уҡ доға ла. Был исемде йөрөтөүҙең яуаплылығын нисек тояһың? Салауат булыуы ауырмы, еңелме?**

- Мәктәптә уҡығанда был исемде йөрөтөүҙең яуаплылығын тоя башлағайным. Исемем Салауат булғас, мотлаҡ юлбашсы булырға тейешмендер тип тә уйланым. Үҫмер саҡта был исемде тыныс йөрөттөм. Һуңыраҡ был исемдең доға икәнлеген аңлағас, Хоҙайҙан ҡурҡа башлағас, исемемдең яуаплылығын нығыраҡ тоя башланым. Татарстанда, мәҫәлән, исемемде ишетеү менән минең башҡорт икәнлегемде аңланылар.

**Әле ҡайҙа кем булып хеҙмәт итәһең?**



## Был яҡынды

- Яр Саллыла "СНЭМА-СЕРВИС" компанияһында электр ҡоролмаларын көйләү һәм һынау буйынса инженер булып эшләйем. Етәкселәрем бик яҡшы, шуға эш хаҡы йәһәтенән юғарыраҡ урынды тәҡдим итһәләр ҙә, шул компанияла ҡала киләм. Башҡорт теленә һәм әҙәбиәтенә арналған "Йөрәк һүҙе" проектында ҡатнашыр өсөн киткәндә лә урыҫ милләтенән булған етәксем Алексей Маврин бер ҙа ҡаршылыҡ күрһәтмәне. Ул, киреһенсә, ойошмаһы составында шиғыр яҙған кеше булғанына шатланды ғына. Конкурс барғанда ла туҡтауһыҙ шылтыратып, хәлемде белешеп, дәртләндереп торҙо.

**Хәҙерге йәштәр ниндәй улар? Ниңәлер уларҙың күбеһе ғаилә ҡорорға ашҡынып тормай. Бына беҙ, мәҫәлән, өйләнеүҙе, ғаилә ҡороуҙы төп маҡсаттарыбыҙҙың береһе итеп белдек...**

- Беҙҙең быуынға интернет йоғонтоһо көслө бит. Хәҙерге йәштәрҙең күбеһе ғаилә ҡороуҙан алда үҙҙәренең эшен асып, ныҡлап аяҡҡа баҫырға тырыша, өйләнеүҙе, кейәүгә сығыуҙы икенсе планға ҡуя. Ә эшҡыуарлыҡта тиҙ генә уңышҡа өлгәшеү мөмкин дә түгел. Бының өсөн ваҡыт кәрәк һәм күп йәштәрҙең өйләнмәй йөрөүе шуға ла бәйлелер. Ә былай мин аралашҡан мөхиттәге тиңдәштәрем барыһы ла иртә ғаилә ҡороусылар.

***Мәктәптә уҡығанда был исемде йөрөтөүҙең яуаплылығын тоя башлағайным. Исемем Салауат булғас, мотлаҡ юлбашсы булырға тейешмендер тип тә уйланым. Үҫмер саҡта был исемде тыныс йөрөттөм. Һуңыраҡ был исемдең доға икәнлеген аңлағас, Хоҙайҙан ҡурҡа башлағас, исемемдең яуаплылығын нығыраҡ тоя башланым. Татарстанда, мәҫәлән, исемемде ишетеү менән минең башҡорт икәнлегемде аңланылар. Ғөмүмән, исемем миңә ниндәйҙер айырым мөнәсәбәт тә белдертә ул. Мәҫәлән, башҡорт теленә һәм әҙәбиәтенә арналған "Йөрәк һүҙе" проектында ҡатнашыр өсөн киткәндә лә урыҫ милләтенән булған етәксем Алексей Маврин бер ҙа ҡаршылыҡ күрһәтмәне. Ул, киреһенсә, ойошмаһы составында шиғыр яҙған кеше булғанына шатланды ғына.***

**Проза яҙырға теләгең булманымы?**

- Ундай уйҙар ҙа тыуып ҡуя. Тик хикәйә, повесть түгел, ә үҙемде семеткән берәй темаға эссе яҙыу теләге бар.

**✓ Мин уға тиклем дә шиғырҙарымды диуарыма ҡуя инем, тик ошо "Йөрәк һуҙе" проекты дуҫтарымды һәм таныштарымды уларға иғтибар иттерҙе. Улар мине тыңланылар һәм уйлана башланылар.**

# ЙОНДОҘ ЙОТҠАН...

**Үҙеңде шағир итеп тояһыңмы?**

- Көндәлдәрҙә, телдә Бабич, Рәмиҙәр булған саҡта миңә лә "Һин- шағир" тип әйтһәләр, ҡыйын булып китә...

**Хәҙерге прагматик йәштәр янында һиңә ҡарайым да, Бабич һинең һымаҡ хисле булғандыр, тип ҡуям. Хәҙер һинең һымаҡ хислеләр бик аҙ, миңә ҡалһа.**

- Хәҙер клиплы фекерләүгә эйә кешеләр алғараҡ сыға шул. Ғаилә ҡорам, тиһәң дә, бөтә нәмә матди яҡҡа килеп терәлә. Бәхетле йәшәйем тиһәң, прагматик булырға тура киләләр, күрәһең.

**Дуҫтарың һинең шиғыр яҙыуыңа нисек ҡарай?**

- "Йөрәк һуҙе"ндә сығыш яһағас, бер дуҫым сәскәләр тотоп килде лә: "Мин һине беләм тип уйлап йөрөгәйнем, мин һине бөтөнләй белмәйем икән", - тине. Мин уға тиклем дә шиғырҙарымды диуарыма ҡуя инем, тик ошо "Йөрәк һуҙе" проекты дуҫтарымды һәм таныштарымды уларға иғтибар иттерҙе.

## кемгә һуҙаһы?

Улар мине тыңланылар һәм уйлана башланылар. Береһе килеп: "Йөрәгем төндә йондоҙ йотҡан" тигән юлдарың нимә аңлата ул?" тип һораны хатта...

**Һин "Кибернетика" тип яуап бирҙеңме?**

- Нисек аңлаһаң да ризамын, тинем. Мин барыһы өсөн дә Наилә апайға рәхмәтлемен.

**Техник белемле ижадсылар әҙәбиәтте, сәнғәтте, мәҙәниәтте үҙенсәлекле тоя, ә филология аша әҙәбиәткә килеүселәр традицион стилдә үҙ итә. Техник белемле ижадсы булараҡ, һин быны нисек аңлата алаһың?**

- Әгәр ҙә шиғриәтте ритмика, фонетика яғынан системалы ҡарағанда шиғриәт ысынында үҙе математика. Ҡайһы берәүҙәр шиғыр яҙам тип хатта хикәйә яҙып ҡуя. Ҡайһы бер курсташтарым да яҙған шиғырҙарын миңә ебәрә. Мин уларҙан үҙемде өҫтөн итеп ҡуймайым, әммә мин сағыштыра беләм. Шуға күрә минең техник белемем шиғырҙарҙы билдәле бер системаға һалырға булышлыҡ итә.

**Әлегәсә яҙылған шиғырҙарыңда хистәреңде бер аҙ йүгәнләп, фекер әйтергә ынтылыуың математик булыуыңдан киләләр тим, шулаймы?**

- Шулайҙыр, әммә мин уны үҙем дә һиҙмәйемдер.

**Шуға күрә лә әлеге яҡшы башланғыстарыңды дауам итеп, ижад итеүеңде ташлама, тип әйткем килә. Ваҡыт менән тормош тәжрибәһе лә килер, һалҡынды ла өрөп ҡабырға өйрәнерһең, мөхәббәтеңде лә табырһың. Шиғриәт тик йәшлек яныуың ғына булып һүрелмәһен, тием. Бабич, Рәми, Түләк йогонтоһо менән был юлға килгәс, шиғриәттә киләсәгең яҡты булырына өмөтләнәм, Салауат ҡустым! Һәм гәзит уҡыусыларға һинән шиғри ҡүстәнәс тә тәҡдим итәйек.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

### Яныу

Йөрәгем төндә йондоҙ йотҡан...
Был ялҡынды кемгә һуҙаһы?
Аждаһалай булып, күкрәк йыртып,
Ҡанаттарҙы ҡуҡҡә ҡағаһы.
Был бит, дуҫым, төнөн килгән фекер,
Ә төндәрен Тәңрем һөйләшә.
Яңғыҙ ҡуҙҙәр төшөп, тәҙрә сиртеп,
Иртәгәгә донъя көйләшә.
Быңдай ҡуҙҙәр донъя яндырырлыҡ,
Ләкин улар һыҡтап илайҙар
Быңдай ҡуҙҙәр ғәләм батырырлыҡ,
Ләкин улар йәлләп тыңлайҙар....
Мин тұҙмәнем,
Ниңә, ниңә, тинем,
Башым эйҙем, маңлай терәнем.
Был һүҙҙәрҙән хатта ҡояш ҡурҡты.
Ул йәшенгәс яуап эҙләнем.
Һәм кұҙләнем...
Оҙаҡ көттәрмәне,
оран һалды бөйөк Исрафил,
Быгауҙарын тартып ер аҫтынан
Килеп сыҡты илаҡ Ғазазил.
Килеп сыҡты ла шаҡ ҡаттырҙы,
Тубыҡ бөкләп аяҡ эҙләне:
"Ар-Рахманым, ғәфү итсе!" - тип,
Һин һалышма шағир юлдарына,
Боҫма унын рифма артына.
Үҙ һүҙеңде әйт һин ҡыйыу итеп,
Милләт йырлар һинең хаҡында.

Ҡан-дәүерҙең алтын тәхетенә
Күпме ҡорбан һалыр башҡорт?
Эх, шалтырай ауыр быгауҙары,
Ер аҫтында көтә тән-йортом.

Йәшлегеңдән үткер хәнйәр юнма,
Керһен көрәш һәр көн аңыңа!
Шул талапта тыуыр тағы башҡорт,
Даны ҡайтыр сәсән халҡыма.

Бар ғүмерем минең һынау булһын,
Ҡайнар ҡаным булһын эҙ, тамға.
Йөрәк һүҙем янһа янһын әйҙә,
Ҡунһын көлө һәр бер балаға!

Ҙур ғәләмдә яныр йондоҙ булһам,
Мәрмәр ташы тапмаҫ затымды.
Ар-Рахманым ғәфү итһә мине,
Түләр инем намыҫ хаҡымды.

...Был бит, энем, төнөн килгән фекер
Мин ышанам - яҡты таң атыр.
Агинәйҙәр йылы ҡулдарымдан
Мәңгелеккә тотоп оҙатыр.

Иҫләйһеңме ҡуйы томандарҙы,
Шул томанға әллә ашыҡтым.
Ярым айҙың көмөш нурҙарында
Ялған шәүлә булып аҙаштым.

Шул шәүләлә күрҙем һинең йөҙҙө,
"Балаҡайым, һин бит әле йәш".
Юҡ, эш йәшлектә түгел, әсәй,
Шағир төҫө һынау ул, көрәш.

Яҙмыштарҙан уҙмыш булмай тиһең,
Ә мин һаман алға сабамын.
Минең өсөн ҡурҡма, тик үҙеңде,
Ғүмереңде Хоҙай һаҡлаһын.

Иҫерткес бар хистәр сорнап алып,
Алып китһә мине алыҫҡа,
Мин беләмен, һин көтөрһөң мине
Айырылған ағас тупһала.

Уҙған саҡта төшкән ынйы йәшең
Йондоҙ булып йыһан яҡтыртты.
Белһәң ине, ошо йондоҙ, йәнем,
Һүнер шағир ҡуҙын баҙлатты.

Ҡара, әсәй, меңәрләгән ҡуҙҙәр
Бөгөн бары миңә текәлгән.
Фәрештәгә үҙен тиңләне...
Тиңләшмәне.
Ваҡыт үткән инде.
Ә мин биттәренә ҡараным
Тәнен йолҡҡан илаҡ иблистәрен
"Минең батшам!" - тигән ҡоҙаның...
Ҡуҙғалмайҙар, ҡуҙҙәрендә һағыш,
Хәҙер ҡайҙа инде ҡасаһы...
Бөтә донъя хатта бүрткән арыш.
Сәхнәлә - яныу тантанаһы!
Мәсет һалдыҡ,
Хатта тауға менеп,
сәхәбәне ете ураныҡ.
Ә һуңынан аҫҡа йүгереп төшөп,
Зәм-зәм тиеп һыуын һыуланыҡ.
Беҙ һунланыҡ...
Нимә ҡараныгыҙ мәзиндәр?
Хәҙер инде унын өсөн беҙ -
Ҡулдә йөҙгән ваҡ тәлмәрйендәр.
Мин ишетәм, ауыҙҙарҙы ябып
Шихандарҙы инде турайҙар.
Ҡанлы ҡулдар ҡанһыҙ телде тотоп,
Йәһәннәмдең ташын сарлайҙар.
Йөрәгем төндә йондоҙ йотҡан...
Был ялҡынды кемгә һуҙаһы?
Ҡанлы ҡулдарығыҙ кеҫә тапмай,
Ниндәй һыуҙа уны йыуаһы?..

### Таң

Һындырылған юлдар кире ҡаҡты,
Ең һыҙғанам оло тормошҡа.
Ялағайҙар ҡаршы сығыр миңә,
Яныр йондоҙ яңғыҙ офоҡта.

Һәр бер һүҙем ҡайнар тамсы булып,
Туң илемдең йылы тупрағы
Орлоҡланыр намыҫ яҙы менән,
Мәңге балҡыр шағир хыялы.

Күпме һағыш йотҡан оло йөрәк,
Һәр ғүмерҙең бар бит аҙағы.
Эх, туғаным, маңлай терәр өсөн,
Ҡара ерҙең юҡ бит бысрағы!

Ҡарап ҡалам һыҙылып атҡан таңға,
Төндә сыҡтыҡ,
Туҙмаҫ йөрәгем
Кем хаҡында уйҙар борсой һине,
Ниҙәр көтә икән төйәгем?

Мәңгелеккә һалған тура фекер,
Баш һөйәгем, түҙ һин, сатнама!
Хоҙайымдың изге васыяты
Оҡшар микән бөгөн батшама?

Һынмаҫ микән тештәр иткә батып,
Бетле эттәр миңә ырғыһа.
Мин түҙермен ҡуҙҙәренә ҡарап,
Мин түҙермен, тик һин һатылма.

### Тупһа

Бына, әсәй, нисәнсегә инде
Хушлашабыҙ ошо тупһала.
Йылы ҡулдарыңда ирер өсөн
Ҡайтам әле буран булһа ла.

Ҡайтам әле, әсе елдәр сығып
Ҡабырғамды дүртҡә бөкһә лә.
Бар ғәләмдәр миңә ябырылып
Төн ҡараһын юлға һипһә лә.

Ғәфү ит һин, әгәр ҡай саҡтарҙа
Күңеленә шомлоҡ өҫтәһәм,
Тормошомдоң ығы-зығыларын
Нескә иңдәреңә төшөрһәм.

Фани донъяларҙың тулҡынында
Мин йөҙәмен артҡа ҡарамай.
Шул саҡтарҙа улың-сәфәрсенең
Ауыр уйҙар аңын яфалай.

Ҡара әле, күпме йондоҙ ҡуҡтә
Бар йыйылһын бирә өндәшмәй.
Нишләп кенә был ауыһыҙ ерҙә
Йәшәп булмай икән көнләшмәй?

Нишләп балҡып төшкән ҡояш нуры
Бар Ер шарын тигеҙ йылытмай?
Бит донъяға баҡҡан ай уты ла
Һәр кешенең юлын яҡтыртмай.

Ҡар-буранлы, бормалы ҙур юлда
Мин тағы ла көртҡә абынам.
Инде һиҙәм, һинең таянысһыҙ
Артыҡ оҫта юлсы булалмам.

Ултыр әсәй, ҡара ҡуҙҙәремә
Ни күрәһең, әйтсе, шым ҡалма.
Йөрәгемдең һүккан оҙон көйө
Оҡшамаҫмы әллә халҡыма.

Аңларҙармы икән уйҙарымды,
Һалһам әгәр ошо юлдарға.
Башҡа сара тапмай, бармаҡтарым
Дуҫ - ҡәләмдә ала ҡулдарға.

Мин йырлаған йырҙы аңламаны
Яратамын тигән кешеләр.
Ниңә, әсәй, һинең һөйөүеңһеҙ
Бар эйәләр яуыз, тешләләр.

Һинең терәгеңдә тойор өсөн
Мин тағы ла ҡуҡҡә ҡарайым.
Көләһендер инде, үҫеп еткән ир-ат
Һаман һинең кескәй малайың.
Кемде көтә икән сәсән илем,
Кемдән ҡурҡа икән йәһәннәм?

Тик мин беләм, милләт кемгә мохтаж
Кем һаҡлаусы унын усағын.
Шул ҡатындың ҡаны аға миндә,
Шул ҡатындың тоям ҡарашын.

Бар әсәләр, ғәфү итегеҙсе,
Сибек тауыш менән илатмам.
Бер ҡулымда булһа ҡайнар һүҙем,
Бер ҡулымда булыр нур, илһам.

Әсәм теле миңә сәсән теле,
Һинән башҡа намыҫ, илем юҡ
Әсәм йөҙө миңә йәннәт сиге,
Һинең менән халҡым йәне тұҡ.

Мин башлаған яуға өмөт бағып,
Бар шағирҙар оран һалығыҙ!
Һыуыҡ дәүерҙәрҙә юғалмаҫҡа
Гөрһөлдәтеп усаҡ яғырбыҙ!

...Бына, әсәй, нисәнсегә инде
Хушлашабыҙ утлы тупһала.
Йылы ҡулдарыңда ирер өсөн
Ҡайтам әле буран булһа ла.

Ҡайтам әле, әсе елдәр сығып
Ҡабырғамды дүртҡә бөкһә лә,
Бар ғәләмдәр миңә ябырылып
Төн ҡараһын юлға һипһә лә...

### Яңы хәбәрҙәр

Арыманым яңғыҙ бүлмәләрҙә
Ялған айҙың тынын һағалап.
Һине көтәм төнөн, һине көтәм!
Һине көтәм, яуап самалап.
Ҡайтыр микән кире ҡары моңдар?
Ут йотһа ла тиле йәшлегем.
Кемдәр һуң ул? Кемдәр икән улар?
Һөйөүемдең күргән кәмлеген?
Йәшлегемдә бәхетемә төрөп,
Мин юғалам буран-бормала.
Эҙләмәгеҙ мине, эҙләмәгеҙ,
Һағыныуҙан тыным һынһа ла.
Сәләмеңде елдәр еткермәһен,
Күҙләмәһен мине ямғырҙар.
Йырҙарымды устарыма һалып,
Бәлки, тыңлар серле йондоҙҙар:
"Етер көнөм, килер яҙым.
Мәңгелектән күҙ алмам.
Һинең йылы ҡулдарыңһыҙ
Был донъяла булалмам..."

**Салауат ШӘЙӘХМӘТОВ.**

✓ *Мәрйәм апай мәктәбе - музыка мәктәбе генә түгел ул, тимәк, тормош мәктәбе, кендек ҡаның тамған ергә тоғролоҡ мәктәбе. Ә күпме бала күңелен моң менән һуғарған!*



*АТАЙСАЛҒА - ИЗГЕ ҒӘМӘЛДӘР*

**Тыуған төйәгенә, атайсалына һөйөү униң бар булмышында сағыла. Һәр күҙәнәгендә йәшәйҙер ул һөйөү. Күҙҙәрендәге ниндәйҙер моңло һағыш ҡатыш нур ҙа, йөҙөндәге ихласлыҡ менән йылылыҡ та ошо һөйөү балҡышылыр. Әйләнә-тирәһендәге һәр кемгә әсәләрсә хәстәрлек, әйтеп аңлатҡыһыҙ наҙ менән баға ул, һәр беребеҙ өсөн борсолоу ҙа күрәм мин уның ҡарашында. Һүҙем - Рәсәй Федерацияһының һәм Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Салауат Юлаев ордены кавалеры, дирижер, уҡытыусы, йырсы, йөҙҙән ашыу йыр авторы, күренекле йәмәғәт эшмәкәре Мәрйәм Ғәзизрахман ҡыҙы СОЛТАНОВА хаҡында.**

# МӘРЙӘМ АПАЙ МӘКТӘБЕ



Быйыл - униң йылы. Әле яңы, яҙ көнө генә, Өфөлә, "Торатау" конгресс-холлында шаулап-гөрләп үҙенең 85 йәшлек юбилейын үткәргәйне. Шул тиклем мәртәбәле сараға ылау-ылау итеп яҡташтарын алып барыуҙы ла үҙ иҫәбенә ойоштороғайны. "Өфөгә бара алмай ҡалған ауылдаштарым өсөн коцертымды Маҡарҙа үткәрәм", - тип шул саҡта уҡ әйтеп-ниәтләп ҡуйғайны Мәрйәм апай. Һәм бына, үҙе етәкләгән Ишембай ҡалаһы Балалар музыка мәктәбе Маҡар филиалының 25 йыллыҡ юбилейы айҡанлы йыйҙы ул ауылдаштарын моң байрамына.

Эйе, ғәҙәти тамаша түгел, ысын мәғәнәһендә байрам, тантана булды ул көн. Күңел моң, һөйөү менән мөлдөрәмә тулды. Моң менән ҡауышыуҙан әйтеп аңлатҡыһыҙ күңел рәхәте кисереп ултырылды. Саҡырылған ҡунаҡтары - Башҡортостандың һәм Татарстандың атҡаҙанған артисы Айгөл Һағынбаева, Башҡорт дәүләт филармонияһы солисы, үҙенсәлекле тауыш эйәһе Әлиә Исҡужина, популяр йырсылар, бик күп йыр конкурстары лауреаттары Рәфис Ишбаев менән Ильяс Кинйәғолов, инструменталь-симфоник оркестр былай ҙа матур сараның алыштырғыһыҙ биҙәге булды.

Байрамдың иң тулҡынландырғыс мәле - төрлө йылдарҙа Мәрйәм Ғәзизрахман ҡыҙынан йыр буйынса дәрес алған уҡыусыларының сығышы булғандыр шулай ҙа. Улар араһында республикала танылыу тапҡан Регина Тәхвәтуллина, Гөлназ Рәхмәтуллина, Рәфис Ильясов, Илһам Абдуллин кеүек йырсылар ҙа, уҡытыусы-остаздары менән бер ҡатарҙан эшләп йөрөгән йыр уҡытыусылары ла, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре лә, ҡасандыр музыка мәктәбен тамамлап, бөгөн республикабыҙҙың төрлө төбәктәрендә, төрлө тармаҡтарҙа эшләп йөрөгән һөнәр эйәләре: табиптар ҙа, юристар ҙа, эшҡыуарҙар ҙа, сәйәсмәндәр ҙә һәм, әлбиттә, мәктәптең бөгөнгө тәрбиәләнеүселәре бар ине. Ҡиәмәтлек әсәһен, хеҙмәттәшен, рухташын матур байрамы менән ҡотларға килгән "Беҙ бергә" Башҡортостан ҡатын-ҡыҙҙар союзы президиумы ағзаһы Шаһиева Гүзәл Ғайса ҡыҙы музыкаль тәрбиәнең кеше тормошондағы ролен һыҙыҡ өҫтөнә алып, бөйөк совет педагогы В.А. Сухомлинскийҙың "Музыкаль тәрбиә биреү - музыкант тәрбиәләү менән генә сикләнмәй, ул иң тәүге сиратта кеше тәрбиәләү" тигән һүҙҙәрен иҫкә төшөрҙө. Дөрөҫ һүҙҙәр. Шуға ла ниндәй генә һөнәр эйәһе булһалар ҙа юғалып ҡалмай, йөрәгендә моң йөрөтөүселәр улар - һәр яҡлап камил шәхес, улар күңелендә насарлыҡҡа урын юҡ. Педагог-новаторҙың "Йөрәгемде балаларға бирәм" тигән ҡанатлы һүҙҙәре лә бар. Был һүҙҙәр тап Мәрйәм Ғәзизрахман ҡыҙы хаҡында әйтелгән кеүек: ул да йөрәгенең бар йылыһын балаларға биреүселәр затынан.

Музыка мәктәбен көмөш юбилейы менән ҡотлау ваҡыты-ваҡыты менән Мәрйәм Ғәзизрахман ҡыҙының үҙ юбилейын хәтерләтте. Был аңлашыла ла, сөнки был мәктәп - униң ижад һәм хеҙмәт емеше. Ошо мәктәптә тәрбиә алған йырсыларҙың репертуарҙары тулыһынса тип әйтерлек Мәрйәм апайҙың йырҙарынан тора. Уларҙың һүҙҙәре лә башлыса яҡташ шағирҙарыныҡы. Үҙен башҡарған эшкә ошондай мөнәсәбәт тә тыуған төйәгенә һөйөү тәрбиәләү өлгөһө.

...Алыҫ 1998 йылда Мәрйәм апайҙың тыуған йортонда йәшәгән бер туған ҡустыһы баҡыйлыҡҡа күсә. Атаһының ҡул йылыһын, әсәһенең күҙ нуры һеңгән йорт нигеҙен бер генә көн дә етемһерәтеп ултыртҡыһы килмәй Мәрйәм апайҙың - ҡустыһын ерләгәндең икенсе көнөнә үк, ҡалаға фатирын, эш урынын ҡалдырып, Маҡарына ҡайта ла төшә. Теләге - тыуған ауылында музыка мәктәбе асыу. Күндереүе еңелдән булмаһа ла, район етәкселегенән ризалыҡ алынған, белеме лә, эш тәжрибәһе лә етерлек.

Мәктәпте тамамлағас, атаһы униң математика факультетына уҡырға инеүен теләй, ә Мәрйәм, йырһыҙ-моңһоҙ йәшәй алмауын ваҡытында аңлап, Стәрлетамаҡ мәҙәни-ағартыу училищеһын һайлай. Униң был аҙымын заманында башбаштаҡлыҡ тип баһалайҙар. Юҡ, һис кенә лә башбаштаҡлыҡ түгел, униң ныҡышмаллығы ла, талапсанлығы ла маҡсатлы булыуҙан, үҙ-үҙен баһалай белеүҙән килә бит. Шулай булмаһа, алған белеме менән генә ҡәнәғәтләнеп ҡалмай, Өфө сәнғәт училищеһын, эш-ғаилә-балалар араһында өҙгөләнеп, Гнесиндар исемендәге Мәскәү дәүләт музыкаль-педагогия институтын тамамлай алыр инеме! Ҡайҙа ғына эшләнә лә ул етәкләгән хор коллективтары енеү артынан еңеү яулай, ҙур майҙандарҙа 800 кешенән торған хорға етәкселек иткәне бар. Үҙ-үҙенә, үҙ көсөнә ышаныып ҡайта ул Маҡарына. Нигеҙенән һыуыҡ килеп, иҙәндәре ҡыраушып торған өйҙә йәшәгәнен күргәс, улы уны ниәтенән һүрелдерергә самалап та ҡарай, әммә Мәрйәм Ғәзизрахман ҡыҙы ауырлыҡтарҙан ҡурҡып, баҙап, башлаған эшен ташлап ҡуя торғандарҙан түгел. Тыуған ауылындағы музыка мәктәбе хыял ғына түгел униң өсөн - маҡсат. Үҙенә генә хас саялыҡ, тәүәккәллек, ныҡышмаллыҡ менән ең һыҙғанып тотона ул эшкә.

Егерме биш йыл элек улы йыһазландырған бәләкәй генә булмәлә ҡыҙы алып биргән баяндар, Ишембай һалым полицияһы етәксеһе Ринат Мөхәмәтов бүләк иткән ике пианино менән башланып киткән эш - бөгөн вокал, фортепиано, баян, ҡурай, хор класы тары булған, заман талаптарына яуап биргән музыка мәктәбе. Мәктәп эргәһендә "Селтербей" балалар вокал ансамбле, "Маҡар һыйылары" ҡатын-ҡыҙҙар ансамбле, "Аҡ юл" мәктәп уҡытыусылары хоры, ҡурайсылар ансамбле ойошторолған. Улар ҡатнашмаған конкурс-фестивалдәр юҡтыр, моғайын. Сәхнә костюмдарының, конкурс-фестивалдәрҙә ҡатнашыу менән бәйле сығымдарҙың бағыусыһы - Мәрйәм Ғәзизрахман ҡыҙының улы Радик Солтанов. Һәр яҡлап өлгөлө коллективтар - районыбыҙҙың мәҙәни йөҙө, барлыҡ сараларҙың уртаһында - улар. Мәктәптең бөгөнгө уҡытыусылары ла - Мәрйәм Солтанованың уҡыусылары. Улар ҙа, остаздарының юлын дауам итеп, атайсалдарына хеҙмәт итергә ҡайтҡан. Мәрйәм апай мәктәбе - музыка мәктәбе генә түгел ул, тимәк, тормош мәктәбе, кендек ҡаның тамған ергә тоғролоҡ мәктәбе. Ә күпме бала күңелен моң менән һуғарған ул! Моң менән бергә ихласлыҡ, яҡтылыҡ, изгелек, әҙәплелек, эшләгән эштән йәм таба белеү кеүек күркәм сифаттар ҙа һеңгән улар күңеленә.

...Мәрйәм Ғәзизрахман ҡыҙының бер ниндәй үлсәүҙәргә һыймаҫ ҡиммәтен, тослоғон бар тәрәнлегендә аңлап, йөрәктән үткәреп ултырғанда "Был тиклем көстө ҡайҙан ала икән апай?" тигән һорау тыуа. Тәбиғәт биргән һәләтте эшкә егергә өйрәтеү өсөн генә лә күпме тырышлыҡ, сәм, үҙ-үҙенә талапсанлыҡ кәрәк. Балаларыңды унған, тырыш, булдыҡлы, һәр эште еренә еткереп эшләргә өйрәтеү өсөн дә, иң тәү сиратта, үҙенә өлгө булырға кәрәк. Тыуған ауылдың йәме, йәне, нуры булыу өсөн аҡсалы булыу ғына етәме ни? Мәсьәләнең "аҡсалы булыу" яғын айырым асыҡ яҙам, сөнки Мәрйәм апай тураһында һүҙ сыҡҡанда мотлаҡ "улының аҡсаһы" тигән фекер ҙә килеп ҡушыла. Ә бит ундай улды уға биреү ҙә тәрбиәләп бирмәгән. Бөгөн районыбыҙҙың, хәйер, районыбыҙҙың ғына түгел, республикабыҙҙың Радик Солтанов тип ғорурланып һөйләрлек бай башҡорто бар икән, ул да бит Мәрйәм Солтанованың тынғыһыҙ хеҙмәт емеше.

"Был тиклем көстө ҡайҙан ала икән апай?" тигән һорауға яуап эҙләп, униң тураһында сыҡҡан китаптарҙы аҡтарам. Был китаптарҙа - униң күңел моңдары, йырлы юлдары. Һоҡланыуымды йәшерә алмай, униң төрлө йылдарҙа төшкән фотоһүрәттәренә күҙ һалам. Ябай ғына ауыл ҡыҙының алиһәләр генә күтәрелерлек бейеклектәргә үрләй алыуының сере нимәлә? Мәрйәм апайҙың атаәсәһе Мәхмүзә һәм Ғәзизрахман Рахмановтарҙың 1961 йылда төшкән фотоһы йәлеп итә тәүҙә иғтибарҙы. Ғәзизрахман ағай ҡатынын ауырынан ҡосаҡлап алған, Мәхмүзә инәй, йөҙөнә тыйнаҡ ҡына йылмайыу сығарып, ситкәрәк тартылған. Атаһынан күскән саялыҡта, әсәһенән күскән тыйнаҡлыҡтамы сер? Йәнә бер фотола Өфө дәүләт академияһы профессоры Римма Мусина китап уҡый, ә эргәһендәге йәш Мәрйәм "серем итеп" ултыра. Уйлап ҡараһаң, профессор һынлы профессор эргәһендә ултырған килеш йоҡлап китеү өсөн күпме ҡыйыулыҡ кәрәк! Һәр ваҡыт үҙ-үҙенә ышаныуҙамы униң көсө? Стәрлетамаҡ мәҙәни-ағартыу училищеһы студенты Мәрйәм Рахманованың бейеп төшкән фотоһындағы ихласлыҡ арбай. Йөҙө ҡояштай балҡый, осоп китер өсөн ҡанаттары ғына етмәй һымаҡ. Бәлки, ихласлыҡтыр Мәрйәм апайҙы ҡанатлы иткән көс? Тағы бер фоторәсемдә - үҙенән күҙҙәрен ала алмай яратып баҡҡан тормош иптәшенә бәхетле йылмайып һыйынған һылыу ҡатын. Ярата һәм яратыла белеүҙәлер, бәлки, хикмәт?..

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ысынлап та, көс тә, рух та, үҙ-үҙенә ышаныс та, ихласлыҡ та, ярата һәм яратыла белеү ҙә үҙ-үҙенде баһалай белеүҙән киләләр ул. Үҙ-үҙен баһалай белгәндәрҙең талаптары һәр саҡ юғары. Үҙенә лә, башҡаларға ла. Шуға күрә яулаған үрҙәре лә башҡаларҙыҡына ҡарағанда юғарыраҡтыр. Был донъяла үҙ тәғәйенләнешен, үҙ миссияһын ваҡытында аңлағандар һәр ваҡыт юғарыға ынтылыусан. Юғарыла уларҙы ҡәҙер-хөрмәт, тейешле хаҡ-баһалар көтөп торған өсөн түгел, тап ергә ни өсөн тыуғандарын аңлағандары өсөн.**

**Юғары кимәлдә үтте Маҡар музыка мәктәбенең юбилейы. Күңел моң, һөйөү менән мөлдөрәмә тулды. Моң менән ҡауышыуҙан әйтеп аңлатҡыһыҙ күңел рәхәте кисереп ултырылды. Моң байрамы булды ул көн.**

**Ғәлиә КӘЛИМУЛЛИНА.**

*✓ Был болконға сығып баçһа, аçтан егете һөрәнләй башлаған була: "Ты единственная моя! Люблю! Слышишь - люблю, люблю!" Беҙҙе шулайтып йонсота, теңкәгә тейә торғас, ниһайәт, өйләнделәр былар…*



ТАМАШАСЫ ИҒТИБАРЫНА

# ФИЛАРМОНИЯЛА...

## юбилей миҙгеле башланды

**Хөсәйен Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы 85-се ижад миҙгелен асып, Башҡортостан филармониялары фестивален ойошторҙо: баш ҡала тамашасылары алдында Учалы, Стәрлетамак, Нефтекама, Сибай филармониялары коллективтары сығыш яһаны.**





Фестивалде Учалы филармонияһы артистары "Йөрәктәрҙе моңға сорнап" тип аталған концерт программаһы менән башлап ебәрҙе. Һоҡланғыс таланттарға, милли ғөрөф-ғәҙәттәргә бай Учалы яҡтарынан килгән йыр-моңдо, "Уралтау" бейеү ансамбленең сая бейеүҙәрен, йырсылар Ынйы Әхмәтова, Элизә Ғәлимова, Әлинә Әғлиуллина, Айгөл Хәйруллина, Фәриҙә Ишемйәрова, Азат һәм Азамат Әхмәтхановтарҙың сығыштарын тамашасы бик йылы ҡабул итте.

Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе Өфө тамашасыһына "Урал легендалары" тигән ғәйәт күренекле мюзикл тәҡдим итте. Хозур тәбиғәтле башҡорт илендәге мәғрүр Торатау итәгендә аҡҡан йәмле Ағиҙел буйында тыуған саф мөхәббәт, намыç, изгелек, дуçлыҡ, тыуған ергә оло һөйөү хаҡындағы тарихты бәйән итә был тамаша. Заманса сәхнә инсталляция мөмкинлектәрен, бик ҡатмарлы декорациялар, талантлы музыкаль биҙәү һәм һоҡланғыс яҡтылыҡ эффекттарын ҡулланып сәхнәләштерелгән мюзиклда үҙенсәлекле милли кейемдәрҙә сағыу, ышаныслы образдар тыуҙырған артистарҙың сығышы ҙур ваҡиға булды республика сәнғәт тормошонда. Төп партияларҙы Гүзәлиә Татлыбаева, Илдар Әбдрәшитов, Фәнил Толонғужин башҡарҙы. Шулай уҡ Альберт Килмәков, Ғафуан Фәзуллин, Ришат Хәмитов, Гөлназ Иҙрисова сағыу сәхнә образдары тыуҙырҙы. Мюзиклды сәхнәгә сығарыусы ижади төркөмдөң - сценарий авторы Сәрүәр Сурина, ҡуйыусы режиссер Лира Фәйзуллина, музыкаль яҡтан биҙәүсе Урал Иҙелбаев, балетмейстер Рәмизә Мөхәмәтшина, рәссам Лилиә Сөләймәнованың ижади фиҙаҡәрлеге иң оло маҡтауға лайыҡ.

Нефтекама дәүләт филармонияһы "Рәсәй көсө - халыҡтар берҙәмлегендә" тигән ҙур концерт программаһында илебеҙҙә йәшәгән халыҡтарҙың сәнғәтен, мәҙәниәтен данлаған, төрлөлөгөн сағылдырған тамаша күрһәтте. Нефтекаманың талантлы артистары башҡарған күп милләтле илебеҙ халыҡтарының дуçлығы һәм туғанлығы тураһындағы йырҙар бер кемде лә битараф ҡалдырманы. "Түңгәүер" бейеү ансамбленең дәртле бейеүҙәре, солистар Раян Алтыншин, Илгиз Миңлеәхмәтов, Розалия һәм Азат Ҡарасуриндар, Раиса Исанбаева, Рифҡәт Ғәбделйәнов, Иршат Ҡарасурин, Илнур Мөфтәхов, Сулпан Ғәфүрйәнова, ҡурайсылар Айбулат Рәхмәтуллин, Иҙел Исҡужин, Айваз Малыбаев һәм башҡа артистарҙың сығыштары концерттың матур биҙәлеше булды. Нефтекама филармонияһының фестивалгә сығарған концерт программаһы Рәсәй халыҡтары дуçлығының бөйөклөгөн, көсөн һаҡлауға өндәгән изге маҡсатлы һәм үҙенсәлекле булыуы менән айырылып торҙо.

Сибайҙар фестивалгә концерт - театр берләшмәһенең 30 йыллығына әҙерләнгән, илһөйәрлек рухы менән һуғарылған, төрлө жанрҙарҙы үҙ эсенә алған бай юбилей концерт программаһы алып килде. Урал аръяғының төп мәҙәниәт усағы булған Сибай филармонияһы тамашасы һөйөүен яулаған таланттарға бик бай: Ғаяз Ғәйетбаев, Рөстәм Хәсәнов, Раушан Ниязғолов, Марс Ишморатов, Зәриә Ырыçмөхәмәтова, Айгөл Әсәҙуллина, Зәбирә Әминева, Нәсимә Ғиззәтуллина, Фаил Йортбәков, Дим Шәрәфиев һәм башҡалар. "Сибай" бейеү ансамблен (етәксеһе Азат Нәбиуллин), Халыҡ уйын ҡоралдары оркестрын (етәксеһе Румиль Ярасбаев), талантлы йырсыларҙы, баянсыларҙы, ҡурайсыларҙы тамашасылар дәррәү алҡыштар менән оҙатты.

Башҡортостан филармонияларының тәүге фестивале 2004 йылда үтә. Егерме йыл элек үткән беренсе фестиваль яңы төҙөлгән филармонияларҙың эшенә ярҙам итеү, уларҙың ижад кимәлен күтәреү маҡсаты менән уҙғарыла. Булып үткән фестиваль республика филармонияларының ҡаҙаныштарын, яуланған үрҙәрен, мөмкинлектәрен күрһәтте. Юғары профессиональ кимәлдә маҡсатлы эшләгән, әүҙем ижад иткән концерт ойошмалары икәнен раçланы. Иң мөһиме: филармониялар һаны буйынса беҙҙең республика Рәсәйҙә беренсе урында тора. Башҡа төбәктәрҙә үҙаллы эшләгән ошо тиклем филармониялар юҡ. Тыуған республикабыҙҙың киң үçешкән, бай мираçлы сәнғәтенең, мәҙәниәтенең ҙур ҡаҙанышы был! "Республика филармониялары үҙ-ара тығыҙ хеҙмәттәшлек итә, уларҙы ихлас дуçлыҡ, ижади теләктәшлек ептәре бәйләй", - тине Башҡорт дәүләт филармонияһы директоры Алмаз Сәйетов һәм республика филармониялары етәкселәренә рәхмәт хаттары тапшырып, ошо хеҙмәттәшлекте артабан дауам итеү, үçтереүгә өмөт бағлауҙарын билдәләп үтте.

Башҡорт дәүләт филармонияһының 85-се юбилей ижад миҙгелен асыуға арналған Филармониялар фестивале ҙур Гала-концерт менән тамамланды. Һигеҙ тиçтә йыл ярым ижад осоронда филармония сәхнәһендә бик күп концерттар, ижади осрашыуҙар, фестивалдәр, конкурстар үтте, яңы коллективтар барлыҡҡа килде. Башҡорт эстрадаһы һәм музыка сәнғәте күгендә бихисап сәхнә йондоҙҙары балҡыны, йәш таланттар оло ижад юлына аяҡ баçты. Фестивалдең Гала концертында ошо йылдар һуҙымында тупланған сәнғәт ҡаҙаныштары сағылыш тапты.

Концерт төрлө йылдарҙа эш башлап, ғүмерҙәрен сәнғәткә бағышлаған, филармонияның ғорурлығы булған ветерандарҙы сәхнә түренә саҡырып сәләмләүҙән башланды. Башҡортостандың халыҡ, Татарстандың, Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған артисы, башҡорт эстрадаһының легендаһы Нәзифә Ҡадырова, Башҡортостандың халыҡ, Татарстандың атҡаҙанған артисы Фәдис Ғәниев, Башҡортостан Республикаһының халыҡ артистары Әнисә Яхина, Хәлит Фәтихов, Әлфиә Юлсурина, Ишморат Илбәков, Ғәли Алтынбаев, Радик Вәлмөхәмәтов, Артур Туҡтағоловтарҙы тамашасы ихлас сәләмләне. Филармония үçешенә ҙур өлөш индергән ветеран артистарҙың сығышы залда ултырған һәр кемде тулҡынландырҙы, хисләндерҙе.

Башҡорт дәүләт филармонияһы бөгөн ҡурай сәскәһенең ете тажы кеүек күп тармаҡлы, киң үçешкән, бай мираçлы мәҙәниәт усағына әүерелгән, төрлө жанрҙарҙа, күп йүнәлештәрҙә ижад иткән ҡеүәтле сәнғәт ойошмаһы! Республиканың төп филармонияһында эстрада һәм академик музыка, фольклор һәм этник музыка, джаз жанрҙары киң үçеш алды. Филармонияның ике күркәм залында Әҙәби-музыкаль лекторий, Хор капеллаһы, Халыҡ инструменттарының милли оркестры, Эстрада-джаз оркестры, Камералы һәм Тынлы оркестрҙар, ете Эстрада төркөмө илһамланып ижад итә. Шулай итеп, Хөсәйен Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы 85-се ижад миҙгелен асты. Юбилей миҙгелендә көтөлмәгән асыштар, яңынан-яңы ижад үрҙәре, сәнғәт ҡаҙаныштары юлдаш булһын!

**Әлфиә ҒИМАҘИЕВА.**

УЙМАҠ ХИКӘЙӘЛӘР

*Хәйҙәр ТАПАҠОВ*

## МИҢӘ ИНЕРГӘ ЯРАЙМЫ ИКӘН?

Өфөнән генә түгел, сит өлкәләрҙән килгән билдәле ғалимдар ҡатнашлығында Сибайҙа фәнни-ғәмәли конференция үткәрҙеләр. Яҙыусыларҙы ла саҡырҙылар. Беҙ пленар өлөштә генә ҡатнаштыҡ та төштән һуң уҡыу йорттарында, китапханаларҙа әҙәбиәт һөйөүселәр менән осраштыҡ. Ғайса Хөсәйенов иртәнсәк эстәлекле доклад һөйләне, төштән һуң ҡәләмдәштәр менән йөрөнө.

Кискеһен бер уҡыу йортоноң ашханаһында ойошторолған ҙур табынға саҡырҙылар. Мин барғанда ни сәбәптәндер һуңлап килгән Ғайса ағай ишек ауыҙында тора ине. Мине абайлағас, эс яҡҡа ымланы:

- Ошонда саҡырғандар ине шикелле, миңә лә инергә ярайҙыр ул?

- Ярамаған ҡайҙа, урынығыҙ түрҙә Ғайса Батыргәрәевич!

Был мәлдә иркен залда бер төркөм йәш ғалимдар табын түренән урын алып, кемуҙарҙан маҡтанышалар ине. Беҙҙе абайламанылар ҙа шикелле, әллә күрһәләр ҙә күрмәмешкә һалыштылар. Ишек төбөнән урын алдым. Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, ғалим, филология фәндәре докторы, академик, профессор Ғайса Хөсәйенов башҡалар менән тыйнаҡ ҡына баш ҡағып иçәнләшкәс, эргәмә килеп ултырҙы...

## ҺҮҘ ҠӘҘЕРЕ

Зәйни ағай туң кеше. Уның һөрелеге шунан ғибәрәт, һүҙҙе бер тапҡыр ғына әйтә һәм башҡаса ҡабатламай. Аңлаһаң аңла, төшөнмәйһең икән, унығы инде һинең эш.

Шул Туң Зәйни менән Әсмә еңгәнең сөкөрҙәшеүҙәрен сала-сарпы ишетеп ҡалдым:

- Зәйни, һин мине яратаһыңмы у? - Ҡатындың иркәләнергә, һырпаланырға иçәбелер.

- Теге саҡ, өйләнгән йылы Һаҡмар ярында әйткәйнем дә баһа.

- Нишләптер хәтерләмәйемсе...

- Ул көндө боҙ ҡуҙғалғайны, йәнә һеҙҙең ала һыйырығыҙ быҙаулағайны. Һеңдергәнсе төшөндөргәйнем дә баһа!

- Эйе шу, әйткәйнең шу... - Еңгә үткәндәрҙе хәтерендә яңыртып, аңшая биреп тора ла өçтәп ҡуя. - Шул биш былтырғы хәбәрҙе яңыртып әйтеп булмаймы тағы?

- Кәнкритне бумай! - Ир өҙә һуға. - Һүҙҙе ике тапҡыр ҡабатлаһаң, ҡәҙере китә уның, төçө уңа.

Беҙҙең йорттоң күрше подъезында бер ҡыҙ йәшәне. Был ҡуçтарланып, биҙәнеп-яһанып, Барби-ҡурсаҡ ише болконға сығып баçһа, аçтан егете тамаҡ ярып һөрәнләй башлаған була:

- Ты единственная моя! Люблю! Слышишь - люблю, люблю! - Көн һайын бер балыҡ башын сәйнәй, ялҡытып, күңелде болғандырып бөтөрҙө. Беҙҙе шулайтып йонсота, теңкәгә тейә торғас, ниһайәт, өйләнделәр былар... Һәм ике ай үттеме-юҡмы, айырылыштылар.

Әйтелгән һүҙҙе ҡәҙерләй белергә кәрәктер, уны елгә елгәрергә ярамайҙыр, ҡыуанғанда ла сит-яттарға күрһәтмәй, эстән ҡыуаныуың хәйерле, шатлығыңа күҙ тейеүе бар.

Ә Зәйни менән Әсмә еңгәгә килгәндә, яңыраҡ алтын туйҙарын үткәрҙеләр. Ярты быуат элек бер тапҡыр ғына әйтелгән алтын һүҙ йәшәтә уларҙы, донъяларын нурлы, ҡотло итә!

✓ *Яңы йылға ике ай ҡалғас, ҡатын-ҡыҙҙар ябыға башлай. Шаярыу ҡатыш булһа ла, был фәнни яҡтан дәлилләнгән. Гүзәл заттар араһында билдәле бер диеталар ҙа бар.*



ИНТЕРНЕТТАН



# БАЛЛЫ ДАУА

■ Төнөн уянып, йоҡлай алмай ятыусыларҙың күбеһе гликоген дифициты менән яфалана икән. Ғалимдар төндә йоҡлай алмаусы 700 кеше менән тәжрибә үткәреп ҡараған. Өс ай дауамында улар йоҡлар алдынан 1 ҡалаҡ бал ашай. Һөҙөмтәлә, 650 кеше йоҡоһо яҡшырыуы тураһында белдергән. Ҡалған 50 кеше һимереүҙән ҡурҡып, бал ашамаған. Белгестәр асыҡлауынса, төндә уяныу гликоген дефициты менән бәйле булыуы ихтимал. Гликоген - бауырҙа глюкозанан синтезланған ҡатмалы углевод. Ул организмдан адреналин менән кортизолды сығарыуға булышлыҡ итә. Ә балда гликоген күп. Шулай уҡ тәүлегенә 1 ҡалаҡ бал ашау юғары ҡан баҫымы менән яфаланыусыларға файҙалы, сөнки ул ҡан баҫымын түбәнәйтә. Бал ҡанды шлак һәм кәрәкмәгән майҙан да таҙарта.

■ Нейробиолог Эмили Макдональд көн дауамында баш мейеһенә һөҙөмтәле эшләргә ҡамасаулаған, уны иртә ҡартайыуға этәргән 3 зарарлы ғәҙәтте атаған. Уның беренсеһе - уянғас та телефонға тотоноу. Организм уянғас та, баш мейеһе альфа-тулҡындар бүлеп сығара башлай, улар кешене тыныслыҡҡа, уяулыҡҡа, ниндәйҙер белем, яңылыҡтар үҙләштереүгә көйләй башлай. Шуға ла был мәлдә кеше һәр мәғлүмәтте йөрәгенә ныҡ яҡын ҡабул итә, шуға ла яңылыҡтарҙы, социаль селтәрҙәрҙәге хәбәрҙәрҙе уҡырға тырышмағыҙ. "Был дофамин кимәлен түбәнәйтә, беҙ шуға ла телефонды ҡабат-ҡабат тикшерергә тотонабыҙ", ти Макдональд. Иртән шулай уҡ үҙеңде әрләргә, башҡалар менән сағыштырырға ярамай. Уяныуҙың тәүге минуттарында уҡ барлыҡҡа килгән негатив уйҙар шунда уҡ ысынбарлыҡ итеп ҡабул ителә һәм көн дауамында иҫкә төшөп тороп, кәйефте боҙоуы бар. Өсөнсө ғәҙәт иһә дөрөҫ туҡланмау. Ул баш мейеһенең иртә ҡартайыуына килтерә.

■ Яңы йылға ике ай ҡалғас, ҡатын-ҡыҙҙар ябыға башлай. Шаярыу ҡатыш булһа ла, был фәнни яҡтан дәлилләнгән. Гүзәл заттар араһында билдәле бер диеталар ҙа бар. Табип-терапевт, нутрициолог Ирина Никулина билдәләүенсә, күпселек аҡһым ашап ҡына кәүҙәһен тәртипкә килтерергә иҫәп тота. Әммә организмға аҡһымдан башҡа, углеводтар кәрәк, ул булмаһа, файҙалы матдәләргә ҡытлыҡ тыуасаҡ. Ә аҡһымдың үҙ нормаһы бар: 1 кг ауырлыҡҡа - 1 гр, бынан артыҡ аҡһым организмға кәрәкмәй. Бик һирәк осраҡта спортсыларға ғына 2 гр аҡһым рөхсәт ителә. Шуға ла тик аҡһымдан торған диета һеҙҙе ашҡаҙан-эсәк тракты менән проблемаларға, тиҙ арыуға, баш ауыртыуына килтерәсәк. Тағы бер "мода"лы диета бар, имеш. "Йоҡосо һылыуҡай" тип атала. Уның асылы шунда - асығыу тойғоһо йонсотмаһын өсөн йоҡларға кәрәк. Тик табип фекеренсә, ҡарынында бүреләр олоғанда йоҡлап китеүе ауыр шул. Шуға ла был ысулды һайлаусылар йоҡо дарыуҙары ҡуллана башлай икән. Ә йоҡо режимы боҙолоуы организм һәм нервы системаһы өсөн өҫтәмә ауырлыҡ. Ябығыу өсөн нимә эшләргә кәрәк һуң? Ашауҙан тыйылмаҫҡа, ә зарарлы ризыҡты файҙалыһына алыштырырға, ти белгестәр. Стрессһыҙ диета тотоу өсөн уны аҡыл менән һайларға кәрәк, шул саҡта ул матдәләр алышыныуҙы ла шәбәйтәсәк, сәләмәтлекте һәм кәйефте лә яҡшыртасаҡ.

*ҒАИЛӘМ - ҠӘЛҒӘМ*

**Уларҙың икеһенә айырым-айырым бер үк һорауҙы бирҙем: "Хәләл ефетең менән бәхетлеһеңме?" "Мин, ҡустым, Фәнүзәнән башҡа ҡатын-ҡыҙ менән тормош ҡороуҙы хатта күҙ алдына ла килтерә алмаҫ инем, - тип яуап бирҙе ҡырҡ йылдан ашыу бергә ғүмер иткән ҡатыны хаҡында Сәлмән ағай. - Хазина бит ул минең өсөн. Алтын-көмөшөм. Аллаһы Тәғәләнең биргәненә шөкөр!" "Үҫмер сағымдан уҡ хыялымдағы "Алтын аттағы принцымды" тап ана шул Сәлмән ағайың һымаҡ итеп күҙ алдына килтерә инем, - тине Фәнүзә еңгә лә. - Йәшереп-батырып, оялып-уңайһыҙланып тора торған ваҡыттар үтеп киткән инде, тураһын әйткәнгә аптырама, ҡәйнеш..."**

# ТАТЫУ ҒАИЛӘЛӘ ҺӘР САҠ ЭШТӘР КӨЙЛӨ

Йылайыр районының иң гүзәл еренд урынлашҡан, эшһөйәр, матур кешеләр йәшәгән Иҫҡужа ауылында ғүмер итә улар. Бөтә йәш ваҡытын, бар көсөн тиерлек балаларға белем биреүгә бағышлаған Фәнүзә һәм Сәлмән Һөйөндөковтар хаҡында һүҙем. Ни өсөн мәҡәләмде уларҙың үҙ-ара мөнәсәбәтенән башлап алып китеүем һәр кемгә асыҡтыр: өйҙә һәм эштә лә бер-береһен аңлаған, хөрмәт иткән кешеләрҙең генә тормошон матур тип әйтергә була тип һанайым. Шундай ғаилә мөхитендә балалар тәрбиәләүҙе ҡайсаҡ яҡшы эшкәртелеп, ашлама менән туҡландырылған, ваҡытында һыу менән һуғарылып торған сәскә түтәле менән сағыштырам.



Сәлмән ағай үҙе ошо ауылда тыуып үҫкән. Атаһы Фазылйән хәҙрәт - Бөйөк Ватан һуғышы ветераны, ауылдың иң һуңғы указлы муллаһы Шаһишәриф хәҙрәттең (1933 йыл вафат) улы булараҡ, төплө дини белемле, совет осоро сәйәсәтенең атеистик шауҡымына ла бирешмәгән кеше ине. Ауылдағы барлыҡ дини йолаларҙы атҡарыу, ауылдаштарын иманға өндәү уның иңендә булды. Ҡөрьән аяттары ярҙамында кешеләрҙе дауалау ысулдарын да белде. Сабира инәй менән һигеҙ бала тәрбиәләп үҫтергән, барыһына ла юғары белем биреүгә өлгәшкән алдынғы ҡарашлы был олатай Аҡмулланың, Бабичтың биһисап шиғырҙарын яттан белә ине. Бына ошо ғаиләлә алтынсы бала булып донъяға килгән Сәлмән ағай. Бәләкәй саҡтан мин уны яҡшы беләм. Уға уҡытыусылыҡ һәләте тыумыштан һалынғандыр тип тә уйлайым. Кистәрен беҙ, бәләкәйерәк малайҙар, уның тирәһендә йыйылышып алабыҙ ҙа, матур итеп һөйләгән әкиәттәрен кинофильм ҡараған һымаҡ күҙ алдына килтереп, йотлоғоп тыңлай инек...

Ауылда башланғыс мәктәпте тамамлағандан һуң күрше Ҡашҡар, артабан Юлдыбай мәктәптәрендә уҡый, урта белем алып сыҡҡас, Совет Армияһы сафына саҡырыла. Курил утрауҙарының береһендә ил алдындағы бурысын үтәп ҡайтҡандан һуң, Башҡортостан педагогия институтының химия-биология факультетына уҡырға инә. Уҡыуҙы уңышлы тамамлап, ҡулына диплом алғас, 1981 йылда Стәрлетамаҡ ҡалаһы мәктәптәренең береһенә эшкә тәғәйенләнә. Тап ана шунда осрата ла инде ул үҙенең "хазинаһын". Педагогия институтының урыҫ һәм башҡорт теле бүлегендә уҡып йөрөгән мөләйем һылыу йөҙлө, зифа буйлы Әлшәй ҡыҙы тәү күреүҙә үк егерме биш йәшлек егеттең һушын ала. Танышып алғас та, әллә ни оҙаҡ уйланып тормаҫтан, Сәлмән ағай уға өйләнешергә тәҡдим яһай. Әле уҡыуын тамамларға алда байтаҡ ҡына йылдар булыуға ҡарамай, баштан уҡ ышаныслы булып тойолған был егеткә Фәнүзә ризалығын бирә. Улдары ошо уңған киленде күрһәтергә өйөнә алып ҡайтҡас, Фазылйән олатай менән Сабира инәйҙең шатлығының иге-сиге булмай...

Уҡыуын тамамлағас, Фәнүзә Хәйбулла районының Воздвиженка ауыл мәктәбенә уҡытырға ебәрелә, ә Сәлмән ағайҙы шул уҡ мәктәптең директоры итеп тәғәйенләйҙәр. Ул етәксе булып эшләгән дәүерҙә күп кенә күрһәткестәр буйынса мәктәп алдынғылар рәтенә сыға. Ең һыҙғанып, арыу-талыуҙы белмәй, алты йылдан ашыу эшләп, ауыл халҡы алдында ҙур ғына абруй яулаған был мәктәп етәксеһенең хеҙмәте Башҡортостан мәғариф министрлығы тарафынан юғары баһалана. Тынғыһыҙ педагог, һәләтле ойоштороусы булып танылып өлгөргән Сәлмән Фазылйән улына "Отличник образования Российской Федерации" тигән маҡтаулы исем бирелә.

Сәлмән ағайҙың 1990 йыл аҙағында атаһы - Фазылйән олатай вафат булғас, олоғайған әсәһен, Сабира инәйҙе бағырға, шул уҡ ваҡытта, атай нигеҙен һаҡлау ниәте менән, инде өс бала үҫтерә башлаған был татыу ғаилә Иҫҡужаға - тыуған ауылына күсеп ҡайта. Ул саҡта Иҫҡужа мәктәбе 5-6 йыл тирәһе ябылып тороп, балалар 2 саҡрымда ятҡан күрше Ҡашҡар ауылы мәктәбенә йөрөп уҡыған була. Башта шул мәктәптә уҡытыу эшенә тотона Сәлмән ағай, әммә киләһе йылына уҡ район хакимиәте аша юллап, тыуған ауылының оҙаҡ эшләмәй торған башланғыс мәктәбен ҡабаттан асыуға өлгәшә. Фәнүзә менән икәүләп, ауыл балаларын уҡыта башлайҙар. Тәүҙә тик туғыҙ бала йөрөгән был мәктәпкә киләһе йылына инде егерме ете уҡыусы уҡырға килә. Ауылда мәктәп йәшендәге балалар артабан да күбәйә бара. Тағы бер йылдан, эшкә дәрте ташып торған был ағайыбыҙ ауылда өр-яңы мәктәп һәм балалар баҡсаһы төҙөтөү мәсьәләһен хәл итергә тотона. Ауыл халҡын йыйып, совхоз етәкселәре алдында ауылға мәктәп кәрәклеген иҫбатлай, шул мәсьәләне кисекмәҫтән хәл итеү зарурлығы хаҡындағы һорауҙы күтәрә. Уның был тәҡдиме ауылдаштары һәм район хакимиәте тарафынан хуплау таба: 1993 йылда нигеҙ һалынған был бина инде өс-дүрт йылдан әҙер ҙә була. Яңы мәктәпте уҡыу кәрәк-яраҡтары менән заманса йыһазландырғас, Фәнүзә шунда балалар уҡыта башлай. Ә Сәлмән ағайҙы (урыҫта "Большому кораблю - болшое плавание" тиҙәр бит әле) күрше Ҡашҡар ауылының мәктәбенә директор итеп ҡуялар. Был мәктәп совхоз үҙәге Юлдыбай урта мәктәбенең филиалы булып киткәндән һуң да уның етәксеһе булып ҡала. 2013 йылда хаҡлы ялға сыға. Шул дәүерҙә Иҫҡужа башланғыс мәктәбендә ал-ял белмәй эшләгән Фәнүзә Нурмөхәммәт ҡыҙы ла ауылдаштарының тәрән ихтирамын яулап ала. Ошо остаздар ҡулынан үткән меңәрләгән уҡыусы бөгөнгө көндә киң илебеҙҙең төрлө тармаҡтарында халыҡҡа хеҙмәт итә.

Һәр саҡ ауыл хәленә битараф булмаған, ауылдағы эштәр менән ҡыҙыҡһынып барған Сәлмән Фазылйән улы, балалар уҡытыу эшенән тыш, оҙаҡ йылдар ауыл старостаһы вазифаһын башҡара. Туҡһанынсы йылдарҙа уның инициативаһы буйынса (утыҙынсы йылдар ябылған мәсет нигеҙендә) ҡабаттан матур иман йорто ла төҙөлә. Һәр йомала мосолмандар намаҙ уҡырға йыйылған был мәхәлләлә бөгөнгө көндә Сәлмәндең бер туған ағаһы - Ҡәһәрмән имам булып тора. Бынан тыш, Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарына обелиск ҡуйыуға ҙур тырышлыҡ һала Сәлмән ағай. "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!" байрамын ойоштороп, башлап ебәреүсе лә ул.

Бала саҡтан спорт менән дуҫ, бер ҡасан да тик ятырға яратмай ағайыбыҙ, бөгөнгәсә үҙен физик яҡтан яҡшы баға, һәр саҡ хәрәкәттә. "Хәрәкәттә - бәрәкәт" тип әйтергә ярата ул. Инде етенсе тиҫтәһен тултырып барған был ағайҙың ҡул салғыһы менән бесән сапҡанын ситтән ҡарап торһаң - уйнап ҡына йөрөгән һымаҡ тойола. "Уйнап" тигәндән, Сәлмән ағайҙың ҡайсаҡ еңел көйгә бейергә төшөп киткәнен күрһәгеҙ: бәғзе йәш егеттәрең ары торһон! Ауылдың тағы бер ҡыҙыҡлы үҙенсәлеге: унда "Айыҡ ауыл" хәрәкәтенә ярашлы, олпат йәштәге ир-егеттәрҙән торған хоккей командаһы ойошторолған. Ҡыш еткәс тә, бына шул командала әүҙем ҡатнаша был уҙаман. Боронғо ҡартатайҙар нигеҙенә ҙур итеп йорт та төҙөп ултырта. Шулай уҡ, һарай тултырып мал аҫрап, ҡош-ҡорт үрсетеүгә, йәшелсә үҫтереүгә лә иренмәй. Егәрле хужабикәһеҙ, әлбиттә, был турала хыялланыу ҙа ярамай. Фәнүзә еңгә әҙерләгән май, ҡорот, эремсек һымаҡ һәр төрлө һөт ризыҡтары, ҡышҡылыҡҡа eләк-емештән кәнсирләнгән тәм-томо "теленде йоторлоҡ" була.

Ошо өлгөлө ғаиләлә үҫкән балалар хаҡында айырым әйтеп китеү кәрәк. Бер ул, ике ҡыҙҙың һәммәһе инде урта йәштәргә яҡынлашҡан, республикабыҙҙың төрлө район, ҡалаларында ғаилә ҡороп, үҙҙәре балалар үҫтерә. Альбина һәм Руслан юрист, ә Эльвира уҡытыусы һөнәрен һайлаған. Сәлмән ағай менән Фәнүзә еңгә балаларының хәләл ефеттәренә лә - үҙҙәре кеүек булдыҡлы, аҡыллы, бынамын тигән кейәүҙәре һәм киленено һөйөнөп бөтә алмай. Матур итеп туған телендә һөйләшкән өс ейән һәм дүрт ейәнсәр йәй етеү менән йәмле Иҫҡужа ауылына, һағынып көтөп торған ҡартатай һәм ҡәртәсәйгә ҡунаҡҡа ҡайтып төшә.

Бына шундай, күптәргә илһөйәрлек, тыуған ергә бирелгәнлек өлгөһө булырлыҡ гүзәл бер ғаилә хаҡында булды һүҙем.

**Хәлил ТӨХФӘТУЛЛА.**

✓ *Махсус рәүештә, аҙаҡтан унан сығыу процесынан ҡәнәғәтлек алыу өсөн, үҙегеҙ ҡаҙған соҡорға төшәһегеҙ. Мин хаҡлы түгелме? Улайһа, ни өсөн һәр ай һайын банкротлыҡ сигендә тораһығыҙ?*



СӘЛӘМӘТ БУЛ!

# КҮК ЙӨТӘЛ

**Күк йөтәл, быума йөтәл тип йөрөтә уны халыҡ. Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы мәғлүмәттәренә ярашлы, донъяла йыл һайын 500-600 бала тап ошо күк йөтәлдән үлә. Быума йөтәл (коклюш) - бактериаль сир, ул кешенән кешегә күсә, тик бының өсөн ныҡ яҡын контакт булырға, мәҫәлән, балалар бергә уйнарға, аралашырға тейеш. Йәғни, асыҡ һауала бактерия йәшәй алмай, шуға ла ауырыған кешенең эргәһенән үтеп китеп кенә уны йоҡтороп булмай.**



Сирҙең иң ҡурҡыныс яғы шунда: быума йөтәл башланғансы уҡ кеше уны башҡаларға йоҡтора башлай. Унан һуң тағы ла 2-3 аҙна йоғошло иҫәпләнә. Күк йөтәл бигерәк тә 2 йәшкә тиклемге балалар өсөн ҡурҡыныс. Шуға ла баланың кем менән уйнауына иғтибар итергә, йөткереүсе балалар менән аралашыуға юл ҡуймаҫҡа кәрәк.

Иҫеме үк әйтеп тороуынса, сир ваҡытында бала быуылып йөткерә. Уны 100 көнлөк йөтәл тип тә атайҙар, сөнки оҙаҡ үтә. Инкубацион осоро 4 көндән 2 аҙнаға тиклем дауам итә. Ошо ваҡыт эсендә бактерия тын юлдарында үрсей - енелсә тымау башлана, бала һирәк кенә йөткереп ала. Шуға ла ата-әсәләр борсолмай ҙа, уны дауаламай ҙа тиерлек. Тик йөткереү башта уҡ нисек ҡоро булған, шулай ҡала, йомшармай. Әгәр ҙә ауырыу башланып ҡына торғанда ниндәйҙер шик бар икән, мәҫәлән, сирле кеше менән аралашҡанһығыҙ, балалар баҡсаһында балалар ауырыған, шунда уҡ анализ биреп, дауаланыу яҡшы буласаҡ. Тик күпселек осраҡта күк йөтәл һуң беленә.

Быума йөтәл шуныһы менән айырылып тора - бала тын алырға ла өлгөрмәй быуылып йөткерә. Ҡапыл тын алып ебәргәндә лә тын һыҙғырып, хырылдап тора. Ул реприза тип атала. Ҡоро көслө йөтәл һәм ошо реприза булыуынан сирҙе танырға була. Ауыр осраҡтарҙа йөтәл өйәнәге 4-әр минутҡа етә. Баланың бите ҡыҙара, ҡайһы саҡта тире һәм күҙ капиллярҙарында ҡан һауыуҙар була. Шулай уҡ йөтәл ваҡытында баланың телен сығарыуы, күҙенән йәш ағыуы ихтимал. Ййлап йөтәл өйәнәктәре кәмей, ул ябай йөтәлгә әйләнә һәм тағы ла 2 аҙна дауам итә.

Бер йәшкә тиклем балаларҙа ул ныҡ ҡурҡыныс үтә, бала бер нисә сәғәт эсендә тын ала алмай башлауы бар. Шуға ла мотлаҡ стационарҙа дауаланыу кәрәк. Йәш балала йөтәл булмаҫҡа ла мөмкин, ул ныҡ итеп ҡыҫҡырып илағандан һуң бериккене йөткерә һәм тын алмай башлай, йөҙө күгәрә. Был осраҡта уның тел тамырына баҫып, ҡоҫторорға кәрәк. Ҡоҫоу үҙҙгән эшләтеп ебәреү тын алышты яйға һаласаҡ. Файҙа булмаһа, яһалма тын алдырып, саф һауаға алып сығырға һәм тиҙ ярҙамға шылтыратырға.

Күк йөтәл тураһында тағы ла нимәне мотлаҡ белергә кәрәк?

Микробты нисек юҡҡа сығарыу, ниндәй дарыуҙар эсеү - быныһы табиптың бурысы. Шуға ла ҙаллы дауаланыуҙан һаҡланығыҙ. Бала күк йөтәл менән ауырыған икән, уның оҙаҡ йөткерәсәген дә аңлағыҙ. Әүҙем уйындар, йүгереү, һикереү йөткертәсәк, шуға ла тыныслыҡ һаҡлау мөһим. Ризыкты оҙаҡ итеп сәйнәгәндән дә яңы өйәнәк башланыуы ихтимал, аҙлап, әммә йышыраҡ ашау ҡулайыраҡ. Бүлмәлә саф һауа булһын. Быума йөтәл өйҙә яҡшы дауалана, шулай ҙа уның пневмония, бронхитҡа әйләнеп китеүенән һаҡ булырға кәрәк. Сирләүҙең 2-3-сө аҙнаһына температура күтәрелһә, хәл яҡшырғандан һуң йөткереү көсәйеп китһә, табипҡа мөрәжәғәт итергә. Вакцинациянан баш тартмаҫҡа ла кәңәш ителә.

ЙӘШЕЛ ДАРЫУХАНА

# КӨҘГӨ МӘШӘҠӘТТӘР

**Көҙгә урман ялангасланып, үтә күренеп ҡалған. Шулай ҙа ҡалын ҡар яуып, ҡаты ҡышҡы һыуыҡтар төшкәнгә тиклем, уның шифалы байлыҡтарын алып өлгөрөп ҡалырға мөмкин әле. Был осор ҡайһы бер ағас ҡайырыларын, йәш ботаҡтарын йыйыу өсөн ҡулай.**

### Уҫаҡ

Уҫаҡ ҡайырыһын ҡулайлы ҡорамал менән ботаҡтарҙан киҫәк-киҫәк итеп һыҙырып алып ҡайтырға һәм махсус киптергестәрҙә 50 градустан да артмаған эҫелектә киптереп алырға кәрәк. Уҫаҡ ҡайырыһын баш ауырыуын, нервылар ҡуҙғыуын, невралгия, быуындар һыҙлауын, вируслы ауырыуҙарҙы һәм бөүеленес системаһы ауырыуҙарын дауалағанда ҡулланалар.

*Төнәтмәне әҙерләү өсөн 1 балғалаҡ уҫаҡ ҡайырыһына 250 мл һыу ҡойол, ҡайнатып сығарырға, шунан 30 минут һыу быуында тоторға. Артабан термосҡа ҡойоп алырға һәм 1 сәғәт төнәтергә. Цистит булғанда һәр 2 сәғәт һайын 1-әр ҡалаҡ эсергә.*

### Балан

Баландың емеше һәм япрағы файҙалы булыуҙан тыш, ҡайырыһы ла халыҡ дауаһында бик йыш ҡулланыла. Япраҡтарын ҡойоп бөткәс, үренделәренең ҡайырыһын һыҙырып алырға була, йәки йәки йәш үренделәрҙе ҡайырыһы менән бергә ҡышҡылыҡҡа әҙерләргә лә ярай. Махсус ҡайсы ярҙамында бер йыллыҡ үренделәрен ҡырҡып алырға һәм ваҡлап киптерергә. Был әҙерләмәне термоста бешереп, төнәтмә әҙерләйҙәр. Балан ҡайырыһының микробтарға ҡаршы, антисептик һәм шешенеүҙәрҙе баҫа торған үҙенсәлектәре бар. Унан әҙерләнгән төнәтмә артериаль ҡан баҫымын тигеҙләргә, насар холестерин кимәлен кәметергә, йоҡоно яҡшыртырға ярҙам итә.

*Төнәтмәне әҙерләү өсөн 1 балғалаҡ балан ҡайырыһын термосҡа һалып, өҫтөнә 150 мл ҡайнар һыу ҡойорға, 1 сәғәт төнәтеп һөҙөргә. Ҡан баҫымын яҡшыртыу өсөн көнөнә 1-2 тапҡыр 150-шәр мл эсергә.*

### Ҡара мәрүәр

Ҡара мәрүәрҙең (бузина черная) йәш үренделәрен 20 см тирәһе оҙонлоҡта ҡырҡып, ҡайырын һыҙырып алалар. Әҙерләмәне 50 градуста киптерергә. Уны йөрәк һәм бөйөр ауырыуҙары сәбәпле шешенгәндә, эс йомшарта һәм бөүел ҡыуҙырта торған антисептик сара булараҡ та, киҫкен респиратор вируслы инфекция, бронхит, йөтәл, атеросклероз, шәкәр ауырыуы, аритмия, йоҡоһоҙлоҡ, талсығыуҙан да ҡулланалар.

*Төнәтмәне әҙерләү өсөн 1 балғалаҡ ҡара мәрүәр ҡайырыһын термосҡа һалып, 150 мл ҡайнар һыу ҡойорға кәрәк. 1 сәғәт төнәтергә. Стресс кисергәндә һәм талсыҡҡанда көнөнә 3 тапҡыр 50-шәл мл эсергә.*

### Эт муйылы

Япраҡтары ҡойолоп бөткәс, эт муйылының (крушина ломкая) ҡайырыһын әҙерләргә була. Һабаҡтарын махсус ҡайсы менән ҡырҡып алып, үткер бысаҡ ярҙамында һабаҡты буйына ярып, ҡайырыһын һыҙырыуы уңайлы. Шунан 50 градуста киптереп, картон ҡаптарҙа һаҡларға, әммә 2 йылдан артыҡ түгел. Эт муйылының киптерелмәгән ботаҡтары һәм ҡайырыһы ағыулы иҫәпләнә, шуға уны әҙерләгәндә бирсәткә кейеп эшләргә кәрәк. Ул эсәктәрҙең эшен яҡшырта, оҙайлы эс ҡатыуынан файҙалы.

*Эс йомшарта торған төнәтмәне әҙерләү өсөн 1 балғалаҡ эт муйылы онтағын термосҡа һалып, 150 мл эҫе һыу ҡойорға, 2 сәғәт төнәтеп һөҙөргә. Төнәтмәне йоҡларға ятыр саҡта, оло ярау яһарҙан сама менән 8 сәғәт алда, эсергә.*

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҺОРАҒЫҘ - АЛЫРҺЫҒЫҘ

### Ай һуңындағы хәүеф

Аҡсаға мөнәсәбәттең уңышһыҙлыҡҡа дусар ителгән миҫалын ҡарайыҡ.

Ай һуңы етә. Яңы айҙың беренсе көнө - ҡуртым һәм страховка, кредит карточкалары буйынса минималь түләүҙәр, кредит буйынса проценттар, электр энергияһы һәм телефон өсөн түләүҙәр көнө башланғанын беләһегеҙ. Проблема шунда - иҫәп-хисап эшләргә булған ғына аҡсағыҙ етмәй. Һеҙ борсола башлайһығыҙ, ошо мәсьәлә буйынса коллегағыҙ менән бәхәсләшәһегеҙ. Был проблеманы нисек хәл итергә уйлайһығыҙ?

Ҡапҡанға эләккәнһегеҙ һәм был хәл-тороошоғоҙ үҙегеҙгә оҡшай. Һеҙгә нисек осон-осҡа ялғау тураһында баш ватыу һәм һуңынан: "Эйе! Мин тағы ла еңеп сыҡтым!" - тип ғорурлыҡ менән әйтеү оҡшай. Үҙегеҙҙе ауыр хәлгә ҡуйып, һуңынан уны ҙур ауырлыҡ менән йығып сығыу оҡшай. Һеҙ бар көсөгөҙ менән ҡурҡыу хисе кисерергә теләйһегеҙ. Һеҙгә тормошоғоҙға сағыулыҡ биргән адреналин етмәй. Ҡыҫҡаһы, махсус рәүештә, аҙаҡтан унан сығыу процесынан ҡәнәғәтлек алыу өсөн, үҙегеҙ ҡаҙған соҡорға төшәһегеҙ. Мин хаҡлы түгелме? Улайһа, ни өсөн һәр ай һайын банкротлыҡ сигендә тораһығыҙ? Был уйындан ялҡһағыҙ, тормошоғоҙҙағы проблемалар ҙа юҡҡа сығасаҡ. Шулай булғас, энергияғыҙҙы һәм энтузиазмығыҙҙы башҡа мәсьәләләрҙе хәл итеүгә йүнәлтеү яҡшыраҡ түгелме ни? Мәҫәлән, 100 мең аҡса эшләргә. Һеҙҙеңсә, был мөмкин түгелме? Дистанциянан старт бирелгәнгә тиклем үк сығырға тырышмағыҙ. Һәр хәлдә, үҙ көсөгөҙгә һәм мөмкинлектәрегеҙгә ышанырға мөмкинлек бирегеҙ. Бәлки, был осраҡта был мөмкин дә түгелдер әммә мөмкин булһа нимә эшләр инегеҙ? Әйҙәгеҙ, "Әгәр ҙә..." тигән уйын уйнап һәм проблеманы хәл итеү юлдарын эҙләп ҡарайыҡ.

Үҙегеҙгә "хәл итеп булмаҫлыҡ" хәл-торош уйлағыҙ һәм унан сығыу юлын эҙләгеҙ. Һығымта яһарға ашыҡмағыҙ: ял итегеҙ, саф һауала йөрөгөҙ һәм төпкө аңығыҙҙың ниндәй юлдар тәҡдим итеүен тыңлағыҙ. Мәсьәлә ни тиклем ҡатмарлы, яуап шул тиклем аяуһыҙыраҡ буласаҡ.

### Бәләкәй һауыттағы шампунь

Хәүефһеҙлегебеҙҙе хәстәрләү көндәлек тормошобоҙҙа шул тиклем тамыр йәйгән, уның нисек беҙҙе ҡурҡыу хисе менән тултырыуына ла иғтибар итмәйбеҙ.

Ябай миҫал: һуңғы тапҡыр ҡасан ҡунаҡханала йәшәгәнегеҙҙе һәм ундағы бәләкәй генә һауыттарҙағы шампундәр, лосьондар, һабындарҙы өйөгөҙгә алып ҡайтыр өсөн сумкағыҙға һалғанығыҙҙы иҫегеҙгә төшөрөгөҙ! Моғайын, ваннағыҙҙа, ядро һуғышы башланып, тап шул ваҡытта һеҙгә сәс йыуып киптерергә кәрәк булған осраҡ өсөн ундай запастар күп йыйылғандыр. Ҡайҙан беләмме? Әлеге ваҡытта мин уңыштың универсаль ҡанундарын өйрәнһәм дә, миңә лә бар кешегә хас булған сифаттар ят булманы. Минең дә өйөмдә әле лә бәләкәй генә һауыттарҙа шампундәр һәм һабын киҫәктәре ята.

**Пьер МОРАНСИ.**



## 13 НОЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 0.05, 0.55, 1.40, 2.25, 3.05, 3.25, 4.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.50, 14.15, 19.00, 22.40 Информационный канал. [16+]
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Мосгаз. Последнее дело Черкасова". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Наши. [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Екатерина. Фавориты". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.05 Т/с "Тайны следствия-8". [16+]
2.45, 3.40 Т/с "Морозова". [16+]
4.35 Перерыв в вещании.

### БСТ
7.00 "Сәләм".
10.00 "Башҡорт йыры-2023". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]
10.45 Ҡурай даны. [12+]
11.00 Новости недели (на рус.яз). [12+]
11.45, 13.45, 16.45, 17.45, 20.15, 4.00, 6.15 Интервью. [12+]
12.00 Преображение. [12+]
12.30 Счастливый час. [12+]
13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).
14.00 Бәхетнамә.
15.00 Гора новостей. [6+]
15.15 "Этно-краса". [12+]
15.30 Преград. Net. [6+]
15.45 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]
16.00, 3.15 Башкорттар. [6+]
16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]
18.00 Специальный репортаж. [12+]
18.15, 3.45 Остаз. [12+]
19.00, 4.15, 5.15 Телецентр. [12+]
20.00 Сәнгелдәк. [6+]
20.30 Телецентр.
22.00 Тайм-аут. [12+]
23.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]
23.30 Автограф. [12+]
0.00 Бәхетнамә. [12+]
1.00 Новости (на баш. яз). [12+]
1.30 "Прости меня". [12+]

## 14 НОЯБРЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Мосгаз. Последнее дело Черкасова". [16+]
0.10, 1.00, 1.45, 2.30, 3.05, 3.25, 4.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Наши. [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Екатерина. Фавориты". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.05 Т/с "Тайны следствия-8". [16+]
2.45, 3.40 Т/с "Морозова". [16+]
4.35 Перерыв в вещании.

### БСТ
7.00 "Сәләм".
10.00 "Ете егет". [12+]
10.45 История одного села. [12+]
11.00 Автограф. [12+]
11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).
11.45, 13.45, 4.00 Интервью. [12+]
12.00 Тайм-аут. [12+]
12.30 Счастливый час. [12+]
13.30, 18.15, 22.30 Новости (на баш. яз).
14.00 Бәхетнамә.
15.00 Гора новостей. [6+]
15.15 Детей много не бывает. [6+]
15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]
16.00 "Бай". [12+]
16.45, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]
17.00, 22.00 Республика LIVE #дома. [12+]
17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]
17.45 Криминальный спектр. [16+]
18.00 Специальный репортаж. [12+]
18.50 Хоккей. "Трактор" (Челябинск) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.
23.00 Башкирские каникулы. [12+]
23.45 "Ҡурай даны". [12+]
0.00 Бәхетнамә. [12+]
1.00 Новости (на баш. яз). [12+]
1.30 Спектакль "Перед свадьбой". [12+]
3.30 Тормош. [12+]
4.15, 5.15 Телецентр. [12+]

## 15 НОЯБРЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Мосгаз. Последнее дело Черкасова". [16+]
0.15 Д/ф "Буран". Созвездие Волка". К 35-летию полета космического корабля. [12+]
1.15, 2.05, 2.50, 3.05, 3.35 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Наши. [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Екатерина. Фавориты". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.05 Т/с "Тайны следствия-8". [16+]
2.45, 3.40 Т/с "Морозова". [16+]
4.35 Перерыв в вещании.

### БСТ
7.00 "Сәләм".
10.00 Алтын тирмә. [12+]
10.45, 13.45, 17.45, 4.00 Интервью. [12+]
11.00, 3.30 "Дорога к храму". [6+]
11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).
11.45 Криминальный спектр. [16+]
12.00 Дознание. [16+]
12.15 Патриот РФ. [12+]
12.30 Счастливый час. [12+]
13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).
14.00 Бәхетнамә.
15.00 Гора новостей. [6+]
15.15 "КультУра". [6+]
15.30 МузКәрәҙ. [6+]
16.00 Автограф. [12+]
16.45, 20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]
18.00, 3.00 Тормош. [12+]
19.00, 4.15, 5.15 Телецентр. [12+]
20.00 Сәнгелдәк. [6+]
20.30 Телецентр.
22.00 Историческая среда. [12+]
23.00 "Байык-2023". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]
0.00 Бәхетнамә. [12+]
1.00 Новости (на баш. яз). [12+]
1.30 Спектакль "Сумерки". [12+]

## 16 НОЯБРЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 14.15, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 Премьера. "Давай поженимся!". [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Мосгаз. Последнее дело Черкасова". [16+]
0.10, 1.00, 1.45, 2.30, 3.05, 3.25, 4.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Наши. [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Екатерина. Фавориты". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.05 Т/с "Тайны следствия-8". [16+]
2.45, 3.40 Т/с "Морозова". [16+]
4.35 Перерыв в вещании.

### БСТ
7.00 "Сәләм".
10.00 Башкирские каникулы. [12+]
10.45 Остаз. [12+]
11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]
11.30, 16.30, 20.45 Новости (на рус. яз).
11.45, 13.45, 16.15, 20.30, 4.00 Интервью. [12+]
12.00 Историческая среда. [12+]
12.30 Счастливый час. [12+]
13.30, 18.30, 23.50 Новости (на баш. яз).
14.00 Бәхетнамә.
15.00 Гора новостей. [6+]
15.15 "Сулпылар". [6+]
15.45 Городок АЮЯ. [6+]
16.00, 3.45 История одного села. [12+]
16.45, 20.15, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]
17.00 Своих не бросаем. [12+]
17.15 История признания. [12+]
17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]
17.45 Криминальный спектр. [16+]
18.00 Башкорттар. [6+]
19.00, 4.15, 5.15 Телецентр. [12+]
20.00 Сәнгелдәк. [6+]
21.20 Хоккей. "Спартак" (Москва) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.
0.20 Колесо времени. [12+]
1.20 Новости (на баш. яз). [12+]
1.50 Спектакль "Гильмияза". [12+]

## 17 НОЯБРЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 16.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 14.15, 17.10 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
15.10 Премьера. "Давай поженимся!". [16+]
16.15 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости.
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Фантастика". Следующий уровень. [12+]
23.45 Матадор. [16+]
0.45, 1.30, 2.15, 3.00, 3.50, 4.40, 5.15 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.15 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
16.30 Прямой эфир. [16+]
21.30 Ну-ка, все вместе! [12+]
0.25 Истории Большой Страны. [12+]
1.25 Х/ф "Бабушка на сносях". [16+]
4.56 Перерыв в вещании.

### БСТ
7.00 "Сәләм".
10.00, 18.00 "Йома". [6+]
10.30 Моя планета - Башкортостан. [12+]
11.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]
11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).
11.45 Криминальный спектр. [16+]
12.00, 19.45, 6.00 История одного села. [12+]
12.15, 13.45, 17.45 Интервью. [12+]
12.30 Счастливый час. [12+]
13.30, 18.30, 22.30, 2.45 Новости (на баш. яз).
14.00, 0.00 Бәхетнамә. [12+]
15.00 "Гора новостей". [6+]
15.15 Лит-ра. [6+]
15.45 "Этно-краса". [12+]
16.00 "Аль-Фатиха". [6+]
16.45, 6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]
19.00 Честно говоря. [12+]
20.00 Сәнгелдәк. [6+]
20.15 Ете егет. [12+]
21.00 Д/ф "Рядом с вами". [12+]
22.00 Своих не бросаем. [12+]
22.15 Специальный репортаж. [12+]
23.00 "Башҡорт йыры-2023". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]
23.45 Остаз. [12+]
1.00 Концерт Ражапа Вадутова. [12+]
3.15 Спектакль "Голубушки мои". [12+]
5.00 "Млечный путь". [12+]

## 18 НОЯБРЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Премьера. "Наше всё". [12+]
11.05 Премьера. "ПроУют". [0+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Премьера. "Поехали!". [12+]
13.10 Х/ф "Ширли-мырли". [16+]
16.00, 1.30, 2.15, 3.00, 3.45, 4.35, 5.15 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
16.40 "Горячий лед". Фигурное катание. Гран-при России-2023. Короткая программа. Этап V. Прямой эфир.
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.15 Премьера. "Я люблю мою страну". [0+]
19.15 Премьера. "Эксклюзив" с Дмитрием Борисовым. [16+]
20.05 Премьера. "Кто хочет стать миллионером?". [12+]
21.00 "Время".
21.35 "Сегодня вечером". [16+]
23.20 Х/ф Премьера. "Все прошло хорошо". [18+]

### РОССИЯ 1
5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.50 В кругу друзей.
12.50 Доктор Мясников. [12+]
14.50 Юмор! Юмор!! Юмор!!! [16+]
17.50 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "С чистого листа". [12+]
0.40 Х/ф "Обратная сторона любви". [12+]
4.10 Х/ф "Мама напрокат". [16+]
5.48 Перерыв в вещании.

### БСТ
7.00 "Доброе утро!" [12+]
7.30, 18.15 Новости (на баш. яз).
7.45 "Ҡурай даны". [12+]
8.00 "Бай". [12+]
8.30, 2.45 "Ете егет". [12+]
9.15, 2.30 Остаз. [12+]
9.30 Новости СВО (на рус. яз). [12+]
9.45 Своих не бросаем. [12+]
10.00 Крылья. [6+]
10.30 Елкән. [6+]
11.00 Гора новостей. [6+]
11.15 Лит-ра. [6+]
11.45 МузКәрәҙ. [6+]
12.15 Алтын тирмә. [12+]
13.00 Автограф. [12+]
13.30 Башкорттар. [6+]
14.00 Дарю песню. [12+]
16.00, 4.45 Колесо времени. [12+]
17.00 Концерт Рафиса Сирусина. [12+]
18.50 Хоккей. "Ак барс" (Казань) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.
21.30 Новости (на рус. яз).
22.00, 3.30 Республика LIVE #дома. [12+]
22.30 Новости недели (на баш. яз).
23.15 Караоке по-башкирски. [12+]
23.45 "Галиябану". [12+]
1.45 Новости недели (на баш. яз). [12+]
4.00 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]

5.45 Аль-Фатиха. [6+]
6.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз). [12+]

## 19 НОЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
6.00, 10.00 Новости.
6.10, 0.00, 0.45, 1.30, 2.15, 3.00, 3.50 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 "Часовой". [12+]
8.10 "Здоровье". [16+]
9.20 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
9.40 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 Премьера. "Играем свадьбу!". [12+]
11.05 "Жизнь других". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Премьера. "Повара на колесах". [12+]
13.10 "Видели видео?" [0+]
15.05 "Горячий лед". Фигурное катание. Гран-при России-2023. Произвольная программа. Этап V. Прямой эфир.
16.50 Д/ф "Огневое превосходство Аркадия Шипунова". Ко Дню ракетных войск и артиллерии. [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 Премьера. "Перепой звезду". [12+]
21.00 "Время".
23.00 Д/ф Премьера. "Институт Склифосовского. Век милосердия". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
6.10, 1.30 Х/ф "Проверка на любовь". [16+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00 Вести.
11.50 Большие перемены.
12.50 Х/ф "Без тебя". [12+]
17.50 Песни от всей души. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
3.13 Перерыв в вещании.

### БСТ
7.00 "Доброе утро!" [12+]
7.30 Новости (на баш. яз).
7.45 "Йома". [6+]
8.15 Тормош. [12+]
8.45 "Ҡурай даны". [12+]
9.00, 4.30 История одного села. [12+]
9.15 Орнамент. [12+]
9.30 Новости СВО (на баш. яз).
9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]
10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]
10.30 Книга сказок. [6+]
10.45 Городок АЮЯ. [6+]
11.00 Гора новостей. [6+]
11.15 Сулпылар. [6+]
11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
12.30 Новости недели (на баш. яз). [12+]
13.15 Башкирские каникулы. [12+]
14.00 Дарю песню. [12+]
15.00 Историческая среда. [12+]
15.30 Дорога к храму. [6+]
16.00 Честно говоря. [12+]
16.45 Спектакль "Таганок". [12+]
18.30 Ради добра. [12+]
18.45 Патриот РФ. [12+]
19.00 Специальный репортаж. [16+]
19.15 Әлләсе… [6+]
20.00 Елкән. [6+]
20.30 Преображение. [12+]
21.00 Дознание. [16+]
21.30, 3.45 Новости недели (на рус.яз.).
22.15, 3.15 Республика LIVE #дома. [12+]
22.45 Д/ф "Ядерный терроризм". [16+]
23.15 Концерт Вильдана Яруллина. [12+]
0.45 Спектакль "Великий обольститель". [12+]
4.45 "Млечный путь". [12+]
5.45 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]
6.00 Новости недели (на рус.яз.). [12+]

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

1445 һижри йыл.

| Ноябрь (Рабиғел ахыр - Йомадиәл әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 13 (29) дүшәмбе | 7:14 | 8:44 | 13:30 | 15:12 | 17:15 | 18:45 |
| 14 (1) шишәмбе | 7:16 | 8:46 | 13:30 | 15:11 | 17:13 | 18:43 |
| 15 (2) шаршамбы | 7:18 | 8:48 | 13:30 | 15:10 | 17:12 | 18:42 |
| 16 (3) кесе йома | 7:20 | 8:50 | 13:30 | 15:09 | 17:10 | 18:40 |
| 17 (4) йома | 7:22 | 8:52 | 13:30 | 15:08 | 17:09 | 18:39 |
| 18 (5) шәмбе | 7:24 | 8:54 | 13:30 | 15:07 | 17:07 | 18:37 |
| 19 (6) йәкшәмбе | 7:25 | 8:55 | 13:30 | 15:06 | 17:06 | 18:36 |

"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 21 НОЯБРЬ - БӨТӘ ДОНЪЯ ТЕЛЕВИДЕНИЕ КӨНӨ

Был иҫтәлекле дата 1996 йылда Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы Генераль Ассамблеяһы тәҡдиме менән барлыҡҡа килә. Телевидениеның донъя кимәлендәге мөһим хәл-ваҡиғаларға, төрлө ҡырҡыу проблемаларға халыҡтың иғтибарын йүнәлтеү, ҡарарҙар ҡабул итеүенә йоғонто яһау көсөн танып, дәүләттәргә был байрамды тыныслыҡ, хәүефһеҙлек, иҡтисади-социаль үҫеш һәм мәҙәниәттәргә бәйле тапшырыуҙар менән алмашып, билдәләргә, тиелә.

Байрам яңыраҡ барлыҡҡа килһә лә, телевидениеның тарихы XX быуаттың 20-се йылдарында башлана, ә 1933 йылда сығышы менән Рәсәйҙән булған Америка инженеры Владимир Зворыкин катод көпшәһен уйлап тапҡас, 1936 йылда Бөйөк Британия һәм Германияла, 1941 йылда АҠШ-та даими телетапшырыуҙар күрһәтелә башлай. Әммә телетапшырыуҙар Европала тик үткән быуаттың 50-се йылдарында ғына таралып китә.

Рәсәй телевидениеһы тарихы 20-се быуаттың 30-сы йылдарында Мәскәүҙә телетапшырыуҙарҙы аҙ кадрлы механик телевидение системаһы буйынса күрһәтеү тәжрибәһенән башлана. 1932 йылда беренсе тапҡыр хәрәкәт иткән һүрәт күрһәтелә. 1937 йылда Шаболовкала беренсе телеүҙәк ойошторола. 1938 йылда ул электрон системалар нигеҙендә эшләй, ә 1939 йылда даими телетапшырыуҙар башлана. ВКП(б)-ның 18-се съезы асылыуы тураһында фильм - тәүге тапшырыу булып иҫәпләнә. Бөйөк Ватан һуғышы был тармаҡ үҫешен тотҡарлай, әммә 1945 йылдың 7 майында Шаболовкалағы телеүҙәк яңынан эш башлай һәм 15 декабрҙән Европала беренсе булып аҙнаһына ике тапҡыр даими тапшырыуҙар күрһәтә. Юлдашлы телевизион тапшырыуҙар башланғас, телевидение бөтә илдәргә тарала һәм теләгән бер тапшырыуҙы ҡарау мөмкинлеге асыла. Бөгөн Рәсәй аналоглы телевидениенан цифралыға тулыһынса күсте, бушлай 20 канал эшләй, эре ҡалаларҙа 22-се төймәлә - төбәк телеканалы, шул иҫәптән Башҡортостан юлдаш телевидениеһы.

1956 йылда БАССР Министрҙар Советы Өфөлә телевизион вышкалы телеүҙәк төҙөү тураһында ҡарар ҡабул итә, ә 1959 йылдың 1 мартынан алып Башҡортостан телевидениеһының даими тапшырыуҙары аҙнаһына өс тапҡыр 2,5-шәр сәғәт күрһәтелә. Башта тик урындағы тапшырыуҙарҙы ғына ҡарап булһа, 1966 йылда ретрансляцион вышкалар Өфөгә еткәнсе төҙөлгәс, Үҙәк телевидение каналдары тапшырыуҙарын да күреү мөмкинлеге асыла. 1975 йылда Башҡортостан телевидениеһы төҫлөгә әйләнә. 2001 йылда "Башкортостан" дәүләт телерадиокомпанияһы, ә уның базаһында - Башҡортостан юлдаш телевидениеһы ("БСТ") ойошторола. Тапшырыуҙар ваҡыты тәүлегенә 18 сәғәт тәшкил итә. БСТ 50-нән артыҡ программа тапшыра, кинолар күрһәтә. Әйткәндәй, 1999 йылдан баш ҡаланың "Бөтөн Өфө" телеканалы эшләй.




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**43-сө һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Тренд. Илһамов. Ленин. Ҡаҙна. Халыҡ. Рубрика. Акр. Бит. Табын. Ыласын. Аудит. Көн. Ашлыҡ. Ауыл. ЗАГС. Алтын. Ел. Пи. Ҡояш. Нуғай. Аҫҡыс. Ғүмәров. Йәрәхәт.

**Вертикаль буйынса:** Аҙнабаев. Ҡарындаш. Бәхтизин. Иран. Урағай. Артыш. Таһыл. Касса. Йәрәбә. Нур. Сынаяҡ. Огайо. Диван. Хат. Алаша. Аҙаш. Ынйы. Ҡын. Ҡуныс.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**12 ноябрь "Балам"** (В. Емелева), спектакль-терапия. 18.00 16+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**18 ноябрь "Йәшәгән, ти..."** (М. Ладо), драмеди. 18.00 16+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**17 ноябрь "Йөрәк тауышым - йырҙарымда"** А. Һағынбаева концерты. 6+

**18 ноябрь "Музыку слушаем вместе".** 11.00 0+

**19 ноябрь "Сказка о Спящей царевне и семи богатырях"** (А.С. Пушкин), мюзикл. 15.00 0+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**13 ноябрь "Һәйбәт ҡыҙыҡай Лида"** (А. Ивашкин), трагикомедияһы менән Сибай ҡалаһында гастролдә. 12+

**14 ноябрь "Ынйыҡай менән Юлдыҡай"** (Х. Ғәбитов), шиғри драмаһы менән Сибай ҡалаһында гастролдә. 12+

**18 ноябрь "Волшебная лампа Аладдина"** (Л. Ниғмәтуллина инсц.), әкиәт. 13.00 0+

## А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**"Өҙөлгән өмөт"** (Н. Асанбаев), драмаһы менән **13 ноябрь** Дыуан районы Мәсәғүт, **14 ноябрь** Мәсетле районы Оло Ыҡтамаҡ, **15 ноябрь** Балаҡатай районы Янығбай, **16 ноябрь** Салауат районы Малаяҙ, **17 ноябрь** Салауат районы Арҡауыл, **18 ноябрь** Дыуан районы Арый, **19 ноябрь** Ҡыйғы районының Түбәнге Ҡыйғы, **20 ноябрь** Үрге Ҡыйғы, **22 ноябрь** Дыуан район мәҙәниәт йорттарында гастролдәр. 16+

**"Их, күгәрсенкәйҙәрем!"** (Ф.Бүләков), лирик комедияһы менән **13 ноябрь** Нефтекама, **14 ноябрь** Ағиҙел, **15 ноябрь** Яңауыл, **16 ноябрь** Туймазы ҡалаларында, **17 ноябрь** Туймазы районы Собханғол ауылында гастролдәр. 12+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**14 ноябрь "Ҡорос. Яугир ат яҙмышы"** (М. Ҡунафин), драмаһы менән Өфөлә гастролдә. 6+

**15 ноябрь "Минең ҡатынымдың исеме Морис"** (Р. Шарт), комедияһы менән Өфөлә гастролдә. 16+

**16 ноябрь "Ҡорос. Яугир ат яҙмышы"** (М. Ҡунафин), драма. 6+

**19 ноябрь "СуперЗаяц"** (И. Чернышев), әкиәт. 12.00 0+

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# ЭШҠЫУАРМЫ?



**Башҡортостанда 15 йәшлек Тимур Исмәғилев ауылында ыҫланған балыҡ һәм ит ризыҡтары етештерә башлаған.** Яңыраҡ ул үҙ эшен асыу өсөн ярты миллион һум дәүләт ярҙамы алған. 14 йәшендә Тимур шәхси эшҡыуар булып теркәлгән. Йәш бизнесмен ыҫланған балыҡ һәм ит деликатестарын әҙерләү йүнәлешен һайлаған. Үҫмер ыҫлау ҡорамалы өсөн аҡсаны үҙе эшләп тапҡан, уның продукцияһын таныштары, шулай уҡ Иглин, Сибай магазиндары ла һатып алған. "2023 йылда Тимур бәләкәй эшҡыуарлыҡҡа дәүләт ярҙамы сараларынан файҙаланды - 25 йәшкә тиклемге йәш эшҡыуарҙар өсөн субсидиялар конкурсында ҡатнашып, еңеүсе булды. Субсидияның күләме - 500 мең һум", - тип яҙҙы йәш эшҡыуар тураһында Иглин районы башлығы Гүзәл Насирова.

АФАРИН!




# МОСТАЙ ШИҒРИӘТЕ...

## илһөйәрлек тәрбиәләй

**Халҡыбыҙға бөйөк шағир һәм лайыҡлы ул бүләк иткән октябрҙең республикала Мостай исеме аҫтында, Мостай айы булараҡ үтеүенә күнеккәнбеҙ инде. "Мостай уҡыуҙары" төбәк-ара әҙәби-ижади конкурсында еңеүселәрҙең баш ҡалаға йыйылыуы тантанаһы иһә ошо төрлө сараларҙың шартлы рәүештә йомғаҡлау өлөшө булараҡ ҡабул ителде һәм ул ысын мәғәнәһендә Шиғриәт һәм Талант байрамына әүерелде.**

БР Мәғариф министрлығы, Башҡортостан мәғарифты үҫтереү институты, Өфө ҡала округы хакимиәтенең Мәғариф идаралығы, Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия, Өфө фән һәм технологиялар университеттары, М. Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһы тарафынан Мостай Кәрим исемендәге фонд менән берлектә ойошторолған "Мостай уҡыуҙары"ның төрлө этаптарында ҡатнашыусы мәктәп уҡыусылары, студенттар, уҡытыусылар һаны 11 меңдән ашып киткән. Бәйгенең "Интернет-викторина" тип аталған өлөшөндә лә Башҡортостандан тыш, Ҡурған, Ырымбур, Силәбе, Свердловск, Һарытау, Һамар өлкәләре, Татарстан Республикаһы, Мәскәү, Санкт-Петербург ҡалалары, Ҡаҙағстан, Үзбәкстандан әүҙем ҡатнашыусылар һаны ғына ла 10 мең ярымдан күберәк булған. Тимәк, йылдан-йыл конкурстың даирәһе артыуы күҙәтелә. Быйыл шулай уҡ М. Кәримдең тормошо һәм ижадына бағышлап, "Беҙҙең өйҙөң йәме" тип аталған квиз-уйын да үткәрелгән һәм унда республика мәктәптәре командалары ҡатнашҡан, еңеүселәр билдәләнгән.

Шулай ҙа конкурстың иң-иң тулҡынландырғыс өлөшө ул, моғайын да, шиғырҙы тасуири һөйләүселәр араһында барған ярыштыр. "Атасаҡ таң, киләсәк яҙ өсөн..." - уның исеме лә хәҙерге заманға бик ауаздаш һайланған, ил тойғоһо, ошо илде һаҡлар өсөн ҡулына ҡорал алырға мәжбүр булған улдар өсөн хәүеф хисе бөгөн һәр йөрәктә йәшәй. Ошондай ваҡытта ла ижадҡа урын барлығы, хатта тап ошо мәлдә халыҡтың Шағир һүҙенә мохтажлығын да күрһәтте был бәйге. Еңеүселәрҙең республиканың төрлө төбәктәренән булыуы ла уға бер төҫ өҫтәне. 5-6 кластар араһында еңеүсе исеменә лайыҡ булған Наилә Байегетова, мәҫәлән, Баймаҡ лицей-интернатынан. Наилә лә, 9-11 кластар араһында иң яҡшыһы булған Бөрйән районы Әбделмәмбәт мәктәбе уҡыусыһы Лиана Мәхмүтова ла бындай бәйгеләрҙе "күңел үҫтереүсе" сара тип атаны. Эйе, интернет заманында һинең баш ҡалаламы, әллә йыраҡ бер төбәктәме йәшәүеңдә айырма юҡ. Тик шиғыр уҡырға яратыу, уны аңлау, тасуири һөйләү бар кешегә лә тигеҙ бирелгән һәләт түгел. Бының өсөн йөрәгеңдең матурлыҡҡа, изгелеккә асыҡ булыуы кәрәк. Уларҙы бер ҡорға туплап, ярыш ойоштороп, иң-иңдәрен билдәләп сәм һалыуы менән дә был конкурстың әһәмиәте иҫ киткес. Тимәк, Мостай шиғриәте аша ул балаларҙың күңеленә Тыуған ил, Урал, Иҙел, гражданлыҡ, илһөйәрлек төшөнсәләре лә һалына.

Шағирҙың ҡыҙы, М. Кәрим исемендәге фонд директоры Әлфиә Мостай ҡыҙы ла йылдан-йыл конкурстың дәрәжәһе үҫеүен билдәләне. "Башта мәктәп программаһына ингән әҫәрҙәрҙе тасуири һөйләү өҫтөнлөк итһә, хәҙер балалар, студенттар фәлсәфәүи шиғырҙарҙы һайлай һәм уларҙы аңлап, йөрәгенән үткәреп һөйләй. Һеҙ - халҡыбыҙҙың, йәмғиәтебеҙҙең киләсәге, сөнки китап уҡыған кеше башҡаларҙан бер башҡа юғарыраҡ була, бының өсөн һеҙгә рәхмәт. Атайым һәр ваҡыт уҡыусылары өсөн ижад итте: әйткән һүҙе уҡыусыһына барып етәме, ул уны аңлаймы - быға бер ҡасан да битараф булманы. Һеҙ уны уҡыйһығыҙ икән, тимәк, ул хәҙерге заманда ла яратҡан шағир, яҙыусы булып ҡала. Әҫәрҙәре буйынса төшөрөлгән фильмдар, ҡуйылған спектаклдәр һәм был сара ла ошо хаҡта һөйләй", - тине ул.

Быйыл 14-се тапҡыр үткәрелгән "Мостай уҡыуҙары"ның шиғри бәйгеһе еңеүселәре итеп 5-6-сы кластар араһында Баймаҡтан Наилә Байегетова, 7-8-се кластар араһында Стәрлетамаҡтың 3-сө гимназияһынан Алһыу Татлыбаева менән Өфөнөң 84-се татар гимназияһынан Тимур Бикбулатов, 9-11-сы кластар араһында Бөрйәндән Лиана Мәхмүтова менән Архангел районы Архангел ауылының 2-се мәктәбе уҡыусыһы Нәркәс Ғайсарова билдәләнде. Студенттар араһында Өфө фән һәм технологиялар университеты студенты Йәнгүзәл Зәйнуллина, ә уҡытыусылар араһында Өфөнән Лилиә Маркелова үҙ төркөмдәрендә еңеү яуланы.

**Әйткәндәй, ошо саранан һуң бер нисә көн үткәс, шағирҙың ҡыҙы - М. Кәрим исемендәге фонд директоры Әлфиә Мостай ҡыҙы гимназия уҡыусыларына атаһы исемендәге гранттар тапшырҙы. Был юлы бындай бүләккә Азалия Ғиләжетдинова, Айһылыу Сураҡова, Булат Хилажев, Аида Ғөбәйҙуллина, Самира Ишембаева, Марат Янбаев, Ғәлиә Ширғазина, Сәйҙә Ибраһимова, Инсаф Ғөзәйеров, Камила Йосопова һәм Мария Полюдова *(һүрәттә)* лайыҡ булды.**

**Ләйсән ВӘЛИЕВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ШАУЛЫ БАҘАР...

## бурҙы йәшерер

Йәш ҡайынға терәлеп, ҡарт ҡайын ҡырҡ йыл йәшәгән.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Егерме биштә һәр кем талантлы, талантты илле йәшкә тиклем һаҡлауы ҡыйын.

**(Эдгар Дега).**

Шундай кешеләр ҙә була: уларға кешеләрсә мөнәсәбәт күрһәтә башлаһаң, хайуанға әйләнә.

**(В. Ключевский).**

Ҡатын-ҡыҙ мөхәббәттә һәм нәфрәттә ирҙәргә ҡарағанда хайуаныраҡ.

**(Фридрих Ницше).**

Нимәгәлер ышанырға урыны булған һәм юғалтыр нәмәһе булмаған кешеләр - ер йөҙөндәге иң ҡурҡыныс кешеләр.

**(Эдмунд Берк).**

Кеше йәне бик ябай, ә асыу үтә ҡатмарлы.

**(Филипп Сидни).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер кеше Сократҡа килгән дә, шулай тип һораған:**

**- Ә беләһеңме миңә нимә тине һинең турала бер дуҫың?**

**- Туҡта! - тип һүҙенән бүлдергән уны Сократ. - Тәүҙә әйтә торған һүҙеңде өс ҡат иләк аша үткәр...**

**- Өс ҡат иләк аша?.. - тип аптыраған теге кеше.**

**- Кемгәлер ниҙер әйтер алдынан һүҙеңде өс ҡат иләк аша үткәрергә кәрәк. Иң тәүҙә - Хәҡиҡәт иләге аша үткәр. Һин хәҙер миңә әйтәсәк һүҙҙең ысынлап та Хәҡиҡәт икәненә үҙең ышанаһыңмы? - тигән Сократ.**

**- Юҡ. Мин ишетеп кенә ҡалдым...**

**- Бик яҡшы. Тимәк, һин был һүҙеңдең Хәҡиҡәтме, түгелме икәнен белмәйһең. Улайһа, һүҙеңде икенсе - Изгелек иләге аша үткәрәйек. Һин минең дуҫым тураһында ниндәйҙер яҡшы хәбәр әйтергә теләйһеңме? Юҡ, киреһенсә, тиһеңме? Тимәк, - тип дауам иткән Сократ, - һин минең дуҫым тураһында ниндәйҙер насар һүҙ әйтергә йыйынаһың, әммә ул һүҙҙең дөрөҫмө, түгелме икәнен белмәйһең... Хәҙер һин әйтәсәк хәбәрҙе өсөнсө иләк - Файҙа иләге аша үткәрәйек. Һин әйтергә теләгән һүҙ минең өсөн файҙалымы, кәрәкме ул миңә?**

**- Юҡ, файҙалы ла, кәрәкле лә түгел... - тип мығырҙаған әлеге кеше.**

**- Шулай итеп, һин миңә әйтергә теләгән хәбәрҙең файҙаһы ла, кәрәге лә, изгелеге лә юҡ, шулай булғас, ул хаҡта һөйләп, минең һаулыҡҡа зыян килтереү һиңә нимәгә кәрәк? Кәрәкмәй, әлбиттә. Һин минең һау-сәләмәт булыуымды теләйһең икәненә ышанам, шуға ул хәбәреңде тыңлап тормайым..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән ВӘЛИЕВА,
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |
| **Матбуғат таратыу** | **252-39-99** |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
10 ноябрь 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы –
**ПР905**
Тиражы - 3177
Заказ - 1547